ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Ҡиске Өфө

14-20 март (буранай) 2015

№ 11 (637)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Башҡорттар Ҡаҙанға яһаҡ ташыуҙы уңайһыҙ тип тапҡан һәм батшанан уларҙың ерендә ҡала төҙөүҙе, баҫҡынсыларҙан һаҡланыу өсөн ғәскәр ебәреүҙе һораған... Стрелецтар тау башында төҙөгән ҡаласыҡ башта шул тау исеме менән Торатау тип атала, ә ул имән бүрәнәләрҙән стена менән уратып алынғас, урындағы халыҡ һәм ҡаҙаҡтар уны Имәнҡала тип йөрөтә башлай. Бер үк ваҡытта ҡаласыҡ Өфө тип тә йөрөтөлә.*

***Р.Г. Игнатьев.***

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Шундай награда бар: халыҡ һөйөүе,**

**башҡа исемдәр иһә "ыҙғыш алма"һы ғына ул**



**3**

**"Капремонт" хаҡында алты һорау**



**5**

**Күренекһеҙ төп геройҙы уйнағансы...**

**характерлы эпизодик ролгә өҫтөнлөк бирәм**



**8-9**

**Аллаһтың барлығын таныу ғына...**

**иманлылыҡ тигәнде аңлатмай әле**



**12-13**

**ТВ-программа 14**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Иҡтисади көрсөк һеҙҙең тормошоғоҙға үҙгәрештәр индерҙеме һәм уның эҙемтәләрен еңеләйтеү сараһын низә күрәһегеҙ?

***Ильяс ҠАҺАРМАНОВ, бюджет өлкәһендә эшләүсе, Күмертау ҡалаһы:*** Минең ғаиләмә финанс көрсөк йыл башында уҡ үҙен ныҡлап һиҙҙерҙе - шәхси компанияла эшләүсе ҡатынымды эшенән ҡыҫҡарттылар. Икенсе урында эш эҙләүе әлегә ыңғай һөҙөмтәләр бирмәй, шуға күрә ғаиләбеҙ бюджетын тик минең эш хаҡым ғына тулыландыра. Ял көндәре еңел машинамда такси хеҙмәте күрһәтергә сығыуым элекке кеүек килем килтермәй - таксила йөрөүсе халыҡ ҡырҡа кәмене. Шуға күрә, иҡтисади көрсөк эҙемтәләрен еңеләйтеү өсөн, тәү сиратта, ғаилә сығымдарын кәметтек. Мәҫәлән, хәҙер ял һайын балалар менән кинотеатр, уйын майҙансыҡтарына йөрөмәйбеҙ. Шулай уҡ йорт йыһаздарын яңыртырға, тигән уйыбыҙҙы ла әлегә кисектереп торҙоҡ. Йәйге ялыбыҙҙы ла, йылдағыса, диңгеҙ яры буйында түгел, ә ауылда һәм баҡсала үткәрергә иҫәп тотабыҙ. Ауылда туғандарға бесән эшләшәсәкбеҙ, ә улар беҙгә ит бирәсәк. Баҡсала ла быйыл арыу ғына тырышып, ҡышҡылыҡҡа етерлек йәшелсә-емеш үҫтереп алырға кәрәк буласаҡ. Иҡтисади көрсөк ғаилә бюджетын алып барыуға ла үҙгәреш индерҙе - хәҙер һәр бер килемде һәм сығымды, бәләкәй суммамы ул, ҙурмы - махсус дәфтәргә теркәп барабыҙ. Был ысул кәрәкмәгән сығымдар эшләүҙән ҡотҡара. Илдәге иҡтисади хәлдең тотороҡһоҙ булыуын күҙ уңында тотоп, әлеге ваҡытта финанс йәһәттән нисек кенә ауыр булмаһын, һәр эш хаҡының 10 процентын һаҡлауға һалып барабыҙ. Элек күпселек осраҡта бер көн менән генә йәшәлде, ләкин хәҙер хәл бөтөнләй икенсе. Алдағы көндә ваҡиғалар тағы ла ҡуйырып китеп, ниндәйҙер көтөлмәгәнлек килеп тыуһа, кәмендә өс-дүрт ай мохтажлыҡ кисермәйәнсә йәшәү яйын ҡайғыртабыҙ. Бына ошо рәүешле иҡтисади көрсөккә бирешмәйенсә йәшәп ятҡан көн. Артыҡ борсолоуҙан, паникаға биреләүҙән хәл үҙгәрмәйәсәк, тимәк, тынысланырға һәм алдағы көндәрҙә хәлдән килгән тиклем яҡшы йәшәү өсөн тырышырға кәрәк. Ауыр ваҡыттар мәңгегә һуҙылмаҫ һәм алда беҙҙе бәхетле, мул тормош көтөүенә ышанам. Бары тик әҙ генә түҙергә кәрәк.

**(Дауамы 2-се биттә).**

КЕМ АЛЫҠ?

## МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫБЫҘ!

31 мартҡа тиклем быйылғы йылдың икенсе яртыһы өсөн **50665** индекслы "Киске Өфө"гә ваҡытынан алда яҙылыу бара. Ташламалы хаҡ **513 һум 72 тин** тәшкил итә. Апрелдә хаҡтарҙың артыу ихтималлығын күҙҙә тотоп, гәзитебеҙгә әле үк яҙылып ҡуйырға кәңәш итәбеҙ.

Мартта гәзитебеҙгә яҙҙырып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ араһынан кемдәрҙер **Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан йыры" йыйынтығын, Шәүрә Шәкүрованың "Өфө вокзалы", "400 башҡорт халыҡ йыры", "Антология поэзии Башкортостана", Ә. Әсфәндийәровтың "История сел и деревень Башкортостана", башҡортса "Дини календарь", Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарын алып ҡыуаныуы ихтимал. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# КАМИЛЛАШЫУҘЫ...

## дауам итер әле гәзитебеҙ

**Йылдар дауамында бер үк кимәлдә ҡалыусы, яҙыу йәһәтенән дә, материалдарҙың биреләше яғынан да бер үк сифатта булыусы, яңы авторҙар йәлеп итеү буйынса эшмәкәрлек алып бармаған баҫмалар ҙа була. Уларҙы өйрәнелгән ғәҙәт буйынса алдыраһың, уҡыйһың, ләкин үҙең өсөн бер яңылыҡ та тапмайһың, ҡыҙыҡ һәм үҙенсәлекле сығыштарға ла юлыҡмайһың. Камиллашыу, бар йәһәттән дә яҡшырыуҙы үҙ бурысы итеп алмаған гәзит-журналдар менән тулған беҙҙең ваҡытлы матбуғат баҙары. Шундай бер төрлөлөк араһында үҙенең йөҙө булған, уҡыусыһына һәр саҡ ҡыҙыҡлы мәғлүмәт тәҡдим итеүсе, төрлө быуын вәкилдәренә тәғәйенләнгән гәзитебеҙ - "Киске Өфө"бөҙ барлығына ҡыуанып бөтә алмайым.**

**(Дауамы 2-се биттә).**



12+

✓ Бар яңылыҡтарҙы ла, фильмдарҙы ла интернеттан белергә һәм ҡарарға мөмкин. Еңел машина менән бик кәрәк саҡта ғына ҡулланабыҙ, ә эшкә автобус менән йөрөйбөҙ.



УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# КАМИЛЛАШЫУҘЫ... дауам итер әле гәзитебеҙ

(Башы 1-се биттә).

Үҙ ваҡытында мин гәзит-журналдарға "ҡаш өҫтөнән" генә, "бармаҡ араһынан" ғына ҡараған кеше инем. Мине ҡыҙыҡтырырлыҡ, күңелемә хуш килерлек нимә тәҡдим итә ала һуң хәҙерге гәзит-журналдар, тигән фекерем "Киске Өфө" менән танышҡандан һуң ҡырҡа үҙгәрҙе. Эйе, тәү ҡарашҡа гәзит ваҡытлы матбуғат донъяһына ниндәйҙер яңылыҡ та индермәй кеүек, ләкин уның биттәрендә донъя күргән һәр мәҡәлә үҙе бер донъя.

Матур-матур ғаиләләр менән танышҡандан һуң күпме егет-ҡыҙҙар дәртләнеп үҙҙәренең ояларын ҡорҙо икән? Ә ғилемле, зыялы замандаштарыбыҙҙың өлгөһөндә үҙе лә фән, медицина, хоҡуҡ юлын һайлаусы, ауыл хужалығы тармағын үҙ итеүсе һәм башҡа бик күп төрлө өлкәләрҙә үҙен тапҡан йәштәребеҙҙең һаны күпмегә етте икән? Гәзит битендә күркәм башҡорт исемдәрен йөрөткән балаларҙы күреп, үҙ балаһына ла халҡыбыҙҙың күңелгә ятышлы, ҡолаҡҡа яғымлы исемдәрен ҡушыусыларҙың иҫәбеһаны юҡтыр, тип уйлайым. Шулай уҡ "Киске Өфө"нөң башҡа рубрикалары аҫтында баҫылған мәҡәләләренең дә уҡымлы, фәһемле, кәрәкле икәнен берәү ҙә инҡар итмәҫ, моғайын.

Гәзиттең тағы бер күҙгә ташланып торған ыңғай яғы - ул да булһа, туған телебеҙгә ҙур иғтибар бүлеүе. Баҫмала башҡорт теленә ҡағылышлы һәр яңылыҡ даими бирелә килә. Ул башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары бәйгеһе булһынмы, телгә ҡағылышлы башҡа төрлө сарамы - "Киске Өфө" бер ниндәй ваҡиғаны ла күҙ уңынан ысҡындырмай. Үҙебеҙ ҡәҙерләмәһәк, һанламаһаҡ, телебеҙҙе башҡалар ҙа ҡағасаҡ - ошо хәҡиҡәтте аңлайышлы, ләкин ялҡытмайынса ғына күңелгә һала белә гәзит хеҙмәткәрҙәре лә, авторҙары ла.

Етди, көнүҙәк темалар күтәреүе менән бер рәттән, гәзит тәрән йөкмәткеле һәм зирәклеге менән дә оҡшай миңә. Тупаҫлыҡҡа, ике йөҙлөлөккә, мәғәнәһеҙлеккә урын юҡ гәзиттә - был да юғары баһаға лайыҡ. Гәзит артабан да камиллашыу юлынан тайпылмаҫ, тип ышанам, сөнки камиллыҡтың юҡтыр сиктәре, тигән фекерҙе тулыһынса хуплайым.

**Дилә ВӘЛИЕВА.**
**Өфө ҡалаһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Иҡтисади көрсөк һеҙҙең тормошоғоҙға үҙгәрештәр индерҙеме һәм уның әҙемтәләрен еңеләйтеү сараһын нимә күрәһегеҙ?



(Башы 1-се биттә).

***Әлфиә САДИҠОВА, Волгоград ҡалаһы:*** Иҡтисади көрсөктө һәр кемде, һәр ғаиләне аҡсаһын аҡыллы тотоноуға өйрәтеүсе ваҡиға, тип ҡарайым. Быны үҙемдең ғаиләм миҫалынан алып әйтә алам. Ирем хәрби часта хеҙмәт итә, ә мин дәүләт учреждениеһында бухгалтер булып эшләйем. Беҙ йәшәгән төбәктә ҡыҫҡартыуҙар әүҙем бара, ләкин беҙгә ул әлегә ҡағылманы. Шулай ҙа иремә квартал һайын бирелгән премия булмаҫҡа ла мөмкин, тигән иҫкәртеү яһағандар. Ғаилә бюджетын арыу ғына тулыландырған килемдең булмауы ныҡ һиҙеләсәк, әлбиттә. Башҡортостандан алыҫ йәшәү ауылдан ит, бәрәңге, башҡа йәшелсә-емеш алып килеү мөмкинлеге бирмәй, шуға күрә барыһын да һатып алырға тура килә. Үҙем сәй, бутҡа менән ҡәнәғәтләнһәм дә, ир кешегә көн һайын итле ризыҡ ашарға кәрәк. Шуға күрә ғаилә кәңәшмәһендә һөйләштек тә, ирем төшкө һәм киске ашты часть ашханаһында ашаясаҡ, тигән ҡарарға килдек. Ә ял көндәрендә мин уны итле аш-һыу һәм башҡа тәмлекәстәр менән һыйлайым. Үҙем дә ашауға, кейемгә, биҙәнеү-төҙәнеү әйберҙәренә сығымдарҙы ҡырҡа кәметтем. Элек төшкө ашты хеҙмәттәштәр менән ашхана йәки кафела ашаһам, хәҙер өйҙә бешереп алып барам. Магазинға барғанда өйҙә яҙып алып сыҡҡан исемлеккә ярашлы ғына тауар һатып алабыҙ, ә артығын алыуҙан тыйылабыҙ. Өҫ-башыма ла, элекке кеүек, кәрәккән-кәрәкмәгән әйбер һатып алмауыма ҡыуанып, ирем: "Был көрсөк бик урынлы булды әле, кейем шкафы еңел тын алып ҡалды", - тип көлә.

Ашау-эсеүгә, кейемгә тотонолған сығымдар менән бергә телефон бәйләнеше, кабель телевидениеһы, бензин өсөн сарыф ителгән аҡсаны ла әҙәйттек. Әгәр элек икенсе төбәктә йәшәүсе туғандар, иптәштәр менән сәғәттәр буйы һөйләшһәк, хәҙер был ваҡыт минуттарға ғына ҡалды. Кабель телевидениеһынан бөтөнләй баш тарттыҡ, сөнки бар яңылыҡтарҙы ла, фильмдарҙы ла интернеттан белергә һәм ҡарарға мөмкин. Еңел машина менән бик кәрәк саҡта ғына ҡулланабыҙ, ә эшкә автобус менән йөрөйбөҙ. Ғөмүмән, хәҙер аҡсаны һанап ҡына тотонабыҙ һәм күп сығымдар эшләмәҫкә тырышабыҙ. Кемгәлер, бәлки, беҙҙең сығымдарҙы шул тиклем ҡыҫыуыбыҙ көлкө күренер, ләкин көрсөктөң күпме булырын аныҡ ҡына берәү ҙә белмәгән ваҡытта был саралар үҙен аҡлай, тип ышанам. Әлбиттә, икебеҙҙең эш хаҡыбыҙ элекке кеүек үк йәшәргә етә, ләкин беҙ үҙебеҙҙең алға тиҙ арала ике кредитыбыҙҙы ҡапларға тигән бурыс ҡуйғанбыҙ. Иҡтисади көрсөк килеп тыумаһа, ай һайын билдәләнгән күләмдә генә аҡса индереп, йылдар дауамында кредит тотҡононда йәшәр инек. Шулай уҡ бер аҙ аҡса йыйнап ҡуйыу ҙа ҡамасауламаҫ, тигән фекерҙәбеҙ. Әлегә тиклем был хаҡта уйлап та ҡарамай инек. Тимәк, иҡтисади көрсөктөң дә ыңғай яҡтары бар.

***Венер НАСИРОВ, хаҡлы ялда, Өфө ҡалаһы:*** Был иҡтисади көрсөк минең ғүмеремдә беренсеһе түгел. Илдең һәм донъя иҡтисадының төрлө ваҡыттарын күрергә һәм үткәреп ебәрергә тура килде - бирешмәнек. Ағымдағы көрсөк тә уҙып китер, һаулыҡ ҡына булһын. Әлегә тиклем дә һәр нәмәлә экономиялау сараһын күрҙек, хәҙер билде тағы ла нығыраҡ ҡыҫырға тура килә. Мәҫәлән, элек икмәкте һатып алып ҡына ашаһаҡ, хәҙер көн һайын тиерлек өҫкә үрмәләгән хаҡтар артынан ҡыуып етә алмағас, ҡатыным үҙе бешерә башланы. Башҡа аҙыҡ-түлеккә лә хаҡтар бер урында тормай, шуға күрә төрлө магазиндағы хаҡтарҙы сағыштырып, осһоҙораҡ тауар һатып алыу бурысы көндәлек эшебеҙгә әйләнде. "Һәйбәт булды әле, исмаһам, көнө буйы телевизорға тексәйеп ултырмайһың", - ти ҡатыным. Ашаған ризыҡтың һаулыҡҡа йоғонтоһо ҙур, шуға күрә аҙыҡ-түлектә экономиялау һаулығыңды хәүеф аҫтына ҡуйыуға тиң. Шуға күрә хәлдән килгәнсә сифатлы аҙыҡ-түлеккә өҫтөнлөк бирәбеҙ. Элек тәмәке лә көйрәтә инем, ләкин кәләш, йә тәтенеңдә борлатаһың, йә икмәк ашайһың тигәс, ташларға тура килде. Быныһы шәп булды - тын алыуҙары еңеләйеп, йәшәреп киткәндәй булдым. Аҙыҡ-түлеккә хаҡ менән бергә дарыуҙар ҙа ҡыйбатлана - ауырырға ла ҡурҡыта хәҙер, шуға тән-йән тыныслығын һаҡлап көн үтә. Фатирға, электр утына, газға түләүҙәр ҙә ауырлашты, сөнки пенсияны әҙ генә өҫтәп ебәрәләр ҙә, хаҡтарҙы ике тапҡырға күтәрәләр. Ләкин зарланып ултырыуҙан пенсия артмаясаҡ, хаҡтар төшмәйәсәк, шуға күрә барына шөкөр итеп, тыныс ҡына көн итәбеҙ. Иң мөһиме, дәүләт пенсиябыҙҙы ваҡытында һәм тулы килеш биреп торһон.

***Гүзәлиә МОРАТШИНА, студент, Силәбе ҡалаһы:*** Атай-әсәйем мине йылына 92 мең түләп, юғары уҡыу йортонда уҡыта. Иҡтисади көрсөк арҡаһында атайымдың эш сәғәттәре, ярашлы рәүештә, эш хаҡы ла ҡыҫҡарҙы. Был беҙҙең ғаиләбеҙ бюджетына ҙур зыян килтерҙе, сөнки әсәйемдең эш хаҡы бик бәләкәй. Ләкин атайым ҡул ҡаушырып ултырмай, ә төрлө ҡалымға йөрөй. Көрсөк булыуына ҡарамаҫтан, төҙөлөш эштәре дауам итә, шуға күрә уның газ менән иретеп йәбештереү һөнәренә һорау ҙур. Әсәйем дә эштән буш ваҡытында шәл, ойоҡбейәләй бәйләп һата, заказ буйынса төрлө тәм-том бешерә. Нисек булһа ла, икенсе ярты йыллыҡҡа түләү өсөн аҡса йыйҙылар. "Балам, ауыр ваҡыттар үтә ул, уҡыуыңды ғына ҡайғырт", тиҙәр. Мин атай-әсәйемдең ышанысын аҡлаясаҡмын һәм эшләй башлағас, уларҙы бер нәмәгә лә мохтаж итмәйәсәкмен.

**Гөлназ САФУАНОВА**
**яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓"Башнефть" акционерҙар нефть компанияһы" асыҡ акционерҙар йәмғиәте акционерҙары компания директорҙары советы составын раҫланы. Директорҙар советына Рәсәй вәкилдәре - Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Рөстәм Мәрҙәнов, Башҡортостандың ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры Евгений Гурьев индерелде.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Торлаҡ-коммуналь хужалыҡты үҙгәртеп ҡороуға булышлыҡ итеү фондының күҙәтеү советы рәйесе Сергей Степашин һәм Фондтың генераль директоры Константин Цицин менән осрашты. Осрашыу барышында яҡтар Башҡортостанда граждандарҙы авария хәлендәге торлаҡ фондынан күсереү буйынса адреслы программаны тормошҡа ашырыу барышын тикшерҙе.

✓Башҡортостанда граждандарҙы авария хәлендәге торлаҡ фондынан күсереү буйынса 2013-2017 йылдарға ике адреслы программа раҫланған, уларҙың дөйөм суммаһы 14,3 миллиард һумдан ашыу тәшкил итә. Беренсе этапты (2013-2014 йылдар) ғәмәлгә ашырыуға Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ фонды, республика һәм муниципаль бюджеттарҙан 3,336 млрд һум йүнәлтелгән. 2014 йылда икенсе этапты (2014-2015 йылдар) тормошҡа ашырыу башланды, уның барышында 6 759 гражданды күсереү планлаштырыла. Ошо маҡсатҡа 3,183 млрд һум бүленгән.

✓2015 йылда Башҡортостанға юл хужалығы өлкәһендә төбәк программаларының маҡсатлы күрһәткестәренә өлгәшеү өсөн 1 миллиард 651 миллион 344,9 мең һум бюджет-ара трансферт бүленәсәк. Тейешле ҡарарға Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте Рәйесе Дмитрий Медведев ҡул ҡуйған.

✓Башҡортостан артистары - Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле һәм "Арғымаҡ" этно-рок төркөмө 24 мартта Европала үтәсәк Науруз байрамында ҡатнашасаҡ. Төрки илдәрен берләштергән Науруз байрамы ТӨРКСОЙ халыҡ-ара ойошмаһы ойошторған ғәҙәти сараларҙың береһенә әүерелде. Быйыл уны киң күләмдә үткәреү планлаштырыла. Наурузды бер юлы өс Европа илендә - Париж (Франция), Кёльн (Германия) һәм Вена (Австрия) ҡалаларында билдәләйәсәктәр.

✓ *Халыҡҡа файҙалы эшең юҡ икән - һине берәү ҙә хөрмәт итмәйәсәк. "Халыҡ һөйөүе" тип аталған юғары наградаға лайыҡ булыуы күпкә ауырыраҡ. Сөнки халыҡҡа ярамһаҡланып та, күстәнәс ташып та булмай.*



ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ…

**Бер ваҡыт "Киске Өфө" гәзитендә донъя күргән "Миҙал таҡҡан миҫалмы?" тигән мәҡәләләге хикәйәтте ҡабат иҫкә төшөргөм килә. Бөйөк шәхестәргә һәйкәлдәр ҡуйылған баҡса буйлап дәрес үткәреп йөрөгәндә бер шәкерт остазынан: "Ә нишләп бында һеҙгә һәйкәл юҡ?" - тип һораған. "Ниңә һәйкәл ҡуйылған?" тигәнгә ҡарағанда "Ниңә һәйкәл ҡуйылмаған?" тигән һорау күпкә яҡшыраҡ түгелме ни?" - тип яуаплаған уҡытыусыһы. Минең бөтә әйтергә теләгәндәремдең төп мәғәнәһе ошо хикәйәттә әйтеп бирелгән дә инде.**

# ШУНДАЙ НАГРАДА БАР: ХАЛЫҠ ҺӨЙӨҮЕ,

## башҡа исемдәр иһә "ыҙғыш алма"һы ғына ул

Беҙҙең китапхананың фойеһына юғары исемдәргә лайыҡ булған яҡташтарыбыҙҙың фотоһүрәттәре элеп ҡуйылған. Был минең яныма ингән кешеләрҙең йыш ҡына ошо темаға һүҙ башлауына сәбәп булып тора. Юҡ, стендтағы шәхестәргә берәүҙең дә дәғүә белдергәне юҡ. Уратып әйтелгән һүҙҙәрҙә "Ә бит мин дә лайыҡлымын" тигән мәғәнәне генә шәйләргә була. Дәүләт наградаларын алыу-алмау мәсьәләһе күберәк уҡытыусыларҙы борсой, шуға төрлө йылдарҙағы мәғариф бүлеге етәкселәре, РОНО методистары, мәктәп директорҙары адресына күп кенә үпкә һәм рәнйеш һүҙҙәре тыңларға тура килә. "Ыҙғыш алмаһы" булған ошо исемдәр бөтөнләй булмаһа ине, тип уйлап китәм. Әлбиттә, улар ғәҙел рәүештә иң лайыҡлыларға ғына бирелһә, ризаһыҙлыҡ ул тиклем көслө лә булмаҫ ине. Әммә арабыҙҙа йөрөгән артыҡ таланты ла булмаған, тырышлығы менән дә айырылып тормаған ҡәҙимге генә кешенең ҡапыл "атҡаҙанған" булып китеүен гәзит аша белеп, аптырауҙан артыбыҙға ултыра төшә яҙған саҡтарыбыҙ аҙмы ни?.. Ләкин бөгөн минең һүҙем дәрәжәләрҙе ғәҙел булмаған юлдар менән алған кешеләр хаҡында түгел. Киреһенсә, үҙҙәрен уларға лайыҡлы тип һанап та, ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында өлгәшә алмаған һәм шуның өсөн ғүмер буйы кемгәлер кенә тотоп йәшәгәндәр тураһында.

Кем нисектер, әммә мин берәй билдәле кешенең наградаһы юҡлығын белһәм, үҙем дә һиҙмәйенсә, "Тура ярып, туғанына ярай алмағандыр" тигән һығымта яһап ҡуям. Минеңсә, исем көҫәп йөрөгән әҙәмдәрҙең дә күбеһен, талантлы, уңған булыуҙарына ҡарамаҫтан, нәҡ шул әсе телдәре, тиҫкәре холоҡтары, хәлдәргә яраҡлаша, аҡ менән ҡаранан башҡа төҫтәрҙе айыра белмәгәндәре, ҡайһы саҡта ғүмерҙә табып булмаған дөрөҫлөктө юллап, башҡалар менән йәмһеҙләшеп-тәмһеҙләшеп йөрөгәндәре өсөн "күрә" һалып бармайҙар. Эргәләрендәге "дәрәжәле" хеҙмәттәштәрен улар йә хужаларға ярамһаҡланып, ошаҡ ташып, күстәнәс ташып йә һорап-таптырып алды, тип һөйләйҙәр. Ҡайһы берәүҙәр, ысынлап та, шундай юлдарға бара. Бәй, исем кәрәк булғас, һин дә бар һуң... Булдыра алмайһыңмы? Намыҫ ҡушмаймы? Шулай шул, ғорурлыҡты тапау, дәрәжәңде күтәрәм тип түбәнселеккә төшөү еңел эш түгел. "Ағиҙел" журналының уҙған йылғы һанында яҙыусы Наил Ғәйетбаев үҙенең "Өҙөк-йолҡоҡ хәтирәләр"ендә "Рәсәйҙең атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре" исемен алыу өсөн ниндәй көнгә төшөргә тура килеүен асыҡтан-асыҡ яҙып сыҡҡайны. Ул әле бөтә республикаға билдәле, юғары вазифа биләгән кеше. Ә бөйөк эштәр ҡылмаған, әммә "исемле" булырға теләгән бәндәләргә нимәләр аша үтергә яҙғанын һәр беребеҙ, моғайын, һиҙеп-аңлап торалыр.




Ҡайһы саҡ шулай ҙа була: теге йәки был сараларҙа кемделер иғлан итер өсөн башта оҙон-оҙаҡ итеп титулдарын, регалияларын һанайҙар һәм иң аҙаҡ "Фәлән Фәләнов" тиһәләр, был кешене берәү ҙә йүнләп белмәй булып сыға. Исемдәрҙе йыйыуын йыйған, ә эштәрен берәү ҙә белмәй. Киреһенсә лә килеп сыҡҡаны бар. Шулай бер йыйылышта мәғариф ветеранын "Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы" тип иғлан иттеләр. Ул трибуна артына сыҡты ла, "Һеҙ яңылыштығыҙ, минең ундай исемем юҡ", тине. "Мәғариф алдынғыһымы ни?" тип һоранылар. "Юҡ, уныһын да бирмәнеләр, мин бары өлкән уҡытыусы", тип яуапланы апай. Зал геү итеп ҡалды. "Ярай, бирмәһендәр, улайһа, беҙ, ошонда ултырғандар, Һеҙгә "Халыҡ уҡытыусыһы" тигән исем бирәбеҙ", - тип ҡысҡырҙы берәү һәм башҡалар көслө итеп ҡул сапты. Ҡарт педагог өсөн ошонан да ҙур шатлыҡ булыуы мөмкинме икән! Исеме юҡ, әммә халыҡ ул бар икән тип уйлай, булмаһа ла, иҫе китмәй, иң мөһиме, кеше эше менән уға лайыҡ булыуын күрһәткән. Ә бит ҡайҙа барһа ла, "Һеҙ беләһегеҙме, минең "атҡаҙанған" тигән исемем бар", тип үҙе таныштырып йөрөргә мәжбүр булған берәү тураһында ишеткәнем бар. Бының ни тиклем оят икәнен, кешеләр күңелендә төрлө шиктәр уятыуын, артында "ҡайһы ере менән алған икән" тип мыҫҡыллы шыбырлашыуҙары мөмкин икәнен уйламайҙыр инде ул.

Мин үрҙә телгә алған мәҡәләлә һүҙ Украиналағы низағтарға бәйле ҡайһы берәүҙәрҙең Андрей Макаревичтың дәүләт наградаларын тартып алырға теләүе тураһында барҙы. Әммә Макаревичты ошо наградалар Макаревич яһағанмы һуң? Тәүҙә үлемһеҙ йырҙары, "советский битлз" тип йөрөтөлгән легендар "Машина времени" ансамбле менән ул исемен мәңгеләштерҙе, ә миҙалдар, артистарға тейешле юғары исемдәр артисҡа һуңынан бирелде. Уларҙы тартып алған хәлдә лә, миллионлаған кеше өсөн Макаревич барыбер бөйөк музыкант һәм шәхес булып ҡаласаҡ.

Билдәле халыҡ мәҡәлен үҙгәртеп, "Исем кешене биҙәмәй, кеше исемде биҙәй" тип әйтке килә. Мәҫәлән, бөйөк физиктың ишегендә ни бары "Альберт Эйнштейн" тигән яҙыу ғына торған, уның Нобель премияһы лауреаты булыуын яҙыуҙың кәрәге лә булмаған. Тиҫтәләгән титулың булһын, әммә халыҡҡа файҙалы эшең юҡ икән, кешеләр менән юғарынан ҡарап һөйләшәһең икән - һине берәү ҙә хөрмәт итмәйәсәк, үлһәң - иҫләмәйәсәк. Рәсми булмаһа ла, "халыҡ һөйөүе" тип аталған юғары наградаға лайыҡ булыуы күпкә ауырыраҡ. Сөнки халыҡҡа ярамһаҡланып та, күстәнәс ташып та булмай. Шуға, ниндәйҙер "атҡаҙанған уҡытыусы" тигән түгел, ә бөгөн дә уҡыусылары яратып иҫкә алған Фәлән Фәләновна тигән исемеңде балҡытырлыҡ итеп йәшәү һәм эшләү күпкә мөһимерәк. Бер ифрат баҫалҡы, үҙен күрһәтергә яратмаған, маҡтаулы исемдәр артынан ҡыумаған, эше, кешеләргә ярҙамы менән бөтәһенә лә билдәле һәм хөрмәтле танышым бар. Эше буйынса бөтә юбилярҙарҙы, һөнәри байрамдарҙы барлап, тәбрикләүҙәр, гәзиткә мәҡәләләр ойоштороп ултырһа ла, үҙенең юбилейында рәсми ҡотлау булмауына ла бошонманы ул, һүрәтләмә яҙырға теләүселәрҙән дә ҡырҡа баш тартты. "Мине былай ҙа кеше белә", тине. Бына-бына, һине былай ҙа, исемһеҙ ҙә белһендәр...

Минеңсә, кешенең теге йәки был уңышҡа ирешә алыуына бер ниндәй етәксе лә, коллегалары ла, дәғүәселәре лә аяҡ сала алмай, ә бөтә нәмә Хоҙайҙың ҡушыуынан тора. Беҙҙең тормошта булған бөтә мөмкинлектәрҙең тормошҡа ашыу-ашмауын ул ғына хәл итә. "Яҙған ризыҡ тамаҡты ярып килеп инә", ти халыҡ. Шулай булмаһа, "Аллаһы Тәғәлә насип итмәгән" тип әйтергә ҡала.

**Рәхимә МУСИНА.**

## Н И М Ә ?  Ҡ А Й Ҙ А ?  Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда ағымдағы йылдың ғинуар-февралендә инфляция 5,7 процент кимәленә еткән. Сағыштырыу өсөн: 2014 йылдың ошо уҡ осоронда төбәктә инфляция 1,4 процент тәшкил иткән.

✓Мәскәүҙә һәм Санкт-Петербургта уҡыған Башҡортостан студенттары һәм аспиранттары ассоциацияһы үҙенең биш йыллығын билдәләй. 15 мартта үтәсәк тантаналы сарала Башҡортостандың халыҡ артисы Роберт Юлдашев ҡатнашасаҡ. Хәбир Сөләймәновтың "БашгизХан" китабының һәм ассоциация проекттарының исем туйы уҙғарыласаҡ. Сара сиктәрендә "Мираҫ" фонды конкурсы еңеүселәрен бүләкләү ҡаралған. Фонд рәйесе, Дәүләт Думаһы депутаты Сәлиә Мырҙабаева фәндә, йәмәғәт эштәрендә, спорт һәм сәнғәт өлкәләрендә уңыш яулаған 11 иң яҡшы студентҡа аҡсалата премия һәм дипломдар тапшырасаҡ.

✓Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә Георгий Кацериктың "Кисәге йөҙ", Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан йыры" (төҙөүсеһе Риф Мифтахов), Мансур Һиҙиәтовтың "Ҡыу ҡарағас" китаптары донъя күрҙе. Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан йыры" китабына 1962-1968 йылдарҙа ижад иткән шиғырҙары, поэмалары ингән. Йыйынтыҡта быға тиклем баҫылмаған ике поэма ла урын алған. Китаптарҙы "Китап" нәшриәтенең фирма магазиндарында һатып алырға мөмкин.

✓Санкт-Петербургта грек-рим көрәше буйынса Рәсәй чемпионаты үтә. 85 килограмға тиклемге ауырлыҡ категорияһында Башҡортостандан Азамат Бикбаев менән Тверь өлкәһе өсөн сығыш яһаусы Бекхан Оздоев өсөнсө урынды бүлеште.

✓М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты ГТО комплексын индереү сараларын ойоштороу буйынса төбәк операторы булып танылды. Бындай ҡарар Мәскәүҙә ҡабул ителде. Уҡыу йорто базаһында ГТО-ның ағартыу үҙәге урынлашҡан, бында ГТО нормаларын индереү буйынса квалификациялы белгестәр әҙерләнәсәк.

✓Урал Килсенбаев баш ҡаланың Совет районы башлығы итеп тәғәйенләнде. Ул Башҡортостандың урман хужалығы министры урынбаҫары итеп тәғәйенләнгән Салауат Бәхтиәров урынына килде. Урал Килсенбаев 2012 йылдан алып Өфө ҡала округы хакимиәтендә Йәштәр сәйәсәте буйынса комитет рәйесе вазифаһын биләгәйне.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БЕҘ БӘХЕТЛЕ БАЛА САҠ ЯҠЛЫ

**Ошо көндәрҙә Өфөлә балаларҙың хоҡуҡтарын һәм мәнфәғәттәрен яҡлау буйынса белгестәрҙең "Мегаполис. Балалыҡ территорияһы" Бөтә Рәсәй форумы үтте. Өфө ҡала округы хакимиәте, баш ҡаланың Опека һәм попечителлек идаралығы, Ҡала үҫеше йәмғәт фонды һәм Мәскәүҙән Социаль етемлекте иҫкәртеү хәйриә фонды тарафынан ойошторолған сарала Башҡортостандан 170-кә яҡын белгес, Рәсәйҙең 32 төбәгенән 150 самаһы кеше ҡатнашты.**

Пленар ултырыш барышында баш ҡаланың балалыҡты яҡлау өлкәһендәге мәсьәләләре менән шөғөлләнгән Опека һәм попечителлек идаралығы етәксеһе Татьяна Квасникова социаль етемлекте иҫкәртеү, баланы үҙ ғаиләһендә ҡалдырыу, етем балаларҙы ғаиләләргә урынлаштырыу буйынса эш һөҙөмтәләре, тәжрибәләре менән уртаҡлашты. Уның әйтеүенсә, баланы тыуыу йортонда уҡ ҡалдырып китергә теләк белдергән йәш әсәләр менән профессиональ белгестәр эшләй, бала тәрбиәләү өсөн уңайлы шарттары булмаған ғаиләләргә ярҙам күрһәтелә, төрлө социаль программалар булдырылған. Әлеге ваҡытта балалар йортонда тәрбиәләнеүселәрҙең бары 10 проценты ғына тома етем, шуға күрә, ата-әсәләр менән профилактик эштәр алып барыу мөһим. Был йүнәлтән психологтар, табиптарға ҙур бурыс йөкмәтелгән. Социаль етемлекте иҫкәртеү хәйриә фонды менән берлектә йәшәргә урындары булмаған балалы ғаиләләргә социаль ҡунаҡхана асылған, бөгөнгә көндә 12 әсә балалары менән ошо торлаҡтарҙа йәшәй. Бынан тыш, "Ата-әсәләр университеты", "Бәхетле билет", "Әсәлек капиталы" кеүек проекттар ғаиләләргә ярҙам итеү йүнәтенән бик уңышлы эшләп килә. Шулай ҙа күрелгән саралар, етем балаларҙы ғаиләләргә урынлаштырыуҙың яңы формалары, инновацион методикалар интернат тибындағы учреждениелар һанын кәметеү мәсьәләһен тулыһынса хәл итмәй. "Беҙҙең алда торған бурыстарҙы иктисади күҙлектән ҡарағанда, балалар йортонда бер баланы ҡарау дәүләткә йылына уртаса 700 мең һумға төшә. Ә баланы тәрбиәгә алыусы ғаиләгә йыл дауамында ярҙам итергә бурыслы белгестең эш хаҡы 40 мең һум тәшкил итә. Был форум, моғайын, һеҙгә ғаиләһеҙ кешенең тормошо ниндәй ауыр, мәғәнәһеҙ, мөхәббәткә урын булмауына төшөнөргә, ата-әсә һөйөүенән мәхрүм булған балаларҙың күңелен аңларға ярҙам итер. Былар барыһы ла киләсәктә яңы проекттарыбыҙҙа сағылыш тапһа, бөгөнгө йыйылыштың төп маҡсатына ирештек тиһәк була", - тип мөрәжәғәт итте конференцияла ҡатнашыусыларға БР Бала хоҡуҡтары буйынса вәкил Милана Скоробогатова.

"Мегаполис. Балалыҡ территорияһы" Бөтә Рәсәй форумы барышында балаларҙың хоҡуҡтарын һәм мәнфәғәтен яҡлау өлкәһендә эшләүсе белгестәр түңәрәк өҫтәлдәрҙә һәм секцияларҙа ҡатнашты. Улар өсөн Өфөләге "Ғаилә" үҙәгендә һәм ҡаланың балиғ булмағандар өсөн социаль-реабилитация үҙәгендә, 1-се һанлы балалар йортонда күсмә оҫталыҡ дәрестәре ойошторолдо.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# "САЛАУАТ ЮЛАЕВ"ТЫҢ ЯҢЫ БАҒЫУСЫҺЫ

**11 мартта "Башнефть" акционерҙар нефть компанияһы" асыҡ акционерҙар йәмғиәте һәм "Салауат Юлаев" хоккей клубы араһында генераль бағыусылыҡ тураһында килешеүгә ҡул ҡуйылды. Сарала Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов, "Башнефть" етәксеһе Александр Корсик һәм "Салауат Юлаев" хоккей клубының генераль директоры Александр Семак ҡатнашты.**



- Бөгөн "Салауат Юлаев" хоккей командаһы өсөн әһәмиәтле көн, - тип билдәләне Рөстәм Хәмитов. - Яңы килешеүгә ҡул ҡуйыла. Мин "Башнефть" компанияһы президентына беҙҙең хоккейға булышлыҡ иткәне өсөн рәхмәт белдерәм. "Башнефть" үҙенә ҙур финанс йөкләмәһе ала. Бөгөн дә, киләсәктә лә командала ҡатмарлыҡтар килеп тыумаһын өсөн барыһын да эшләйәсәкбеҙ. "Салауат Юлаев" халыҡ командаһына әүерелһен өсөн күп көс һалырға кәрәк. Был мәсьәлә өҫтөндә эш алып барасаҡбыҙ.

- Хәҙерге көндә "Башнефть" компанияһы ла, бөтә ил кеүек уҡ, ҡатмарлы осор кисерә. Шуға ҡарамаҫтан, был аҙымды эшләр алдынан бер секунд та икеләнеп торманым, - тине "Башнефть" етәксеһе Александр Корсик. - Мин ошо килешеүҙең төп һөҙөмтәһе нисек буласағын белмәйем. Аңлашыла, команда йәнә Гагарин Кубогын алһа, ҙур байрам буласаҡ. Минеңсә, "Салауат Юлаев" һәр ваҡыт плей-офта уйнаһа, ҡайһы берҙә Гагарин Кубогын яулаһа, шуның менән бергә "Торос" клубы ла үҫешһә, һөҙөмтә күренер.

Килешеү әлегә бер йылға ғына төҙөлдө. Александр Корсик фекеренсә, ул мотлаҡ оҙайтыласаҡ.

- Тренерҙар штабында һәм составта үҙгәрештәр көтөлә, - тип хәбәр итте Александр Семак. - 30 апрелгә тиклем был хаҡта әйтә алмайбыҙ.

- "Салауат Юлаев" халыҡ командаһы, көйәрмәндәрҙең дауамы булырға тейеш, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов.

# ЕТӘКСЕ ҮҘЕНӘН БАШЛАНЫ

**Рәсәй Президенты Владимир Путин дәүләт башлығы булараҡ, үҙенең, шулай уҡ РФ Хөкүмәт Рәйесенең, министрҙарҙың һәм уларға тиңләштерелгән парламентарийҙарҙың, генпрокурор һәм Тикшеренеү Комитеты етәкселәренең, Федераль хәүефһеҙлек советы, Федераль һаҡ хеҙмәте һәм башҡа ведомстволар етәкселәренең эш хаҡын 1 марттан ағымдағы йыл аҙағына тиклем 10 процентҡа ҡыҫҡартыу тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы.**

Президент шулай уҡ 1 майҙан үҙ хакимиәте, хөкүмәт аппараты һәм Иҫәп палатаһы хеҙмәткәрҙәренең дә эш хаҡын ҡыҫҡартыу хаҡында бойороҡ бирҙе. Әйткәндәй, бөгөнгә көнгә Президент айына 700 мең һум эш хаҡы алһа, министрҙар һәм депутаттар - 420 мең ала.

"В. Путиндың был ҡарары имидж хаҡына эшләнә, тип ҡарауыу ла ихтимал, ләкин әлеге көндә уның мөһим түгел, - ти аналитик И. Николаев. - Бюджетты "кисергә" тура килгән осраҡта үҙенең шәхси табышыңды ла ҡорбан итергә әҙер булыуҙы белдереүҙең мөһимлеген власть яҡшы аңлай. Был донъя күләмендә ҡулланылыусы сара булып тора. Путиндың указы төбәк етәкселәре өсөн дә өлгө. Был хаҡта дәүләт компаниялары етәкселәренә лә ишетелер, моғайын".

Әйткәндәй, 2013 йылда Владимир Путин етәксе вазифалағы дәүләт чиновниктарына аҡсаларын сит ил иҫәптәрендә һаҡлауҙы тыйғайны. Хәҙер президент ошо ҡағиҙә ҡағылған чиновниктарҙың исемлеген тәҙәргә бойорҙо. "Сит илдә аҡса һаҡлауҙы тыйыу юғары дәүләт чиновниктарына ғына ҡағылмай, уның тағы бер ғилләһе - йәшерен мәғлүмәттәргә эйә булыу мөмкинлеге. Юғары чиновниктар, ғәҙәттә, мөһим йәшерен мәғлүмәттәргә эйә була. Шул иҫәптә юғары вазифала булмаған ҡайһы бер чиновниктар ҙа бар",- тип аңлатма бирә ошо йәһәттән Президенттың матбуғат секретары Дмитрий Песков.

# "АЛТЫН ҠУРАЙ" ТӨҘӨЛӘ



**Ҡырмыҫҡалы районында "Алтын Ҡурай" туристик-эш комплексы төҙөү буйынса проект ғәмәлгә ашырыла. Проектты Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы һәм Ҡырмыҫҡалы районы хакимиәте булышлығында "Ҡурай"ябыҡ акционерҙар йәмғиәте ойоштора.**

Объект ҡунаҡхана-эш үҙәген һәм 40 милли ихатанан һәм муниципаль берәмек вәкиллектәренән торған "Берҙәмлек" этнографик комплексын үҙ эсенә ала. "Алтын Ҡурай" ҡунаҡхана-эш үҙәгендә конгресс-холл, 400 урынлыҡ ресторан, 160 урынға иҫәпләнгән номер фонды буласаҡ. Әүҙем ял итергә яратыусылар өсөн парк булдырыла, унда һырғалаҡ, спорт майҙансыҡтары, теннис корты, гольф өсөн майҙансыҡ төҙөлә, велосипедты, саңғыны прокатҡа алырға мөмкин. "Берҙәмлек" тип аталған этноауылда шәхси ярҙамсы хужалығы булған ихаталар, һөнәрселек оҫтаханалары һәм ҡунаҡ өйҙәре төҙөләсәк. Бынан тыш, комплекс составында "Айғыр" ат спорты комплексы, балалар һәм йәштәр өсөн "Республика" һауыҡтырыу үҙәге, фермер хужалыҡтары комплексы, 1500 коттеджға иҫәпләнгән ҡасаба ҡаралған.

Проекттың тормошҡа ашырыу өсөн бүленгән майҙан 300 гектарҙан ашыу тәшкил итә. Объекттарҙа фестивалдәр, конкурстар, халыҡ байрамдары ойоштороласаҡ, туристик хеҙмәттәр күрһәтеләсәк. Комплекс Өфөнән 30 километр алыҫлыҡтағы Тауһенер күле эргәһендә урынлашасаҡ. Ул Башҡортостандың визит карточкаһы ролен үтәйәсәк, тип иҫәпләй ойоштороусылар. "Берҙәмлек" этнографик комплексын төҙөүселәргә кадрҙар һайлап алыу һәм әҙерләүҙә, ихаталарҙы милли үҙенсәлектәргә ярашлы итеп биҙәүҙә ярҙам күрһәтеләсәк, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығынан.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔16 мартта Башҡорт дәүләт филармонияһында "Шаяниум - 2015" конкурсының финал уйындары үтә. Быйылғы уйындар Әҙәбиәт йылына арнала, шуға ла уның дөйөм тематикаһы "Ал да нур сәс халҡыңа!" тигән девизға нигеҙләнә. Өс көн буйы алып барылған һайлау турынан һуң көйәрмәндәргә яҡшы таныш "XX централ", "Һупайлы дәрүиштәре", "Башҡорттар.ру", "Хыялыйзыялыйҙар", "Ша-шу-ша" командалары финалға үтте. Быйыл тәүге тапҡыр рус телле мәғариф учреждениелары араһынан Өфөнөң 159-сы мәктәбе командаһы ла финалда көс һынашасаҡ.

✔Башҡортостанда 2015 йылға ваҡиғалар календары төҙөлдө. Унда быйыл республикала ойоштороласаҡ күргәҙмәләр, форумдар, кәңәшмәләр, спорт һәм мәҙәни саралар хаҡында мәғлүмәт тупланған. Башҡортостандың Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитетында билдәләүҙәренсә, календарь республика халҡы һәм ҡунаҡтары араһында сараларҙы популярлаштырыу, шулай уҡ төбәктең ыңғай имиджын булдырыу өсөн төҙөлгән.

✔Аҙна эсендә Башҡортостанда киҫкен респиратор вируслы инфекция менән сирләүҙең 29 меңдән ашыу осрағы теркәлгән. Үткән аҙна менән сағыштырғанда ауырыусылар һаны 15 процентҡа кәмегән. Ошо уҡ осорҙа Өфөлә 10 меңдән ашыу кеше киҙеү һәм ОРВИ менән сирләгән. Баш ҡалала ауырыу күрһәткесе эпидемик сиктән 30 процентҡа юғары. Уҙған аҙна менән сағыштырғанда ул һигеҙ процентҡа түбәнәйгән.

✔Башҡортостан делегацияһы Ҡаҙағстанда танылған ҡаҙаҡ батырҙарының береһе - Ҡабанбай батырҙың мавзолейында булды. Ҡаҙағстанда Башҡортостан Республикаһы вәкиле вазифаһын башҡарыусы Ренарт Яунбаевты һәм Силәбе өлкәһенән крайҙы өйрәнеүсе Рөстәм Сәғиҙуллинды Кызылжар ауылы мәктәбе хеҙмәткәрҙәре оҙатып йөрөнө. Башҡортостан делегацияһы мәктәп китапханаһына китаптар, башҡорттарҙың тарихы тураһында материалдар һәм республика флагын бүләк итте.

✔Башҡорт дәүләт медицина университетында һылыуҙар бәйгеһе булып үтте. Унда төрлө факультеттарҙан 10 ҡыҙ ҡатнашты. Буласаҡ врачтар үҙҙәрен төрлө яҡлы талант эйәһе итеп күрһәтте. "Мисс БДМУ" титулын Камила Меньшикова яуланы.

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ...

# "КАПРЕМОНТ" ХАҠЫНДА АЛТЫ ҺОРАУ




**Ҡалаларҙа һәм ҡала тибындағы ҡасабаларҙа хосусилаштырылған күп ҡатлы йорттарҙа йәшәүселәрҙән хәҙер, мәғлүм булыуынса, закон нигеҙендә 2014 йылдың көҙөнән йортҡа капиталь ремонт өсөн иғәнә түләтелә башланы.**

Коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙәр былай ҙа артып торған мәлдәрҙә был яңылыҡ халыҡта алҡыштар тыуҙырманы, әлбиттә. Түләү артынан түләү, сиге булырмы бының бер мәл, ҡайҙа китеп тора һуң был аҡсалар, тип ризаһыҙлыҡ белдереүселәр бихисап. Законға буйһонһоп өйрәнгән күпселек өндәшмәй генә түләй ҙә башланы. Ҡаршылыҡ күрһәтеп, был түләтеүҙәрҙең нигеҙле-нигеҙһеҙ булыуын суд аша дәғүәләшергә вәғәҙә иткәндәр ҙә бар - улар хәҙер ярты йыл буйы аңлайышһыҙ маҡсаттар өсөн аҡсаһын сығарып һалырға теләмәй. Уларҙы ла аңларға була, сөнки араларында өрәңы йорттарҙа йәшәүселәр байтаҡ: ниндәй ремонт һәм кем өсөн түләргә тейеш һуң улар?

**1. Аҡса ҡайҙа туплана?**

Аҡса "Төбәк операторы" тигән яңы структура иҫәбенә күсерелә. Ул капиталь ремонт фондын булдырып, уны төрлө объекттарға йүнәлтә. Быныһы аҡса туплауҙың беренсе варианты.

Икенсе вариант - йорттарҙың үҙ махсус иҫәбен асыу. Унда һәр йорттоң үҙ аҡсаһы тупланып бара һәм ул башҡа йорттарҙы һипләүгә китмәйәсәк. Был осраҡта бухгалтерия һәм подрядсыларҙы ла йортта йәшәүселәр үҙҙәре таба, юллай. Ремонт өсөн кәрәкле аҡса ла оҙағыраҡ йыйыласаҡ.

**2. Түләргәме, юҡмы?**

Яңы программа ғәмәлгә инеү менән ризаһыҙҙар тауыш күтәрә башланы. Ҡайһы бер подъездарҙа хатта капремонт өсөн түләмәҫкә өндәгән листовкалар ҙа йәбештереп сыҡтылар. Бынан һуң иң намыҫлы түләүселәр ҙә икеләнеп ҡалды: түләргәме, юҡмы икән?

"Күп фатирлы йорт - дөйөм милектә иҫәпләнә һәм уны ҡарап, тейешле тәртиптә тотоу өсөн, әлбиттә, түләргә кәрәк", ти БР Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры урынбаҫары Альфред Зиннәтуллин.

**3. Йортоғоҙға ремонт ҡасан килер?**

Капиталь ремонт программаһына авария хәлендә булған һәм һүтелергә тейешлеләренән башҡа һәр бер йорт индерелә. Хосусилаштырылмаған йорттарҙа йәшәүселәр ремонт өсөн түләмәй. Улар өсөн сығымдарҙы милекселәр - муниципалитет йәки предприятие ҡаплай. Был программа 30 йылға иҫәпләнгән. Тәүҙә иҫке йорттар тәртипкә килтереләсәк, аҙаҡ - башҡалары. Йорттарҙың сираты йыл һайын ҡабаттан ҡаралып торасаҡ, тип вәғәҙәләйҙәр, сөнки ҡайһы саҡ көтөлмәгән хәлдәр ҙә килеп сыҡҡылай бит. Әйтәйек, берәй йорттоң ҡыйығы тишелә йә башҡа берәй кисектергеһеҙ осраҡ тыуа.

**4. Әгәр йорт яңыраҡ төҙөлгән булһа?**

Әлегә взносты иҫке йортта йәшәйҙәрме, яңыһындамы - бөтәһе лә түләй. Дөрөҫ, яңы йорттарҙа йәшәүселәр өсөн был ғәҙелһеҙлек булып тойола. Түләйһең-түләйһең, ә яҡындағы ун йыл эсендә ремонт тураһында уйлап та бирмәйәсәктәр бит. РФ Дәүләт Думаһында хәҙер законға үҙгәрештәр индерергә йыйыналар - яңы төҙөлгән йорттар милекселәре капиталь ремонтҡа түләүҙән бер нисә йылға азат итеhelp, ахырыһы, тип көтөлә.

**5. Капиталь ремонт ағымдағыһынан ни менән айырыла?**

Ағымдағы ремонтта йорт системаһы элементтары тәртипкә килтерелһә, капиталь ремонтта система үҙе йүнәтеү үтә. Мәҫәлән, подъездағы торбаны ремонтлау ағымдағы ремонт эштәренә инә, ә бөтөн канализацияны алыштырыу - капиталь ремонт. Әгәр тәртипһеҙ үҫмерҙәр подъезд ишеген емерә икән, уны алыштырыу шулай уҡ "Ағымдағы ремонт"статьяһына ҡарай, ә инде бөтөн подъездарҙа ла ишек-тәҙрәләрҙе алыштырыу капиталь ремонт иҫәбенә башҡарыла.

Капиталь ремонтҡа тағы ла түбәндәге эштәр ҡарай:

- йорт эсендәге электр, йылылыҡ, газ һәм һыу менән тәьмин итеүсе инженер системаларын йүнәтеү;
- лифт ҡоролмаһы һәм лифт шахтаһын йүнәтеү;
- ҡыйыҡ, подвал, фасад һәм фундаментты ремонтлау.

**6. Сумма ҡайҙан алына?**

Иң тәүҙә дөйөм торлаҡ майҙанын иҫәпкә алырға кәрәк. Шуға иғтибар итегеҙ: әгәр түләү квитанцияһына лоджия, балкон, терраса, веранда майҙаны индерелгән булһа, туп-тура "Төбәк операторы"на барып, уларҙы иҫәптән алып ташлауҙы талап итегеҙ. Түләп өлгөргән булһағыҙ, ҡайтанан иҫәп-хисап эшләтегеҙ.

Шулай итеп, фатирығыҙҙың дөйөм майҙаны 33 кв.метр, ти. Әгәр алты ҡаттан да юғары булмаған йортта йәшәйһегеҙ икән, иғәнә күләме - квадрат метрына 5 һум 20 тин. Йәғни 33х5,20=171,60 һум. Ә инде алты ҡаттан юғарыраҡ йәшәгәндәр кв.метрына 5 һум 80 тиндән түләй: 33х5,80=191,40 һум.

Әйткәндәй, торлаҡ-коммуналь түләүҙәргә ташлама менән файҙаланыусыларға бындай хоҡуҡ капиталь ремонт өсөн дә ҡаралған. Был мәсьәлә менән йәшәгән районығыҙ буйынса халыҡты социаль яҡлау бүлегенә мөрәжәғәт итергә кәрәк.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

БАҘАР ХӘЛДӘРЕ

## ҺИҘҘЕРМӘЙ ГЕНӘ АРТАМЫ?

Аҙыҡ-түлеккә хаҡтарҙың артыуы ағымдағы йылда инфляцияны алға этәреүсе төп көс булып ҡала. Росстат мәғлүмәттәре буйынса, йыл башынан Башҡортостанда аҙыҡ-түлек 7,8 процентҡа, 2014 йылдың ғинуар-февраленә 2,6 процентҡа ҡиммәтләнгән. Шуның менән бергә республикала аҙыҡ-түлеккә хаҡтарҙың үҫеше Рәсәй (9,1 процент) һәм Волга буйы федераль округының күп кенә субъекттарына ҡарағанда кәмерәк.

Февралдә Башҡортостанда тары, дөгө, борсаҡ һәм манный ярмаһы хаҡы 6,1- 12,1 процентҡа ҡиммәтләнгән. Сыр һәм май хаҡы - 2,6-4,9 процентҡа, бойҙай ононан бешерелгән икмәк һәм икмәк-калас изделиелары һәм бойҙай оно - 2,5-3,6, сәй хаҡы 9,9 процентҡа артҡан.

Балыҡ продукцияһының айырым төрҙәре 1,5-14,6 процентҡа, шул иҫәптән туңдырылған балыҡ 10,6 процентҡа ҡыйбатланған. Һөт ризыҡтары 1,9-9,3 процентҡа (һөт - 3,6 процентҡа), ит - 0,7-7 процентҡа (һыйыр ите - 3,8 процентҡа, колбаса - уртаса 2,4 процентҡа) ҡиммәтерәк. Шул уҡ ваҡытта ҡыяр-помидорҙар 14,1-22 процентҡа, сусҡа, ҡош ите һәм тоҙ - 0,8-1,2, араҡы 2,1 процентҡа арзанайған. Тикшереүселәр билдәләүенсә, 45 медицина препаратының 16-һы 5,1-10,7 процентҡа, 26-һы 5 тапҡырға ҡыйбатланған. Шулай уҡ электр приборҙарының айырым төрҙәренә, йыһазға, косметика тауарҙарына, кейем-һалымға, аяҡ кейеменә, трикотаж һәм ойоҡ-ойоҡбаш изделиеларына ла хаҡтарҙың күтәрелеүе билдәләнгән.

## ҮҘЕБЕҘҘЕКЕНӘ - ӨҪТӨНЛӨК

Республика магазиндары кәштәләрендә урында етештерелгән продукттар күбәйә. Өфөлә үткән матбуғат конференцияһы "Аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеге: ассортимент, сифат, хаҡтар" темаһына арналды.

- Килеп тыуған иҡтисади хәлгә бәйле күп кенә етештереүселәр әйләнештән төшөп ҡалды, әммә улар урындағы продукция менән алмаштырылды, - тип билдәләне Башҡортостандың Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау буйынса дәүләт комитеты рәйесе Рөстәм Камалетдинов. - Мәҫәлән, бөгөнгө көндә сырҙарҙың 80 проценты Рәсәйҙә, шул иҫәптән Башҡортостанда етештерелгән.

Эксперттар билдәләүенсә, төрлө кимәлдәге сауҙа үҙәктәре Башҡортостанда етештерелгән ризыҡтар менән ҡыҙыҡһына башлаған. Мәҫәлән, сауҙа майҙансыҡтарының 90 процентҡа яҡыны урындағы ассортимент менән эшләй. Улар бигерәк тә ҙур булмаған ауыл хужалығы предприятиелары, фермер хужалыҡтары менән хеҙмәттәшлек итә.

Ҡайһы бер предприятиелар һатып алыусыларҙың иғтибарын йәлеп итеү өсөн йәшелсәләрҙе йыуыу өсөн ҡорамалдар, төрөү материалдары һатып ала, фирма магазиндары аса. Башҡортостанда миҙгелле продукттарға хаҡтар үҫешен кәметеү буйынса әүҙем эш алып барыла. Был өсөн башҡа төбәктәр һәм яҡындағы сит илдәрҙән тауар килтереүселәр менән һөйләшеүҙәр әүҙемләшә. Продукцияны аралашсыларһыҙ һатып алыуға баҫым яһала.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ауыртыуҙы баҫыу

❖ Нимәгәләр бәрелгәндән һуң ауыртып торған ергә 15-20 минутҡа ғына уҫаҡ ағасы киҫәген баҫып торһағыҙ, ауыртыу ҡул менән һыпырып алған кеүек була.

❖ Киҫелгән, тырналған урындарҙы шунда уҡ кер һабыны менән һалҡын һыуҙа йыуырға, әммә ҡоротмаҫҡа, яра кибә һәм төҙәлә. Ныҡ бәрелгән ергә кер һабыны һөртһәң, ул ер күгәрмәй.

### Теш һыҙлаһа

❖ Һыҙлаған тешкә бер киҫәк сей сөгөлдөр ҡуйыу ҙа файҙалы.

### Тамаҡҡа һалҡын тейһә...

❖ 1 ҡалаҡ аҡ сәскә үләненә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, һыулы кәстрүлгә ултыртып, 10-15 минут ҡайнатырға. Һөҙгәс, 1-2 балғалаҡ бал өҫтәргә һәм шул төнәтмә менән тамаҡты сайҡарға кәрәк.

### Күҙҙәр өсөн салат

❖ Ҡабығы таҙартылған көнбағышты һары төҫкә ингәнсе табала ҡыҙҙырырға һәм ҡырылған кишер һалып болғарға, ҡаймаҡ йәки майонез менән тәмләтергә.

### Аллергия

❖ 2-3 ҡалаҡ ваҡланған һуҡыр кесерткәнде ярты литр ҡайнар һыуға һалып, термоста 1-2 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм аллергик таптар, тимерәү, фурункулез булғанда ҡан таҙартыу сараһы булараҡ, көнөнә 4-5 мәртәбә яртышар стакан эсергә.

### Әҙ аша

❖ Ябығам, тиһәң, әҙ аша, сөнки дарыуҙарҙың иңөһе - әҙ ашау, тип әйтелә.

### Бауыр ауыртҡанда

❖ Бауыр ауыртһа, оҙайлы ваҡыт гепатит булһа, 1 стакан һыуға 50 грамм гөлйемеш һалып төнәтмә яһап эсергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

**✓ Килен кейәү йортона төшкәндә уға бүләккә һарыҡ биреү ҙә ошоноң менән бәйле. Ул уға тотоноп арбанан йәки сананан төшөргә тейеш булған. Ғөмүмән, башҡорттарҙа һарыҡ "байлыҡ", "етеш йәшәү" төшөнсәләре менән тығыҙ бәйле.**



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# БЫЛ ҠӘҘӘРЕМ ЙЫРЛАУҒА...
## инде тәкә сығарың

**Башҡорттарҙың дини-мистик ҡараштарында һарыҡ түллек символы ла булып тора. Туй йолаларында шуның өсөн дә һарыҡ менән бәйле күренештәр күп һаҡланып ҡалған, ахыры. "Туйлыҡҡа быуаҙ һарыҡ бирҙем, йыл тәүлегенә килен буйға ҡалыр", тигәндә һарыҡтың йәш ҡатынға әсә бәхете килтереүенә ышаныу ята.**

Килен кейәү йортона төшкәндә уға бүләккә һарыҡ биреү ҙә ошоноң менән бәйле. Ул уға тотоноп арбанан йәки сананан төшөргә тейеш булған. Ғөмүмән, башҡорттарҙа һарыҡ "байлыҡ", "етеш йәшәү" төшөнсәләре менән тығыҙ бәйле. Йорт-ҡура тирәһенә, умарталыҡҡа һарыҡтың баш һөйәген элеп ҡуйыу йорт хайуандарын, бал ҡорттарын күҙ тейеүҙән, йәғни, мал ҡотон һаҡларға тейеш булған.

Туйға кейәү яғынан ҡоҙалар алып килгән һарыҡ һөйһөн тип атала. Туйҙың икенсе көнөнә, һөйһөндө һуйыу алдынан, йәш кәләште өйөнән алып киткәндәр. Ул һарыҡты һуйғанды күрергә һәм уның итен ашарға тейеш түгел, "һөйһөн ашаған һөйөшмәҫ" тигәндәр. Һарыҡты һуйғанда бөтәһе лә уның йөнөнә тотоноп торған, һөйһөн ҡанын туйҙа ҡатнашыусыларҙың, балаларҙың маңлайына һөрткәндәр. Кәләштең әсәһе, ҡыҙына изге теләктәр теләп, аҡ туҡыманы һарыҡтың ҡанына манып, кеше күҙе күрмәҫ ергә йәшереп ҡуйған. Ҡалған ҡанды ергә күмәләр. Һарыҡтың йөрәген ҡырҡҡан саҡта сыҡҡан ҡанды тултырмаға ҡушып бешереп, ашағандар. Был йола мәлендә кәләштең әхирәттәре ҡоҙаларҙан, кейәүҙән шаяртып көлгән. Әгәр ҙә ҡоҙалар туйға һарыҡты һуйып алып килһә, уның башын таптырғандар:

*Ҡоҙаларға килгәнһегеҙ,*
*Һөйһөнөңдөң башын тап!*

Һарыҡтың һөйәктәре йылғаға ташланған. Күгәрсен һәм Ейәнсура райондарында туйҙың икенсе йәки өсөнсө кисенә "Шештәкә" тигән йола үткәрелә (Шеш - "тарбайып торған мөгөҙ"/шешәк - "ике йәшлек һарыҡ" + тәкә). Туйҙа ҡатнашыусылар йырҙар йырлап, өйҙәр буйлап йөрөп, хужаларҙан төрлө ризыҡ йыя. Ҡайһы берҙә уларға аҡса ла биргәндәр, уға бал һатып алынған.

*Аттарымды туғарың,*
*Аттарымды һуғарың,*
*Был ҡәҙәрле йыр йырлауға*
*Инде тәкә сығарың!* - йола һүҙҙәрендә уның бар мәғәнәһе асып һалынған.

Был ике йолала ла тотем булараҡ һарыҡҡа арналған байрамдарҙың эҙе һаҡланған. Һөйһөндөң итен коллектив рәүештә ашағандан һуң, был тотем киренән терелә тигән ышаныу ята. Был бөтөн тотемик байрамдарға хас күренеш. Шештәкә йолаһында коллектив рәүештә йыйылған ризыҡ һуңынан күмәкләп ашала. Башта ул, моғайын да, шеш мөгөҙлө тәкәгә ризыҡ, йәғни ҡорбан йыйыу менән бәйле булғандыр. Хәҙер иһә уның төп мәғәнәһе юғалған, бары тик атамаһы ғына тороп ҡалған.

**Ф. Илембәтов, А. Илембәтова.**
**"Башҡорт мифтары һәм йолаларында хайуандар культы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ

# ЫСЫН ИР-ЕГЕТ...
## атай өлгөһөндә тәрбиәләнә



**Бөгөн гүзәл зат ысын ир-егеттәрҙең юҡлығына йыш зарлана. Йәнәһе, улар ҡатын-ҡыҙға иғтибарлы түгел, ниндәйҙер юғары маҡсаттары ла юҡ, тормош мәғәнәһе лә футбол ярыштарына, балыҡ ҡармаҡлау кеүек еңел-елпе шөғөлдәр менән генә сикләнә. Йәмғиәттә көндән-көн нығына барған был фекерҙең башланғысы ҡайҙан килә? Был проблема бар икән, уның сәбәбе нимәлә? Ғөмүмән, ысын ирҙе кем тәрбиәләргә тейеш һуң? Педагогика фәндәре кандидаты, Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институтының психология кафедраһы мөдире Лилиә Рәшит ҡыҙы ХАЛИҠОВА менән ошо һорауға яуап эҙләп ҡарайыҡ.**

Был мәсьәләгә дөйөм күҙлектән ҡараһаң, ысын ир-егеттәр юҡ, тип әйтеү дөрөҫлөккә тап килмәй. Шул уҡ ир-егеттәр ҙә "Ысын ҡатын-ҡыҙҙар һирәк бит ул бөгөн", тип әйтә ала һәм улар ҙа ниндәйҙер кимәлдә хаҡлы буласаҡ. Берберендә ғәйепләр өсөн сәбәпте һәр ваҡыт табырға була. "Үҙеңдән башҡаны әүлиә тип бел", тип өйрәтә ине элек өлкәндәр, кемдеңдер һинең талаптарыңа тап килмәүе генә уның "ысын кеше" тигән бөйөк исемде йөрөтөргә хаҡы юҡ, тигәнде аңлатмай. Икенсе яртыңды, хеҙмәттәштәреңде нисек бар - шулай ҡабул итеп, уны шәхес итеп күрә белеү ҙә мөһим.

Тик былдай мәсьәлә килеп тыуған икән, уның сәбәптәре лә булырға тейеш. Ни өсөн хәҙерге заман ир-егете бер аҙ үҙенең урынын юғалта төштө һуң? Беренсенән, бөгөнгө көндә ғаилә институты ҙур үҙгәрештәр кисерҙе. Әгәр ҙә быға тиклем халҡыбыҙ традицион патриархаль ғаилә ҡоролошо менән йәшәһә, бөгөнгө ғаиләләр демократик ҡараштар нигеҙендә икенсерәк ҡиммәттәргә тотолоп тора. Һәм беҙ быны инҡар итә лә, күрмәмешкә һалыша ла алмайбыҙ, сөнки был йәмғиәт үҙгәреше менән бәйле тәбиғи хәл. Шуға ла бөгөн ир-егеттең йәмғиәттә лә, ғаиләлә лә статусы үҙгәрҙе. Борон ир кеше - ғаиләне туйындырыусы, ә ҡатын усаҡ йылыһын тотоусы, балаларҙы тәрбиәләүсе булһа, хәҙер был бурыстарҙың сиге юйылды. Элегерәк ғаиләлә абруйы оло булған атай кешенең йәмғиәттә лә роле ҙур ине. Ошо үҙгәрештәрҙе күҙ уңында тотоп, ир-егет, ҡатын-ҡыҙ, шулай уҡ атай һәм әсәй булараҡ та кеше үҙе үҙгәрә белергә тейеш. Ҡатын-ҡыҙ барыбер заманға тиҙерәк ҡулайлаша, ул бөгөн ғаиләлә генә түгел, эшендә лә үҙенең урынын таба. Ысын ир-егеттәр юҡ ул, тигәнсе, гүзәл затҡа иренә ҡарата күберәк ышаныс белдерергә өйрәнергә кәрәктер? Аҡыллы ҡатындың ире һәр ваҡытта ла ғаиләлә үҙен бер башҡа юғарыраҡ тоя, әммә быға ҡатыны ярҙамында өлгәшкәнен һиҙмәй, тиҙәрме әле?

Икенсенән, борон да, бөгөнгө заманда ла бала тәрбиәләү өсөн күберәк әсәй кеше, тимәк, ҡатын-ҡыҙ яуаплы. Тик малай бәләкәйҙән үк атаһы менән ғорурланырға, унан өлгө алырға, уға оҡшап үҫергә теләргә тейеш. Баланы һүҙ менән тәрбиәләп булмай, ул һинең ҡылыҡтарыңды үҙенә һеңдереп үҫә. Бушҡа ғына "Инәһенә ҡарап - ҡыҙын, атаһына ҡарап улын һөй" тимәгәндәр бит. Малай иптәштәренә дуҫ була белергә лә, ҡыҙҙарға ихтирамлы булырға ла тейеш. Намыҫ, выждан, илһөйәрлек тойғолары ла бала саҡта һәм мотлаҡ ғаиләлә һалына, һәм уларҙы мотлаҡ атай өйрәтә. Йәғни, ир бала шәхес булып үҫһен өсөн әсәй ҙә, атай ҙа үҙен дөрөҫ тоторға тейеш. Әхлаҡи яҡтан камиллашмаһа, киләсәктә был бала ысын ир була ла алмай. Бындай ир-егетте ҡатыны күпме генә күтәрергә тырышмаһын, файҙаһыҙ буласаҡ, сөнки аҡылы менән аңлап ҡабул итә алмағанлыҡтан, ул ҡатынының шәхесен кәмһетә, шул рәүешле үҙенең баһаһын күтәреп йонсоясаҡ.

Ошо ябай ғына хәҡиҡәтте онотмаһаҡ, ҡатын-ҡыҙҙар "Ысын ир-егеттәр юҡ ул", тип әйтә лә алмаҫ ине. Тик бөгөн ниндәй күренеште күҙәтәбеҙ? Ғалимдар дөрөҫ әйтә, бөгөн малайҙы балалар баҡсаһында ла, мәктәптә лә, вузда ла ҡатын-ҡыҙҙар тәрбиәләй. Уларҙың, ғөмүмән, тормошта ирҙәр менән бәйләнеше аҙыраҡ. Етмәһә, өйҙә әсәй ирен эшкә һанамай торған авторитар ҡатын икән, ти, ир бала көслө ҡатындарҙан ҡурҡып та, бер үк ваҡытта уларҙы ихтирам итеп тә үҫәсәк. Бында һайланыу өсөн артыҡ юл юҡ: бала өлкәнәйгәс йә үтә агрессив, йә үтә ҡыйыуһыҙ буласаҡ. Ул шундай уҡ көслө ҡатынға өйләнәсәк, сөнки ул башҡа ғаилә моделенә өйрәнмәгән.

Унан һуң, хәҙер тулы булмаған ғаиләлә тәрбиәләнеүсе балалар күп. Был миҫалда инде бала ир тәрбиәһен бөтөнләй күрмәй. Айырылышҡан булһалар, әсәй баланы атаһы менән аралаштырмай, быны ирен хөкөм итеү ҡоралына әүерелдерә. "Беҙ бергә йәшәмәһәк тә, атай менән әсәй булып ҡалабыҙ, бер-беребеҙҙе ярата алмаһаҡ та, һине яратабыҙ", - тип аңлатырға ғына кәрәк балаға. Әгәр ҙә ниндәйҙер сәбәптәр менән бала атаһы менән аралаша алмай икән, олатай, ағайҙар, бик булмаһа, спорт секцияһы тренерҙары уны алыштыра ала, сөнки ир бала барыбер ҙә ир өлгөһөн күреп үҫергә тейеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Заманалар ниндәй генә булмаһын, йәмғиәт нигеҙен ғаилә ҡиммәттәре тотоп тора. Тимәк, иң тәүҙә ҡатын-ҡыҙ ғаиләлә малайҙарын дөрөҫ тәрбиәләүгә иғтибар бүлергә, был эшкә атайҙы ла ылыҡтырырға тейеш. Ир-азаматтарыбыҙҙың абруйы ла йышыраҡ ҡатын-ҡыҙҙың ҡылыҡтары менән бәйле түгелме һуң әле? Сөнки ниндәй генә осорҙа йәшәмәйек, был донъяла ысын ҡатын-ҡыҙҙар күпме булһа, ысын ир-егеттәр ҙә шул тиклем.**

**Ләйсән НАФИҠОВА әҙерләне.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ДОШМАН ҠОТҠОҺО ҒЫНА БЫЛ!

**Һеҙ мәктәптә уҡығанда берәй дәресте селпәрәмә килтергәнегеҙ булдымы? Ә минең булды. Шуны иҫемә төшөрөп, йылмайып иҫкә алып ултырам бына.**

1956-1957 уҡыу йылы ине. Илебеҙ иң беренсе булып, бөтөн донъяны шаҡ ҡатырып, Ер шары тирәләй спутник (юлдаш) осорҙо. Балалар ауыҙ һыуҙарын ҡойоп: "Был спутникты барыһы ла күргән. Бәләкәй генә йондоҙ кеүек, пипелдәп кенә осоп үтә ул", - тип һөйләй. Спутникты барыһы ла күргән, тик мин генә күрмәй ҡалғанмын. Уны шул тиклем күргем килә. Бына беҙҙең дүртенсе синыфта һуңғы дәрес, рус теле дәресе. Икенсе сменала уҡығас, ҡараңғы ла төштө, тышта йондоҙҙар ҙа ҡабынды. Уҡытыусы беҙгә ниндәйҙер бер хикәйә уҡый башланы. Мин уны тыңлайым, үҙем тәҙрәгә төбәлгәнмен. Терһәктәремде партаға терәп, устарым менән яңаҡтарымды тотоп, күктәге бер йондоҙҙо күҙәтәм. Бына бер саҡ башыма: "Бәлки, был йондоҙ түгел, ә спутниктыр, уның ҡуҙғалыуын мин генә һиҙмәйемдер", - тигән уй килде. Уйлап та өлгөрҙөм, йондоҙ ҡуҙғалғандай булғайны, һикереп тороп, ҡулым менән төртөп күрһәтеп: "О, спутник! Спутник!" - тип ҡысҡырыуымды һиҙмәй ҙә ҡалдым. Бөтөн уҡыусылар тәҙрәләргә ябырылды. Тик уҡытыусы менән мин генә урындарыбыҙҙа ҡалдыҡ. Уҡытыусы: "Йөрәгемде яра яҙҙың бит", - тип кенә әйтте. Ә уҡыусы балалар: "Алдаҡсы!" - тип, урындарына барып ултырҙы. "Ғәфү итегеҙ, зинһар, яңылыштым", - тип, аҡландым. Уҡытыусы мине әрләмәне лә, дәрестән дә ҡыуманы...

Ул беренсе спутник артынан аҙаҡ Белка һәм Стрелка, шунан Лайка тигән эттәр менән Ер шары тирәләй спутниктар осоролдо. Күп тә үтмәй, бөтөн донъяны тағы шаҡҡатырып, беренсе кеше Юрий Гагариндың йыһанға осоуы мәңгегә тарихта ҡалды. Шағирыбыҙ Рәми Ғарипов "Тағы беҙҙекеләр!.." тигән шиғырын яҙғайны шул уңайҙан:

*"Күр, һин, дошман:*
*Беҙҙең дөрөҫлөк был! -*
*Ҡояш булып күккә олғашты.*
*Бел: ҡояштан ҡапланырға мөмкин,*
*Мөмкин түгел ҡаплау ҡояшты!.."*

Беҙ шулай илебеҙ менән ғорурланып, ниндәйҙер күтәренкелек менән йәшәнек. Шул тиклем тырышып уҡыныҡ. Уҡытыусыларыбыҙ ҙа тырышып белем бирҙе. Тик дошмандар хәҙер, совет илендә белем биреү хөрт булған, имеш, тип хәбәр тарата. Европаса, тестар буйынса уҡытыу алға һөрөлә. Яңы быуын фекерләй белмәһен, яуаптарҙы ятлап, механик рәүештә хәтерҙәрендә ҡалдырһындар, тигән маҡсат ҡуйылалыр инде, күрәһең. Мин үҙем Өфөләге 9-сы һанлы башҡорт мәктәбен тамамлап, Мәскәүгә уҡырға барҙым. Мине, провинциянан килгән баланы, уҡытыусыларым Студенттарҙың фәнни ойошмаһы эшенә йәлеп итте. Төрлө темалар буйынса эҙләнеүҙәр, сығыштар яһау Мәскәү йәштәренә түгел, башҡорт балаһына ышанып тапшырыла ине. Аспирантураға ла саҡырҙылар. Башҡорт мәктәбендә белем алһаҡ та, рус телен рус балаларынан да яҡшыраҡ белә, ә туған телебеҙҙе һыу һымаҡ эсә инек. Әле лә баш ҡалалағы башҡорт мәктәптәрен тамамлаусыларҙың Мәскәү, Санкт-Петербург, хатта сит илдәр вуздарында белем алыуы тураһында ишетеп торабыҙ. Шуға ла, "Башҡорт мәктәптәрендә уҡыған балалар юғары белем ала алмай..." тигән хәбәр таратып, башҡорт телен уҡытыуҙы ҡыҫҡартыуҙарын аңлай алмайым. Әлеге лә баяғы, дошмандар эше инде был. Ата-әсәләрҙең дошман ҡотҡоһона бирелгәненә генә аптырайым бына...

**Айгөл АХУНОВА.**

✓ *Тарихты үҙгәртеп яҙыуға, боҙоуға юл ҡуймаҫтар. Күреп тораһығыҙ бит, һуңғы ваҡытта, фашизмды совет халҡы түгел, башҡа илдәр халҡы еңгән, тигән мәғлүмәти һуғыш алып барыла. Быға бер нисек тә юл ҡуйырға ярамай.*



*ТАМЫРҘАРҘЫ БАРЛАП...*

# ОЛАТАЙЫҢДЫҢ ИСЕМЕ КЕМ?

**Тарихты халыҡ үҙе тыуҙыра. Кеше үҙ халҡының, ауылының һәм ырыуының тарихын ни тиклем төплөрәк белһә, тамырҙарын тәрәнерәк һәм ентекләберәк күҙаллаһа, уның милли аң кимәле, мәҙәнилеге шул тиклем юғарыраҡ була.**




Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 70 йыллығына әҙерләнеү сиктәрендә мәктәбебеҙ менән "Үлемһеҙ полк" акцияһына ҡушылғайныҡ. Был акция барышында һәр бала өлкәндәрҙән һорашып, төрлө китаптарҙан, интернеттан эҙләп, һуғышта ҡатнашҡан атай-олатайҙары тураһында мәғлүмәттәр әҙерләргә тейеш ине. Аҙаҡ Ярат ауыл биләмәһенән һуғышҡа киткәндәр тураһында төҫлө альбом сығарыуҙы ла бурыс итеп алғайныҡ. Әммә был эштәрҙе башҡарыу өсөн уҡыусыларға ҡарағанда, өлкәндәрҙең ярҙамы нығыраҡ кәрәк булып сыҡты. Сөнки интернет-сайттарға мөрәжәғәт иткәнгә тиклем тәүмәғлүмәтте - үҙ ғаиләндең шәжәрәһен белеү кәрәк бит. Әлеге көндә мәктәптәрҙә Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан олатайҙарҙың ейәндәре лә түгел, ә бүләбүләсәрҙәре уҡып йөрөй. Ҡайһы берәүҙәр үҙ шәжәрәһен түгел, олатайҙарының исемен дә белмәй булып сыҡты. Был, әлбиттә, эҙәрмәндәргә ҙур ауырлыҡ тыуҙыра.

Шуға күрә ошо юҫыҡта эшләгән башҡа эҙәрмәндәргә һәр ғаиләнең альбомын булдырырға һәм был альбомды "Беҙҙең ғаилә геройҙары" тип атарға тәҡдим итәм. Альбомға ғаиләгеҙ шәжәрәһе һәм Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан ҡартатай-олатайҙарығыҙ, тыл ветерандары булған инәй-өләсәйҙәрегеҙ тураһында мәҡәләләр, фотоһүрәттәр урынлаштырылырға тейеш. Был эш, әлбиттә, оҙаҡ ҡына ваҡытты аласаҡ. "Ура!" ҡысҡырып, Еңеү байрамына тиклем генә эшләп ҡуя торған эш түгел был. Әммә балаларығыҙ өсөн ни тиклем ҡиммәтле материал ҡаласаҡ!

Беҙҙең ғаилә альбомында, мәҫәлән, 11 Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, 10 тыл ветераны, 7 шәжәрә теркәлде. Был шәжәрәләр Юлдашбаевтар (Ярат), Әбйәлиловтар (Сыңғыҙ), Әхмәтовтар (Сыңғыҙ), Сирбаевтар (Сыңғыҙ), Сөләймәновтар (I Эткол), Ғәниевтар (Таулыҡай), Эткоповтар (Баймаҡ) ғаиләләренең туғанлыҡ ептәрен барланы, берләштерҙе. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан Йомағужа Әхмәтов, Зөбәйер Сөләймәновтарҙың Ҡыҙыл йондоҙ ордендары менән наградланыуы, Фәтхислам Үҙәнбаев, Ғәләүетдин Әхмәтовтарҙың "Батырлыҡ өсөн" миҙалына лайыҡ булыуы оло ғорурлыҡ тойғоһо уятты. Ә инде ике олатайҙың хәбәрһеҙ юғалыуы әсендерҙе. Шул уҡ ваҡытта бер туғандар Фәтҡулла һәм Фазулла Сирбаевтарҙың оҙаҡ йылдар хәбәрһеҙ юғалғандар рәтендә йөрөп, хәҙер инде ерләнгән урындары табылыуы, Зөбәйер Сөләймәновтың һуғыш тамамланыуға ни бары 9 көн генә ҡалғас һәләк булыуы тетрәндерҙе. Шуға күрә лә һәр кемгә шулай тип өндәшкем килә: бер ваҡытта ла өмөтөгөҙҙө өҙмәгеҙ, эҙләнегеҙ, ныҡышмал булығыҙ! Үҙ ғаиләгеҙҙең тарихын белегеҙ, балаларығыҙҙа ғаиләгеҙ, тамырҙарығыҙ өсөн ғорурлыҡ тойғолары тәрбиәләгеҙ! Шунда ғына беҙҙең балалар: "Мин - башҡортмон, минең шундай шәп тарихым бар, батыр олатайҙарым, егәрле өләсәйҙәрем булған!" тип, баштарын юғары күтәреп йөрөр. Тарихты үҙгәртеп яҙыуға, боҙоуға юл ҡуймаҫтар. Күреп тораһығыҙ бит, һуңғы ваҡытта, фашизмды совет халҡы түгел, башҡа илдәр халҡы еңгән, тигән мәғлүмәти һуғыш алып барыла. Быға бер нисек тә юл ҡуйырға ярамай. Бөтәбеҙ бергә күтәрелеп сығып, һәр бер кеше үҙ балаһына тарихи дөрөҫлөктө ентекләп аңлатырға бурыслы. Әлегә, ғаиләгеҙҙең ололары иҫән саҡта, уларҙың хәтирәләрен яҙып алырға, фотолар табырға, интернетты файҙаланып ҡалырға кәрәк.

Шуға күрә туғандары тураһында интернет мөмкинлектәрен файҙаланып мәғлүмәттәр эҙләүселәргә бер нисә ғәмәли кәңәш еткерергә теләйем:

- Кемдеңдер наградалары тураһында мәғлүмәттәр эҙләйһегеҙ икән, "Подвиг народа" сайтына инегеҙ. Әлеге көндә был сайттан бөтә төр ордендар , "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән наградланыусылар тураһында мәғлүмәттәр, бойороҡтар, бүләкләү ҡағыҙҙары табырға була. Һуңғы көндәрҙә "Хәрби хеҙмәттәре өсөн" миҙалына лайыҡ булыусыларҙың да исемдәре индерелә башлауы күҙәтелә;

- Һуғышта һәләк булғандар, йә иһә хәбәрһеҙ юғалғандар тураһында "Мемориал" сайтынан мәғлүмәт табырһығыҙ;

- әсирлектә булыусылар тураһында мәғлүмәтте "Саксонские мемориалы" сайтынан эҙләгеҙ;

- Интернеттан мәғлүмәттәр эҙләгән саҡта унда исем-фамилияларҙа бик күп хаталар ебәрелеүен онотмағыҙ. Мәҫәлән, минең Йомағужа олатайымдың исеме Юмачуж булып киткән, Ғәләүетдин урынына Галяу, Сирбаев Фазулла урынына Сюрбаев Файзула тип яҙылған ине. Шуға күрә, кешене тик фамилияһы менән генә, йәки тик исеме менән генә яҙып эҙләү яҡшыраҡ һөҙөмтә бирә. Исем-фамилияларҙың хәрефтәрен үҙгәртеңкерәп эҙләп ҡарағыҙ.

Әгәр ҙә ошо изге эшкә тотоноп китһәгеҙ, һеҙгә ярҙам итеүселәр ҙә күбәйер. Мин, мәҫәлән, интернет-сайттар буйлап гиҙә торғас, Алена Потураева исемле ҡыҙҙы табып алдым. Был йәш кенә ҡыҙыҡай - профессиональ фотограф. Ул "Үлемһеҙ полк" акцияһына ҡушылған һәм кем мөрәжәғәт итеүенә ҡарамаҫтан, боронғо, һарғайып, һынып, бөкләнеп бөткән фотоларҙы бушлай реставрациялап бирә. Беҙ 20-ләп фотоны эшкәрттереп алдыҡ инде. Ә Баймаҡта бер генә иҫке фотоны яңыртыу өсөн 200 һум тирәһе аҡса түләргә тура килә. Алена мөмкин тиклем күберәк кешегә ярҙам итергә теләй, шуға күрә һеҙҙең иғтибарға уның электрон адресы: alena88_81@mail.ru. Фотоғыҙҙың электрон вариантын ебәрһәгеҙ, 1-2 көндән яңыртылған фотоны үҙегеҙҙең электрон почтағыҙҙа алырһығыҙ. Артабан үҙебеҙҙең Баймаҡта фотоны баҫтырып алырға ла мөмкин буласаҡ.

Мин үҙемдең ғаиләмдең тарихы менән ғорурланам! Ә һеҙ?

**Миләүшә ЮЛДАШБАЕВА.**
**Баймаҡ районы Ярат урта мәктәбе директоры.**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ӘЛМИСАҠТАН...



➔ **921 -922 йылдар** - 922 йылдың йәйендә ғәрәп илселәре Волга буйындағы Булғарға Бағдадтан сәфәрҙәре юлайҡан "Башҡорт иле" аша үткән. Илселек сәркәтибе Әхмәт ибн-Фаҙлан үҙенең юлъяҙмаларында башҡорттар менән осрашыуы тураһында бәйән итә, шулай уҡ уларҙың йола һәм ырымдары, ышаныуҙары, донъяға ҡараштары тураһында мәғлүмәттәр һәм легендалар яҙып ҡалдырған.

➔ **IX - XIII быуаттар** - Башҡорттар ислам дине ҡабул итә. Ауылдарҙа тәүге мәсеттәр һәм мәҙрәсәләр төҙөлә.

➔ **X - XIII быуаттар** - Башҡорт ҡәбиләләренең бер өлөшө Булғар ханлығына буйһондоролған була.

➔ **1072- 1074 йылдар** - Төрки телдәренең Мәхмүт Ҡашғари тарафынан төҙөлгән "Диуану лөғәт әттөрк"тип аталған ҙур һүҙлеккә башҡорт һүҙҙәре лә индерелгән, ә картаһында башҡорттар йәшәгән ерҙәр күрһәтелгән.

➔ **1096 йыл -** "Таш","Таш билбау" урыҫ йылъяҙмаларында тәү башлап Урал тауҙары телгә алына.

➔ **1135-1136, 1150 йылдарҙа** Испаниянан килгән ғәрәп сәйәхәтсеһе Әбү Хәмит әл-Ғарнати Волга һәм Кама ярҙарында була. Биләр ҡалаһындағы башҡорттар араһында ул Яҡуп бине Ноғман менән осраша һәм уның"Тәүәрихи Булғарийа" китабы менән таныша.

➔ **1154 йыл** - Ғәрәп географы әл Иҙриси үҙ яҙмаларында Башҡортостандағы Аҫкарун менән Муғар тауҙары хаҡында ҡиммәтле мәғлүмәттәр килтерә. Был Көньяҡ Урал тауҙарын иң дөрөҫ итеп һүрәтләгән яҙмалар булараҡ билдәле. Шул уҡ йылды әл Иҙриси донъя картаһы төҙөүен тамамлай, унда ул Оскаска (Көньяҡ Урал урынында) һәм Айани (Төньяҡ Уралдың көньяҡ өлөшө) тауҙарын күрһәтә.

➔ **1172 - 1242 йылдарҙа** - Билдәле "Кисса-и Йософ" поэмаһын яҙған Әйле башҡорто Ҡол Ғәли йәшәгән. Төрки әҙәбиәтенең тиңһеҙ мираҫы булған был әҫәрҙе ул 1212-1233 йылдарҙа яҙған.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Исламға тиклем булған дини йолаларҙың сағылышы

Тау эйәһен, уның хужаһын ихтирам итергә кәрәк, юғиһә, уның насарлыҡ ҡылыуы ла бар. Тау һәм мәмерйә эйәләренән тыш, башҡорттар урмандың, һыуҙың, йорттарҙың эйәһе барлығына ла ышана. Урман эйәһен тау һәм Урал аръяғы башҡорттары - шүрәле, ә төньяҡ-көнбайыш башҡорттары ярымтыҡ тип йөрөтә. Һунарҙа, урманда саҡта шүрәле күреүҙәре тураһында һөйләүсе башҡорттар ҙа бар. Шүрәле кеше сүрәтендә була, тик уның күҙе һәм аяғы берәү була, ҡайһы саҡта ул башҡа әйбергә, мәҫәлән, бүрәнәгә әйләнә ала. Ул кешеләр кеүек үк, һунарға йөрөй, уның ҡатыны һәм балалары була. Шүрәленең ҡатыны менән ҡыҙҙары сибәрлектәре менән айырылып тора, улар, ғәҙәттә, урманда, ҡая ярыҡтарында, мәмерйәләрҙә көн күрә. Шүрәле ҡысҡырып, кешеләрҙе ҡурҡытырға ярата, әммә унан ҡурҡмаһаң, ул бер кемгә лә теймәй.

Башҡорттарҙың һөйләүе буйынса, шүрәләләр кешеләр кеүек үк үлә, уларҙың йәне бар. Шүрәле йоҡлаған саҡта уның йәне ауыҙынан ялҡын булып сыға. Ғәйнә ырыуы башҡорттары һөйләүенсә, шүрәле атта һыбай сабырға ярата, ул атты шул тиклем йонсота, нисектер унан ҡотолоп, йортҡа ҡайтҡан аттың ауыҙынан күбектәр сығып тора. Бер әкиәттә һөйләнеүенсә, тотолған шүрәле киләсәкте әйтеп бирә ала.

Һыу эйәһе бик бай йән эйәһе, улар һыуҙа, күл төбөндә көн итә. Улар ҙа кешегә зыян итмәй. Улар йыш ҡына ер өҫтөнә сығып йөрөй, балалары ла, үҙҙәре лә артыҡ аҡыллы булыуы менән айырылмай. Башҡорттарҙың уларҙы төрлө ярыштарҙа еңеп, мул ғына алтын отоуы күп әкиәттәрҙә сағылыш тапҡан.

Һәр өйҙөң эйәһе була, тип ышана башҡорттар. Ул өйҙөң төрлө ерендә, мейестә йәшәй, тиҙәр. Әгәр ҙә уны асыуландырмаһаң, ул кешегә зыян итмәй, шулай ҙа шаяртып ала - йә мейес башынан таш ташлай, атҡа менеп йөрөй, уларҙың ялын үреп ҡуя. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары ышаныуҙары буйынса, өй эйәһе төндә мунса төшөргә ярата. Шуға ла төндә мунса инергә ярамай.

Башҡорттар бигерәк тә пәрей - ел хужаһы һәм дейеү пәрейе - ел батшаһы тураһында йыш телгә ала. Пәрей елдәр бәйләп ҡуйылған ҡая ярығында йәки тау башында йәшәй. Улар башҡорттарҙың үҙҙәре кеүек үк, кейеҙ тирмәләр ҡора, уларҙың йылҡы һәм һыйыр көтөүҙәре бар. Пәрей туй үткәреп, ҡатын ала, ҡайһы берҙә унда музыка ҡоралдарында уйнай белгән башҡорттар ҙа саҡырыла. Пәрей менән дуҫлаша алған кеше бай йәшәй, уларға уңыш йылмая. Пәрейҙең ҡыҙҙарҙы, йәш ҡатындарҙы урлаған сағы ла булған. Ябай кешегә әйләнгән пәрей кешеләр араһында, йәрминкәләрҙә йыш йөрөгән.

Башҡорттар бисуралар тураһында ла күп һөйләй. Бисура - бәләкәй генә һары кеше, ул ҡыҙыл күлдәктә йөрөй, урман төпкөлөндә йәшәй. Ир енесле бисура - ҡатын-ҡыҙҙарҙы, ә ҡатын енеслеһе ир-егеттәрҙе әүрәтеп, үҙе менән алып китә алған. Бисура менән бәйләнешкә инеүселәргә улар аҡса ташыған һәм был кешеләр гел бай булыуы менән айырылып торған.

***✓ Темуджин, Шайморатов, "Нәркәс"тәге - Сынтимер, "Ҡатынымдың исеме Морис"тағы Труабаль ролдәре өсөн республикабыҙҙың мәртәбәле премияһы - Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһына лайыҡ булдым.***

# КҮРЕНЕКҺЕҘ ТӨП

## характерлы эпизодик ролгә

**Һөнәренән уңған кешене, һис шикһеҙ, бәхетлеләр рәтенә индерергә кәрәк. Берәүҙәр күңеленә ятҡан, булмышына тап килгән, холоҡ-фиғеленә таман һөнәрҙе тапҡансы яҙмыштарында бер-нисә тапҡыр ҡырҡа боролош яһарға мәжбүр. Ә икенселәр бер һайлаған һөнәренә ғүмерлеккә тоғро ҡалып, унан ҡыуаныс табып, илһам алып, дәртләнеп йәшәй. Бөгөнгө ҡунағыбыҙ - М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры актеры, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, күп һанлы халыҡ-ара театр фестивалдәре лауреаты Хөрмәтулла Ғаззали улы ҮТӘШЕВ та үҙ һөнәренә мөкиббән китеп, башкөллө сумып ижад итеүселәрҙең береһе. Сәнғәт тип аталыусы ҡатмарлы ла, мауыҡтырғыс та донъяла үҙенең лайыҡлы урынын табып, театр олимпының юғары баҫҡысын биләүсе актер менән уның ижадын барлайбыҙ.**

### Сәнғәткә булған ынтылыш - бала саҡтан

Кешене мөхит тәрбиәләй. Бала эргәһендәге хәл-ваҡиғалар, һөйләнгән һүҙҙәр уның булмышын әүәләй, холоҡ-фиғелен формалаштыра, ғүмерлеккә үҙ эҙен ҡалдыра. Миңә лә ололарҙың йоғонтоһо ҙур булды. Атайым, бөтә тирә-яҡта данлыҡлы көрәшсе Ғаззали батыр, һабантуйҙарҙа еңеп алған һарығынан ауыҙ итергә барлыҡ туған-тыумасаны, күрше-тирәне саҡырып, күңелле мәжлестәр ҡорорға яратты. Был күркәм табындар ҡурай моңона, йыр-моңға сорналып, шаян-төртмә һүҙҙәр менән гөрләп үтә ине. Ололар ауыҙынан башҡорт халыҡ йырҙарының тарихын тыңлау, уларҙың ут сәсрәтеп бейеүен ситтән генә күҙәтеүҙәр йөрәгемә йыр-моңға һөйөүҙең тәүге орлоғон һалғандыр. Шулай күңелемдә сәнғәткә ынтылыш тыуғандыр. Хәҙер уйлайым да, бала саҡтағы һәр ҡылығым ижад донъяһына тартылыуҙан булған икән. Мәҫәлән, бала саҡта өй мөйөшөндәге радиоалғыстан яңғыраған концерттарҙы бар донъямды онотоп тыңлауым хәтеремдә ҡалған. Тауышы яҡшылап сыҡмаһа, ултырғысҡа баҫып, ҡолағымды радиоалғысҡа ҡуйып тыңлай торғайным. Клубта уҙғарылған концерт, кисәләрҙе түҙемһеҙләнеп көтөп алыуым да иҫтә.

Әҙәбиәт, уның аша сәнғәт донъяһына ылығыуыма бала саҡтағы шуҡлығым, тиктормаҫ булыуым һөҙөмтәһендә йыш алған тән яраларым да булышлыҡ итте. Бер-нисә тапҡыр аяғымды йәрәхәтләп, эсемде яралап, оҙаҡ ҡына түшәктә ятырға тура килде. Ошондай мәжбүри "ял итеү" мәлендә башҡорт халыҡ әкиәттәрен, башҡа китаптарҙы уҡырға әүәҫләнеп киттем. Аҙаҡ, бик үк аңлап етмәһәм дә, рус телендәге китаптарға күстем. Китап геройҙары менән үҙ аллы һөйләшеп, хатта бәхәсләшеп киткән саҡтарым да йыш булды. Үҙемде шул геройҙар араһында хис итеп, уларҙың тормошо менән "йәшәнем", улар менән бергә ижад иттем. Шулай итеп, әҙәбиәт аша сәнғәткә ылыҡтым.

Психологтар әйтеүенсә, үҙ аллы мауығып уйнаусы баланың ижад өлкәһендә үҙен табыу мөмкинлеге юғары икән. Был фекерҙе үҙемдең миҫалда дәлилләй алам. Мин бәләкәй ваҡытта селлә тип йөрөтөлгән осор бар ине. Ул ғинуар урталарындағы иң һыуыҡ мәл. Ошондай көндәрҙә урамға сыҡмайым, ә өйҙә пластилиндан эшләп алған һындарым менән бар донъямды онотоп уйнайым, улар менән ниндәйҙер ваҡиғалар тыуҙырам. Тимәк, психология күҙлегенән сығып ҡарағанда, ижадсы булыу яҙмышыма яҙылған булған инде.

Мәктәп йылдарында ла сәнғәттән айырылманым: бик теләп төрлө түңәрәктәргә йөрөнөм, байрам сараларында әүҙем ҡатнаштым. Ә 10 класта данлыҡлы ҡурайсы Ишмулла Дилмөхәмәтовтың бер туған ҡустыһы Сәйфулла ағай алып барған ҡурай түңәрәгенә йөрөй башланым. Сәйфулла ағай көй өйрәтер алдынан мотлаҡ уның тарихын тәфсирләп һөйләп, йырын йырлап ишеттерер ине. Шулай ул йыш ҡына Өфөлә уҙған концерт, спектаклдәр, театр артистары тураһында һөйләй торғайны. Уның һөйләгәндәрен тыңлап, шул сихри сәнғәт донъяһына бер генә күҙ һалаһы ине, тип хыяллана торғайным, ә шулай ҙа үҙемде актерлыҡ һөнәрендә итеп күҙ алдыма килтермәй инем әле. Ул хаҡта хыялланыу ҙа ҡурҡыныс булғандыр беҙгә, ауыл малайҙарына.

### Хыялыма илтеүсе юл...

Күк томандар артында үҙенә ымһындырып, ылыҡтырып торған ижад донъяһына, атап әйткәндә, актерлыҡ һөнәренә, урау-урау юлдар үтеп килдем. Мин мәктәпте тамамлаған ваҡытта йәштәрҙе ауылда, совхоз-колхоздарҙа ҡалдырыу эше киң йәйелдерелгәйне. Шуға күрә, ҡулға аттестат алғас, бөтә класс менән ауылда эшкә ҡалдыҡ. Мин бер йыл көтөүсе булып эшләгәндән һуң, армия сафына алындым. Оло тормош мәктәбе булған армияла тыуып-үҫкән ерҙең, туғандарҙың ҡәҙерен нығыраҡ аңлайһың, киләсәккә төрлө пландар ҡораһың. Мин дә тыуған ил алдындағы хәрби бурысымды үтәгәндән һуңғы тормошом хаҡында күп баш ваттым. Ауылда ҡалырға ярамағанын армияға тиклем үк аңлағайным инде. Ундағы аҡрын ҡына аҡҡан тормош, бер төрлөлөк, эштән һуң ҡайҙа барып төртөлөргә белмәй ҡаңғырып йөрөүҙәр түҙеп торғоһоҙ була торғайны. Шуға күрә, ауылда ҡалмаҫҡа, ә ҡалаға барып, белем алырға, тигән ниәт менән ҡайтып төштөм армиянан. Ә туғандар унда мине өйләндерергә әҙерләнеп ята. Муйынға ҡамыт кейергә иҫәбем юҡ, тинем дә, урамда ноябрь булыуына һәм уҡыуҙарҙың күптән башланыуына ҡарамай, Магнитогорск ҡалаһына юлландым. Һуңлап килһәм дә, армиянан яңы ҡайтыуымды иҫәпкә алып, Магнитогорск педагогия институтының әҙерлек курсына (рабфак) уҡырға алдылар. Элек әҙерлек бүлегенә уҡырға ингәндә мотлаҡ ике йыл хеҙмәт стажы һәм характеристика талап итәләр ине. Ректорат характеристика һорап, мин хеҙмәт иткән рота командирына хат ебәрҙе. Оҙаҡ ҡына ваҡыт үткәс, мине ике йыл дауамында һындырырға тырышып та, үҙ маҡсатына өлгәшә алмаған рота командирынан насар йөкмәткеле характеристика килеп төштө. Ошо ҡағыҙ киҫәге уҡытыусылыҡҡа юлымды япты ла инде. Һайлау мөмкинлегем юҡ ине, Стәрлетамаҡҡа юлландым һәм мәҙәни-ағартыу (культпросвет) техникумының оркестр бүлегенә уҡырға индем. Бер аҙҙан ошо уҡ техникумдың театр бүлегенә ситтән тороп уҡырға күстем дә, Салауат драма театрына сәхнә эшсеһе булып эшкә урынлаштым. Театр коллективы менән гастролдәрҙә йөрөгән саҡта Өфө дәүләт сәнғәт институтының актерҙар бүлегенә студенттар йыйыуҙарын ишетеп, баш ҡалаға юлландым. Һынауҙарҙы уңышлы үтеп, театр факультеты студенты булып киттем. Театрға юлым шулай урау-урау булды.

### Театрҙағы тәүге аҙымдарым

Һәр студент институт сәхнәһендә төрлө образдар тыуҙырып, тәүге сирҡаныс ала, артабан үҙенең оло сәхнәләге тәүге сығыштарына әҙерләнә, шуға ынтыла. Минең өсөн был әһәмиәтле ваҡиға 4-се курста булды: Башҡорт дәүләт академия театры сәхнәһендә тәүге тапҡыр Нәжиб Асанбаевтың режиссер Лек Вәлиев сәхнәләштергән "Майҙан тотабыҙ" спектаклендә уйнаным. Диплом алып, ошо театрҙа эш башлаған тәүге йылдарҙа Әсғәт Мирзаһитовтың "Утлы өйөрмә"һендә - Айтуған, Мольерҙың "Ирекһеҙҙән табиб"ында - Лука, Мостай Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" спектаклендә - Сәмиғулла, Фәрит Богдановтың "Аманатҡа хыянат"ында тәфтишсе Шәйхулов ролдәрен уйнаным. Хәҙер яҙмаларҙан шул ваҡыттағы ролдәремде ҡарайым да, бик күп етешһеҙлектәремде күреп, аһ итәм: практик оҫталыҡ етешмәү арҡаһында эске иркенлек булмаған, геройымдың фекерен тулы итеп уйнап еткерә алмағанмын. Шулай сәсәй-сәсәй, абына-йығыла өйрәнәһең инде бар нәмәгә. Эшләмәгән кеше генә яңылышмай, тигән кеүек, уйнамаған актер ғына профессиональ йәһәттән үҫмәй.

Мин театрға эшкә килгәндә унда Зәйтүнә Бикбулатова, Хөсәйен Ҡудашев, Тәлиға Бикташева, Илшат Йомағолов кеүек бөйөк актерҙар эшләй ине. Уларҙың сәхнәләге уйындарын, спектаклгә әҙерләнеүҙәрен күҙәтеп, образға нисек инеүҙәрен өйрәнеп, үҙем өсөн баһалап бөткөһөҙ тәжрибә алдым, практик йәһәттән байыным. Шундай билдәле таланттар уйнаған театрҙа эш башлауы беҙгә, йәштәргә, еңелдән булманы, әлбиттә. Ләкин уларҙың спектаклдән һуңғы хуплау һүҙҙәре, һәр яҡлап ыңғайлатып тороуҙары, уйнаған ролдәр тураһында яҡшы баһалама биреүҙәре миндә үҙемә ҡарата ышаныс тыуҙырҙы һәм илһамланып эшләргә булышлыҡ итте.

### Визит карточкаларым

Утыҙ йыллыҡ ижад багажымда төрлө пландағы - герой-романтик, тәрән фәлсәфәүи эстәлекле, комик, трагик, психологик ролдәрем бар. Уларҙың барыһы ла миңә берҙәй яҡын һәм ҡәҙерле. Һәр ролем ижадымды тулыландырҙы, актерлыҡ һәләтемде төрлө яҡлап асты. Ләкин һәр актерҙың визит карточкаһына әүерелгән роле була. Минеке иһә - икәү. Улар - Нурлан Абдыҡадыровтың "Сыңғыҙхандың һуңғы төйәге"ндәге Темуджин һәм Кен Кизиның "Кәкүк ояһы"ндағы Макмерфи ролдәре.

***Утыҙ йыллыҡ ижад багажымда төрлө пландағы - герой-романтик, тәрән фәлсәфәүи эстәлекле, комик, трагик, психологик ролдәрем бар. Уларҙың барыһы ла миңә берҙәй яҡын һәм ҡәҙерле. Һәр ролем ижадымды тулыландырҙы, актерлыҡ һәләтемде төрлө яҡлап асты. Ләкин һәр актерҙың визит карточкаһына әүерелгән роле була. Минеке иһә - икәү. Улар - Нурлан Абдыҡадыровтың "Сыңғыҙхандың һуңғы төйәге"ндәге Темуджин һәм Кен Кизиның "Кәкүк ояһы"ндағы Макмерфи ролдәре. Автор үҙе ҡуйған спектаклдәге Темуджин образының үҙ фәлсәфәһе бар, ул бик ҡатмарлы роль. Мин, йәғни бөгөнгө заман актеры, бынан 800 йыл элек йәшәгән Сыңғыҙханды кәүҙәләндерәм. Бер-нисә образ тыуҙырыу менән бер рәттән, спектаклдә иҫкән елде, яуған ямғырҙы, дала буйлап тәгәрәп барған ҡамғаҡты һәм башҡа тәбиғәт күренештәрен һынландырырға, төрлө музыкаль инструменттарҙа уйнарға, ҡош-хайуан тауыштары сығарырға, ҡайҙалыр йүгереп менергә, һикерергә, көрәшергә тура килә.***

Автор үҙе ҡуйған спектаклдәге Темуджин образының үҙ фәлсәфәһе бар, ул бик ҡатмарлы роль. Мин, йәғни бөгөнгө заман актеры, бынан 800 йыл элек йәшәгән Сыңғыҙханды кәүҙәләндерәм. Бер-нисә образ тыуҙырыу менән бер рәттән, спектаклдә иҫкән елде, яуған ямғырҙы, дала буйлап тәгәрәп барған ҡамғаҡты һәм башҡа тәбиғәт күренештәрен һынландырырға, төрлө музыкаль инструменттарҙа уйнарға, ҡош-хайуан тауыштары сығарырға, ҡайҙалыр йүгереп менергә, һикерергә, көрәшергә тура килә. Эмоциональ йәһәттән дә, физик яҡтан да ҙур көс талап иткән Темуджин роле VII Төрки телле халыҡтарҙың "Науруз" һәм Бишкек ҡалаһында уҙған "Арт-Ордо" Халыҡ-ара театр фестивалдәрендә "Иң яҡшы ир-егет роле" тип баһаланды. "Науруз"да ул шулай уҡ тәнҡитселәрҙең махсус призына лайыҡ булды. Башҡа фестивалдәрҙә лә был образым юғары баһа алды. Темуджин, "Генерал Шайморатов"тағы - Шайморатов, "Нәркәс"тәге - Сынтимер, "Ҡатынымдың исеме Морис"тағы Труабаль ролдәре өсөн республикабыҙҙың мәртәбәле премияһы - Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһына лайыҡ булдым.

Режиссер Айрат Әбүшахманов сәхнәләштергән "Кәкүк ояһы"ндағы Рэндл Макмерфи ролен дә билдәләп үткем килә. Психик ауырыуҙар дауаханаһындағы пациенттар тормо-

✓ *Әлеге ваҡытта Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына шиғри-әҙәби кисә әҙерләйбеҙ. Алла бирһә, ул да алдағы проекттар кеүек үк уңышлы булыр һәм тамашасы күңеленә хуш килер, тип өмөтләнәм.*



# ГЕРОЙҘЫ УЙНАҒАНСЫ...

## өҫтөнлөк бирәм



шон һүрәтләгән был әҫәрҙә сәхнәләштереп, театр труппаһы "Алтын битлек" Милли театр премияһының өс номинацияһына тәҡдим ителде. Рэндл Макмерфи роле минә "Туғанлыҡ" IV Халыҡ-ара төрки телле театрҙар фестивалендә шулай уҡ "Иң яҡшы ир-егет" роле номинацияһында еңеү килтерҙе.

### Төп һәм эпизодик ролдәр

Һәр спектаклдең төп геройы менән бер рәттән, эпизодик ролдә уйнаусыһы ла була. Уларҙың икеһе лә берҙәй мөһим һәм спектаклдең төп темаһын асыу өсөн кәрәк. Төп ролде уйнағандағы оло яуаплылыҡ ҡайһы ваҡытта һине ныҡ баҫа һәм образды тулыһынса асыуға ҡамасаулай. Ләкин мин ролгә бер аҙ еңелерәк ҡарауҙы хуп күрәм.

Тамашасы ролде уйнау минең өсөн ни тиклем ауыр икәнен күрмәскә тейеш. Театрҙа уйнай башлағанда уҡ ошо хәҡиҡәтте аңлаһам да, дөйөм мөхит баҫымына ҡаршы тора алмай инем. Ләкин ваҡыт үтеү менән үҙемде ҡулда тоторға, самаһыҙ хистәргә бирелеп, уғата көсәнмәскә өйрәндем.

Эпизодик ролде уйнауҙың да үҙ нескәлектәре бар. Төп ролде башҡарғанда, спектаклдең башынан аҙағына тиклемге арауыҡта мин барыбер ҙә үҙемдең бар мөмкинлектәремде асып, режиссер ҡуйған талапты урынеренә еткереп атҡарып сығам. Хатта бөтә уйыным бик үк уңышлы булмаһа ла, мәлдәре менән барыбер тамашасы күңеленә үтеп инерлек образ тыуҙырыуыма ышанам. Ә эпизодик ролде башҡарғанда иркенләп "йүгереү" өсөн ваҡыт юҡ, минторған урындан юғарыға "һикерергә" тейешмен, йәғни сәхнәгә сыҡҡан аҙ генә ваҡыт эсендә тамашасыны әсир итерлек образ тыуҙырырға бурыслымын. Үҙемдә ике ролдә лә берҙәй яҡшы тойһам да, күренекһеҙ генә төп геройҙы уйнағансы, характерлы эпизодик ролде башҡарыуға өҫтөнлөк бирәм.

### Кино - һәйбәт, театр - яҡынраҡ

Сәхнәлә уйнаған ролдәрем менән бер рәттән, кинороләрем булыуына ла шатмын. Ижад йылғаһының төҙ ҡарашҡа бер, ләкин айырмалыҡтары күп булған ике ярын тәшкил итеүсе театр һәм кино сәнғәтендәге төрлө образдарым минә актер булараҡ үҫтерҙе. Сәхнәлә образ тыуҙырыу менән камера алдында роль уйнау ҡырҡа айырыла. Спектакль - кино кеүек түгел. Айҙар, йылдар дауамында ниндәйҙер спектаклде уйнайһың, бер үк һүҙҙәрҙе ҡабатлайһың, күп тапҡыр өйрәнелгән хәрәкәттәрҙе башҡараһың. Тик бөгөн уйналған шул уҡ спектакль бер ҡасан да кисәгеһенә һәм иртәгәһенә оҡшамай, сөнки һәр көндө сәхнәне төрлөсә тояһың. Спектаклде бер ҡасан да ҡабатлап булмай, сөнки уйнаған ролем нәҡ ошо көн күҙлегенән, ваҡиғаларынан, хәл-торошонан сығып башҡарыла, образым нәҡ бөгөн килгән тамашасы алдында тыуа һәм шул уҡ көндә "үлә". Сәхнәлә уйнағанда, кинофильмдан айырмалы рәүештә, шул уҡ көндә үҙемдең хеҙмәт емешемдең һөҙөмтәһен күрәм, тамашасының уйнауымды нисек ҡабул иткәнен беләм. Театр сәхнәһендә мин хис-тойғоларымды нисек бар - шулай күрһәтәм һәм ниндәйҙер хата эшләргә хаҡым юҡ, ә кинола уйнағанда төрлө технологиялар ярҙамында ролемде бер-нисә тапҡыр ҡабатлай алам. Кинола эштең һөҙөмтәһен монтаж, музыка ярҙамында үҙгәртергә, тулыландырырға йәки алып ташларға була. Ә сәхнә минә бындай мөмкинлек бирмәй. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, театр сәхнәһе барыбер яҡыныраҡ.

### Тамашасы тураһында

Тамашасы - актер өсөн барометр, спектаклдең мөһим бер компоненты. Ролдең нисек уйналыуы уға ла бәйле. Бер көндә килгән тамашасы спектаклде бик ихлас ҡараһа, икенсе көндә килеүселәр үҙҙәрен бөтөнләй башҡаса тоторға мөмкин. Хатта бер үк тамашасының да спектаклгә мөнәсәбәте төрлө ваҡытта төрлөсә булыуы ихтимал. Мин шуны аңларға һәм уйынымды халыҡ күңеленә барып етерлек итеп ҡорорға тейешмен. Спектакль барышында тамашасыға ҡарап уйнамаһам да, үҙемдең ниндәйҙер етенсе тойғом менән залдың кәйефен, булмышын, тын алышын тоям һәм был күҙгә күренмәгән бәйләнеш уйыныма тәьҫир итмәй ҡалмай. Әгәр ҙә мин тамашасыны аңламаһам, ә тамашасы минең уйынды ҡабул итмәһә, спектаклде уңышлы итеп булмаясаҡ.

Замандың үҙгәреүе театр тамашасыһына ла йоғонто яһамай ҡалманы. Элек халыҡ театрға дәррәү йөрөнө, тамаша залы шығырым тулы булып, спектаклдәрҙең һәр береһе аншлаг менән үтер ине. Ҙур ҡалаларҙа ла, бәләкәй генә ауылдарҙа ла тамашасы юҡлығына зарланыусы театр булманы. Ә хәҙер, ҡыҙғаныска күрә, был йәһәттән маҡтанырлыҡ түгел. Өфөлә лә, башҡа төбәктәрҙә лә спектаклгә йөрөүселәр һаны ҡырҡа кәмене. Өфө тамашасыһы баш ҡала театрҙары, шулай уҡ сит төбәктәрҙән гастролгә йыш килеүсе театр труппалары тарафынан ныҡ "иркәләтелгән" булһа, ауылдарҙа спектаклдәр бик һирәк ҡуйыла, сөнки ул, беренсенән, ҙур сығымдар талап итә, икенсенән, халыҡ йөрөмәй. Тамашаны хатта түләүһеҙ итеп ҡуйғанда ла залға тамашасы йыйып булмай. Был аҡса юҡлығына ғына бәйләнмәгән, ә рухи аҙыҡтың икенсе планға күсеүе, күңелдәрҙе битарафлыҡ баҫып барыуы тураһында һөйләй, буғай.

### Һүҙ сәнғәте, һүҙ ҡәҙере

Элек йыш үткәрелгән шиғри кисәләргә халыҡ бик теләп йөрөнө. Ул ваҡытта һүҙ ҡәҙере бар ине. Ә хәҙер һүҙ сәнғәте юҡ кимәлендә, ләкин уға һорау бар икәнлеген режиссер булараҡ сәхнәгә сығарған "Февраль. Буран...", "Ҡыҙҙар моно - моно халҡымдың" исемле проекттарҙың тамашасы тарафынан йылы ҡабул ителеүе асыҡ күрһәтте. Рәми Ғариповтың ижадына, тормош юлына арналған "Февраль. Буран..." шағир донъяһына сәйәхәт проекты бығаса театрға килеп тә урамаған оло шәхестәребеҙҙе, театрҙы бик үк үҙһенмәгән әҙәбиәт хеҙмәткәрҙәрен йәлеп итеүе менән дә әһәмиәтле булды.

Замандаш шағирәләребеҙҙең һоҡланғыс ижадына арналған "Ҡыҙҙар моно - моно халҡымдың" шиғриәт кисәһе лә коллегаларым менән тамашасыға кәрәкле йүнәлештә эшләүебеҙҙе дәлилләне. Барыбыҙҙың да йөрәгендә йәшәгән илебеҙгә, телебеҙгә, халҡыбыҙға ҡарата һөйөү тойғолары менән һуғарылған кисә рухтарҙы байытты.

Әлеге ваҡытта Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына шиғри-әҙәби кисә әҙерләйбеҙ. Алла бирһә, ул да алдағы проекттар кеүек үк уңышлы булыр һәм тамашасы күңеленә хуш килер, тип өмөтләнәм.

### Илһам сығанағым - ғаиләм һәм тыуған яғым

Ижадыма ҡуҙ өҫтәп, йылылыҡ биреп тороусы, ныҡлы ҡалҡам - ғаиләм булыуы менән бәхетлемен. Шатлыҡтан баш әйләнгәндә лә, ауырлыҡтар бөгөргә тырышҡанда ла ғаиләмә һыйынам. Хуплау һүҙҙәре әйтеп тороусы, һәр саҡ ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер яҡындарым йөҙөп йөрөп ижад итерлек көс-ҡеүәт, дәрт-дарман бүләк итә.

Тыуған яҡтарым да - шулай уҡ илһам сығанағым. Ҡасан ҡайтһам да, мотлаҡ бәләкәй саҡта атай менән көтөү көткән урындарҙы, бесән сапҡан ерҙәрҙе, Таштуғай буйҙарын йәйәү йөрөп әйләнәм. Был бәләкәй генә сәйәхәтем күңелдә булған төйөндәрҙе сисә, юшҡындарҙы алып ташлай. Ауылдан һәр саҡ илһамланып, яңы үрҙәр яуларға рухи көс йыйып киләм.

Ғаиләмә лә, тыуған еремә лә рәхмәтлемен. Үҙемдең һөнәремә рәхмәтлемен, сөнки ул минең йомоҡ ҡына булған характерымды асты, үҙемдә ышаныс тыуҙырҙы, уйнаған персонаждарым мине төрлө яҡлап байытты. Актер булыуым төрлө йәмәғәт сараларында әүҙем ҡатнашыу, милләтем, туған телем, халҡым өсөн файҙалы эштәр атҡарыу мөмкинлеге бирә. Ошо йылдар эсендә һис ҡасан актер һөнәрен һайлауыма үкенмәнем. Бер ҡасан да унан күңелем ҡайтманы, актер булыуымдан ҡәнәғәтһеҙлек тойғоһо кисергәнем булманы. Театрға оҙон юлдар үтеп, донъяның әсеһен-сөсөһөн татып, әҙме-күпме тәжрибә туплап, аңлы рәүештә килеүем унда булан торған төрлө көтөлмәгәнлектәрҙе һынмайынса үткәреп ебәреү мөмкинлеге бирҙе.

*Замандың үҙгәреүе театр тамашасыһына ла йоғонто яһамай ҡалманы. Элек халыҡ театрға дәррәү йөрөнө, тамаша залы шығырым тулы булып, спектаклдәрҙең һәр береһе аншлаг менән үтер ине. Ҙур ҡалаларҙа ла, бәләкәй генә ауылдарҙа ла тамашасы юҡлығына зарланыусы театр булманы. Ә хәҙер, Өфөлә лә, башҡа төбәктәрҙә лә спектаклгә йөрөүселәр һаны ҡырҡа кәмене. Өфө тамашасыһы баш ҡала театрҙары, шулай уҡ сит төбәктәрҙән гастролгә йыш килеүсе театр труппалары тарафынан ныҡ "иркәләтелгән" булһа, ауылдарҙа спектаклдәр бик һирәк ҡуйыла, сөнки ул, беренсенән, ҙур сығымдар талап итә, икенсенән, халыҡ йөрөмәй. Тамашаны хатта түләүһеҙ итеп ҡуйғанда ла залға тамашасы йыйып булмай. Был аҡса юҡлығына ғына бәйләнмәгән, ә рухи аҙыҡтың икенсе планға күсеүе, күңелдәрҙе битарафлыҡ баҫып барыуы тураһында һөйләй, буғай.*

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Кешенең тәҡдире маңлайына яҙыла, тиҙәр. Ышанырғамы, юҡмы - һәр кем үҙе хәл итә. Ләкин бөгөнгө әңгәмәсебеҙҙең тормош юлын байҡағанда ул һүҙҙәрҙең хаҡлығына инанаһың. Осраҡлы елдәр уны әллә күпме тапҡыр сәнғәттән ситкә алып китһә лә, яҙмышынан - ижадтан һәм сәхнәнән - айыра алмаған. Бынан ул да - күңеленә яҡкан һөнәренә хеҙмәт итеүсе актер, беҙ ҙә - оло талант эйәһенең рәхмәтле тамашасылары, һис шикһеҙ, отҡанбыҙ.**

Гөлназ МАНАПОВА
әңгәмәләште.

✓ ***Урман гөрләп торған тормош сығанағы. Тик ул үҙенсә гөрләргә тейеш. Әҙәм затына унда урын булмаһын ине. Әҙәм ҡыҫылған ерҙә йәшәйеш көйһөҙләнә лә ҡуя. Ул башта үҙе йәшәгән ауыл-ҡалаларҙағы тормошто көйләһен.***




**Иҙрис НОҒОМАНОВ**

# СӘМ

**(Хикәйә)**

Зәй, турараҡ тартырға тырышып, кейек-ҡошҡа бай Төпһөҙкүл тарафтарына ынғайланы. Үҙе серле, үҙе шом тулы күлдең ышыҡ ҡамышын маҡсат итеп сыҡҡан кейеге лә төйәк итә торған. Бигерәк тә ҡыштың сасҡауһыуыҡ көндәрендә. Тәпәшәҫы ҡалҡыулыҡты артылғас та артына боролоп ҡараны. Ауыл инде күренмәй. Хыялдарға бирелеп барыусы Зәйгә ни өсөндөр яманһыу булып китте. Әйтерһең дә, оҙаҡҡа, бик оҙаҡҡа китеп бара. Былай ҙа болоҡһоп торған күңелен һағыш ғәләмәте солғап алды. "Тормошта ла шулай артыңа боролоп ҡарай-ҡарай атлаһаң икән ул. Ҡайҙа һәм ни эшләп барғаныңды самалар өсөн. Юҡ шул, ҡарамайбыҙ. Теләгебеҙ юҡмы, әллә онотабыҙмы? Шул сәбәпле, ҡыҫҡа ғына йәшәйешебеҙҙә бихисап яңылыш аҙымдар яһайбыҙ, хаталанып бөтәбеҙ, хатта аҙашып та китәбеҙ. Килгән юлыбыҙға әйләнеп бағырға беҙ ғүмер ахырыбыҙ еткәндә генә форсатын табабыҙ, һис кәрәкмәгәндә. Барыһы ла үтелеп, һәммәһе башҡарылып бөткәс. Инде бараһы юлдарҙы тоҫмаллауҙың хәжәте ҡалмағанда. Йәл. Ә ниңә улай? Быныһы әҙәми заттың баш ватҡан мәңгелек һорауы. Ни өсөн беҙ йәшәү ҡәҙерен, ғүмерҙең бәйәһен уның ахырында йәиһә бер килеп әжәл күҙгә текләп торғанда ғына беләбеҙ? Сәбәбе бының нимәлә? Ә һуң сәләмәтлегебеҙҙе һаҡлауҙы ниндәйҙер ифрат ауыр бурыс һанайбыҙ. Тимәк, үҙ теләгебеҙ менән тиерлек ғүмеребеҙҙе ҡыҫҡартабыҙ булып сыға. Төтөнгә тонсоға-сәсәй тәмәке имеүбеҙҙе, ҡыҙыл үңәсебеҙҙе көйҙөрә-яндыра, ауыҙыбыҙҙан кире сыҡҡансы хәмер һемереүебеҙҙе нисек аңлатырға? Ошо түгелме һуң кеше тип аталған йән эйәһенең үҙен-үҙе күрәләтә юҡ итеүе? Хатта киләсәк быуындарын һәләкәткә этәреүе. Ахырызаман, ахырызаман, тип лаф орабыҙ. Ә шул ахырызаманды әҙәми зат үҙе яҡынайтмаймы? Үҙенең аҡылға һыймаған ҡылыҡтары, бер көнлөк йәшәү маҡсаты менән, һаулығы ҡыйралған сәрхүштәрҙең, ата тәмәкеселәрҙең: "Их, ошо ағыуҙы алданыраҡ ташламаным, элегерәк әйтмәнеләр бит, ҡәһәрең!" - тип үкенеп зарланғандарын күп ишеткәне булды. Әйтерһең, уларға тәмәке төпсөгөн кемдер көсләп ҡаптырған да, араҡыны ауыҙын шаҡарып ҡойған. Үҙе йығылған иламаҫҡа тейеш тә. Ә юҡ, ваҡытында бер тин шайы тормаған ғүмерҙең әжәл яҡынлашҡанда бәйәһе ҡырҡа арта. Һуңлап арта. Йәнде әсетеп үкенестәре тороп ҡала. Ҡасан ғына әле ауыҙынан һаҫыҡ еҫтәр аңҡыта-аңҡыта күкрәк һуғып йөрөгән сәрхүш әзмәүер бер килеп меҫкен-бахырға әйләнә лә ҡуя. Уның хәҙер рюмка күтәрерлек түгел, шырпы һыҙырлыҡ та хәле ҡалмай. Ошоға ҡарамаҫтан, йәмғиәткә ниндәйҙер дәғүәләрен ташлап маташа. Йәнәһе, ул инвалид, төҙәлмәҫлек ғәрип: давай пенсия! Һәм... ғәжәп! Уға емертеп аҡсаһын да түләйбеҙ, башҡа изгелектәрен дә күрһәтәбеҙ. Ә был мәлдә ысынлап та хөрмәткә лайыҡ оло кешеләр, киләсәгебеҙ һаналған йәш ғаиләләр хөкүмәт хәйеренә көн итеп фәҡирлек кисерә. Ошоларҙы нисек аңлатырға? Кем нисектер, ә Зәйнулла, ни тиклем тырышмаһын, аңлай ҙа, аңлата ла алмай.

Зәй ашыҡмай ғына алға барыуын белә. Ҡабаланыр урыны юҡ. Уға көсөн һаҡлау фарыз. Йонсоу көн болотло булғанлыҡтан, ҡояш күренмәй. Самалауынса, ул инде байтаҡ ҡына күтәрелеп өлгөргәндер. Күгелйем ҡарҙың ҡапыл гөлт итеп асыҡ-зәңгәр төҫкә кереүе шуға ишара. Алыҫ та түгел, һорғолт-шыйыҡ томанға ышыҡланған тауҙар теҙмәһе төҫмөрләнә. Ул - Ирәндек һырты. Тауҙар, тауҙар! Һеҙ серле лә, һоҡландырғыс та, ымһындырғыс һәм ҡурҡыныс ғорур ҙа. Һеҙ Ер-әсәбеҙҙең миллиондарса йылғы йомаҡтарын ышанысло һаҡлайһығыҙ. Шул сер-йомаҡтар менән һис уртаҡлашырға теләмәйһегеҙ. Хәйер, нығыш кешеләр ул серҙәрҙең һәммәһен белеп бөткән хәлдә йәшәйештең ҡыҙығы ҡалмаҫ ине. Моғайын, шулай булыр ине. Аллаһ барлыҡ серҙәрҙе лә асып бөтөргә ҡушмаған. "Мин рөхсәт иткәнен генә белегеҙ" тигән ул. Дөрөҫ әйткән. Фани донъя ҡыҙығыраҡ та, ҡәҙерлерәк тә булһын өсөн аҙ ғына серле булыуы мотлаҡ.

Зәй һирәк ағаслыҡҡа керҙе. Бындағы ҡар өҫтө һәр төрлө йәнлек эҙҙәре менән сыбарланған. Шылт иткән дә тауыш ишетелмәгән тын урманда йөҙйәшәр ҡарағай- ҡарағастары менән йәш, һылыу ҡайындары аралаш үҫә. Уларға ҡарап, һунарсы йәнә фәлсәфәүи уйҙарға бирелде. Нимә ул урман? Һәм үҙе үк яуап бирергә тырышты. Нимә булһын, ағаслыҡ. Күптәр шулай тип әйтер. Ә төптәнерәк фекер йөрөткәндә, урман ул - бөтәһе лә. Иҫәпһеҙ-һанһыҙ ағастар, унан да күберәк ҡыуаҡлыҡтар, үлән. Шул үләне, ҡыуағы менән туҡланып көн иткән кейектәре, ҡоштары. Мыжғып торған файҙалы ла, файҙаһыҙ ҙа, ҡайсаҡ хатта зыянлы ла һәр төрлө бөжәктәре. Шыуышып та, ырғандап та, һыуҙарында йөҙөп тә йөрөгән йән эйәләре, һанай китһәң, осона сығырмын, тимә. Бына нимә ул урман. Урман беҙҙе, үҙен һаҡлай белмәгән кешеләрҙе, туйындыра, кейендерә, йылыта. Урман гөрләп торған тормош сығанағы. Тик ул үҙенсә гөрләргә тейеш. Әҙәм затына унда урын булмаһын ине. Әҙәм ҡыҫылған ерҙә йәшәйеш көйһөҙләнә лә ҡуя. Ул башта үҙе йәшәгән ауыл-ҡалаларҙағы тормошто көйләһен. Ҡырағай урман - иркә ҡатын-ҡыҙ, наҙлап һөйгәнде ярата. Тупаҫыраҡ ҡағылдыңмы...

Ғәҙәттә, хуш күңелле урман мәле менән уҫал, хатта бик уҫал да була. Бигерәк тә өс аҙымдан ары күренмәҫлек томан солғап алғанда. Бар, тоҫмаллап ҡара ҡайҙа китеп барғаныңды. Зәйҙең дә ундай хәлдәргә тарығаны бар. Хатта бер тапҡыр ғына ла түгел. Ирәндек томанында ҡалырға ҡушмаһын. Барыр юлыңды яҡшы беләһең икән, урман - дуҫ, аҙашҡанда дәғүәсе, ваҡыты менән дошман да. Ҡыштың ыжғыр бурандарында урманда ышыҡ, йылы, йәйге селләлә күләгә һәм еләҫ. Ниңә һуң бөтә тереклек тә асыҡ урында йәшәмәй? Сөнки урманһыҙ тереклек юҡ. Ҡоро ер өҫтөндәге тормош урмандан башланған булырға тейеш.

Зәйгә урман кейектәре йәл. Зауыҡһыҙ ҡыҫҡа ғына ғүмерҙәре эсендә ниндәй рәхәтлек күрә улар? Бер ниндәй! Йәй осоро ярай инде, ә бына сатнама ҡыш көндәре. Унан ҡалһа, һәр төрлө дошмандары һағалап тора. Айырата кеше тигәне ыҙалата. Әйтерһең дә, туймаған тамағы. Асыҡҡандан ҡаныҡҡан яман, тип ҡалай хаҡ әйтелгән. Урманды үҙ итмәгән унан ҡото осоп ҡурҡа, ә яратҡандың унда барып инеү менән йәшәгеләре килеп китә. Бына ниндәй мөғжизә ул. Урманды талайбыҙ, ҡырабыҙ, үртәйбеҙ, ә алмашҡа ни бирәбеҙ? Тереләй һуябыҙ, үлтерәбеҙ, һәләк итәбеҙ. Урман беҙҙең өсөн ихтыяждар сығанағы. Бары шул ғына. Урманһыҙ ҡалһаҡ, ҡалай итербеҙ? Уйлауы ҡурҡыныс. Шулай ҙа уйланырға ине был хаҡта. Юҡ шул, беҙ унан яңынан-яңы хәйер талап итәбеҙ. Ә хәйерҙе һорап, бигерәк тә талап итеп алмайҙар...

Бара торғас, Зәйнулла башағыһы килгәнен тойҙо. Ашау уның өсөн, ғәҙәттә, аслығын ҡәнәғәтләндереү түгел, ә артабан йәшәү һәм эшләү хаҡына көс туплау ғәмәле. Ашауҙан ул ялҡып бөткән. Ашамайса ғына йәшәп булғанда ҡуш ҡуллап риза булыр ине. Шулай ҙа ашарға кәрәк. Ашаныу күп ваҡытты ала. Бигерәк тә күп ашау. Шунлыҡтан, һунарҙа Зәй бер ваҡытта ла ултырып ашамай: китеп бара - ашанып бара. Уның уйынса, оҙон-оҙаҡ йәйрәп ултырыу ҡиммәткә төшә. Ғүмер былай ҙа ҡыҫҡа. Хатта үтә ҡыҫҡа. Ә уның күп нәмә эшләп өлгөргөһө килә. Мәҫәлән, ир етеп килгән улына өй күтәрәһе, рәтле генә машиналыҡ аҡса эшләйһе, малын ишәйтәһе. Бәлки, китап та яҙыр әле. Унынына ла өмөтө юҡ түгел: һәләте барын тоя. Әйткәндәй, китап яҙыу шәп эштер ул. Үҙең бер килеп фани донъя менән бәхилләшһәң дә, яҙғандарың иҫтәлек булып, киләсәк быуындарға васыятың тороп ҡала. Ни сәбәптәндер телең менән әйтеп өлгөрмәгәндәрең аҡ ҡағыҙҙа һаҡлана. Шәп бит! Ләкин Зәйҙең әлегә район гәзитендә баҫылған бер-ике мәҡәләһенән башҡа күҙгә салыныр әҫәре юҡ. Булыр. Бына хаҡлы ялға сығып алһын әле. Унынына, күп түгел, ни бары ун биш йыл ваҡыт ҡалды...

Зәйнулла ҡапҡан туң ит киҫәген сәйнәй-сәйнәй алға шыуҙы. Байтаҡтай бирле яҡын-тирәне байҡауҙан ары китмәй ине, бөгөн төпкөлгәрәк бармай булмаҫ. Уға бәхет шунда ғына йылмайыр. Күңеленең бер мөйөшөндә ниҙер ҡабатлап тора һымаҡ: ярты юлда туҡталып ҡалма, нығыш бул, сымыры бул, бәхетеңә яҡынлашаһың. Туҡталып ҡалма... Уңышлы һунар алдынан һәр саҡ әлеге тойғоно кисерә ул. Һәм ошо билдәһеҙ тауышҡа ихлас ышана. Ышанмаған хәлдә сығып та йөрөмәҫ ине.

Ул бөгөн, китеп барышлай, үҙенә күрә бер асыш та яһаны әле. Саҡрым төшөнсәһе ҡайҙан килеп сыҡҡан? Баҡһаң, яуап өҫтә генә ята икән. Саҡрым, тимәк, ҡысҡырым. Бер километр самаһы арауыҡтан һөрән һалғанды ишетергә буламы? Була. Шуға күрә, ыҙначит, ошо ара саҡырым тип атала. Ҡысҡырып саҡырыу. Ошоноң кеүек асылмаған асыштар әле тулып ята, күрә белеү һәм башыңды эшләтеү генә кәрәк. Бына тағы, мәҫәлән, ни өсөн бәғзе әҙәмдәрҙең тән һаҡсыһы була? Яуап япябай: сөнки улар кемдәндер ҡурҡа. Әйтәйек, дошмандарынан. Йә фашланыуҙан шөрләй йәиһә сереп ятҡан байлығын ҡыҙғана. Хатта үҙ-үҙенән. Ә ни өсөн уларҙың йән һаҡсылары юҡ? Икенсеһе булғанда тәүгеһенең кәрәге лә ҡалмаҫ ине, буғай. Йән тигәнең үҙе рух, выждан, намыҫ һағында тора. Йәне ҡурсаулы кешенең енәйәткә барырға тәне тартмай, тимәк, дошмандары ла, дәғүәселәре лә булмай. Дошманың булмағанда тән һаҡсыһы нимәгә? Ошоларҙан сығып, шуны әйтергә була: выжданын юғалтҡан намыҫһыҙҙың йәне булмай. Йәшәп ята, ә йәне юҡ. Эсендә йәне бар кеше үлтерә йәиһә көсләй, талай, алдаша аламы? Енәйәтсе - йәнһеҙ кеше. Тағы: хәтерең ҡалыуын теләмәһәң, кәрәкмәгән һорауҙар бирмә. Күпме кеше шул арҡала көлкөгә ҡала, үҙендә бер ҡатлыраҡ тәьҫир ҡалдыра. Икенсе яҡтан, ҡыҙыҡһыныусан кеше ҡайсаҡ генийға әйләнә. Тик улары ифрат һирәк. Дөрөҫ тә, һәр төпсөр гений була башлаһа...

Зәйҙең бер нәмәгә нығ эсе боша. Ниндәй көндәр килде, ә? Эскән... балаларҙы дауалау өсөн махсус үҙәктәр асыла башланы! Я Рабби! Аҡылға һыямы ошо? Ҡайҙа барабыҙ? Ә ул балаларыбыҙҙы эсергә кем өйрәтә? Үҙебеҙ. Яман өлгөбөҙ менән... Уйҙары, ана, тағы ҡайҙарға төшөп китте. Шулай ҙа Зәй ҡәнәғәт. Әйтерһең дә, оло аҡыл эйәләре кеүек әллә ниндәй иҫ китмәле яңы фекерҙәр асҡан.

* * *

Ҡар ҡатламы аҫтында ҡыҫылып ятҡан Зәйҙең башында күптән түгел генә булып уҙған ваҡиғалар сылбыры ҡабат ялғанды. Уға тиҙерәк ошо тотҡондан ҡотолоу кәрәк, ә уның ҡыбырлағыһы ла килмәй. Был нимә? Әллә яҙмышҡа буйһоноумы? Юҡ, булыуы мөмкин түгел! Уны көтәләр. Хатта эҙләйҙәрҙер ҙә. Күктәге ҡөҙрәте менән ошо тотҡонлоҡтан арына алһа... Сәсрәп китһен һеләүһене лә, бүреһе лә. Уларҙы шунда уҡ иреккә ебәрәсәк, һис шикһеҙ. Ә намыҫ? Ир намыҫы? Көйҙөргөс сәм? Йомабай алдында әйткән һүҙе? Хәйер, уныһы бары һүҙ күрәштереп еңмешләнеү генә. Мәғәнәһеҙ еңмешләнеү булмағанда былайтып ятмаҫ та ине. И, әҙәми зат, шул еңмеш холҡоң, урынһыҙ сәмең арҡаһында ниҙәр генә күрмәйһең...

Артабан нисегерәк булды һуң әле? Ә-ә, ҡамыш йырып барған Зәйнулланы йүнләп ҡалынайырға өлгөрмәгән боҙҙоң сытырлап китеүе кинәт туҡталып ҡалырға мәжбүр итте. Төпһөҙкүлдең артабан ебәргеһе килмәй. Боҙ йоҡа, күл тәрән. Ун биш-егерме аҙымдарҙа әле туңмаған йылыу ялтырап күренә. Бына ғәжәп, инде ноябрь ахыры яҡынлаша, ә күл уртаһы һаман асыҡ көйө. Ул ғынамы, шул талғын елгә шөҙөрләнеп ятҡан һыу өҫтөндә бер ни булмағандай ике һуна йөҙә. Быныһы инде бигерәк. Үтә лә ҡаты тәбиғәтле беҙҙең яҡ өсөн күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән хәл. Әллә көнөн-төнөн ҡаҡылдаған "парник эффектының" башымы?

**(Дауамы бар).**

✓ *Кеше-бәндә баймы, дәрәжәлеме, фәҡирме, зәғифме - уларҙың барыһы ла тигеҙ хоҡуҡлы бер маҡсат менән ебәрелгән ергә. Ниндәй генә булһаң да, бурыс шул - кешелек сифаттарын һаҡлап, киләһе быуынға тапшырыу.*



*БЕР ҺҮРӘТКӘ ҠАРАП...*



# ИЗГЕЛЕКТӘН ҠИММӘТ...

## башҡа хазина юҡ

**Фәнил Шәймөхәмәтовтың "Ғүмер ағасы" тигән картинаһы мине лә төрлө уйҙарға һалды әле. Дөрөҫөрәге, быға тиклем белгән, инангандарымдың хаҡлығына тағы бер ышандым.**

Аллаһы Тәғәлә кешенең күңеленә өс төрлө орлоҡ сәсә. Һин уларҙың ҡайһыһына өҫтөнлөк биреп, ҡайһыһын үҫтерәһең - был оло яуаплылыҡ кешенең үҙенән тора. Изгелектәр эшләп, изгелек орлоғона шытым бирһәң, ике донъя бәхет-сәғәҙәттәренә өлгәшәһең. Гонаһ орлоҡтары сәсһәң, әсе емештәрен ике донъяла ла йыйып бөтә алмаҫһың. Аллаһы Тәғәлә аманат итеп биргән ғүмереңде буш, файҙаһыҙ эш менән уҙғараһың икән, оло үкенес, хәсрәттәргә тарыйһың. Һүрәттәге өс балыҡ - ошо өс орлоҡ, ни сәсһәң дә үҙ иркеңдә. "Изгелек эшлә лә, һыуға һал - халыҡ белер, халыҡ белмәһә, балыҡ белер", тигәнгә лә ишара был.

Йыһан мәңгелек, кешенең бурысы - затлы нәҫел ҡалдырыу, физик тән булараҡ ҡына түгел, ә рухи яҡтан да кеше булып йәшәү. Фани донъя ваҡытлыса ғына, һәммәбеҙ ҙә əхирәткә - мәңгелеккә күсәсәкбеҙ. Был донъяла йәшәп тә Аллаһты танымай, диндә ҡабул итмәүселәр тураһында Мөхәммәт бәйғәмбәр (с.ғ.с) әйтә: "Аллаһы Тәғәләне танып, изгелек эшләп йәшәгән кеше менән Аллаһты танымайынса йәшәгән кеше - тере һәм үле кеүек".

Ерҙә беҙ ваҡытлыса ғына. Ерҙең ситендә генә ултырған бабайҙың, йәғни бәндәләрҙең ғүмере сикле. Һүрәттәге башҡа барса нәмә әһәмиәтен юғалтҡан, улар барыһы ла бурысҡа ҡулланылған ниғмәттәр. Хаҡлыҡтың да хаҡы булып үҫентеһе-ҡурпыһының үҫеүе-үрсеүе, ғәбәҙәт-изгелектән дә ҡимmәтерәк хазинаның юҡлығы. Ер шарынан бүленеп, һыҙылған- ултырған ере - иле. Илеңдең киләсәген, милләтеңдең лайыҡлы дауамын, ҡурпыларҙың үрсеүен һәр кем хәстәрләргә тейеш. Кеше-бәндә баймы, дәрәжәлеме, фәҡирме, зәғифме - уларҙың барыһы ла тигеҙ хоҡуҡлы бер маҡсат менән ебәрелгән ергә. Ниндәй генә булһаң да, бурыс шул - кешелек сифаттарын һаҡлап, киләһе быуынға тапшырыу. Донъяға килгәнсе Аллаһҡа биргән вәғәҙәбеҙҙе онотмай, Аллаһ тыйғандан тайпылып, ергә изгелек орлоҡтары сәсеү. Әхирәткә байлыҡ, мал-дәрәжәләрҙе алып китеү мөмкин түгел. Ерҙәге варистарыңа ҡалған байлығың талаш-бүлеш, дошманлыҡҡа сәбәпсе булыуы мөмкин.

Иман, ғәҙеллек, изгелек кенә күктәргә ашҡан нур булып, ике донъяңды ла яҡтыртыр. Үле булып тыуып, үле килеш Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһына китеүҙән ҡурсалау, иҫкәртеү, тип ҡабул иттем мин был ижадты.

**Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА,**
**Мәләүез ҡалаһы.**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

**Бөгөнгө көндә сәхнәгә сығып йырлар өсөн тауыш та, моң да артыҡ әһәмиәткә эйә түгел кеүек. Ләкин был тәү ҡарашҡа ғына шулай, сөнки көн дә тиерлек сәхнә күгендә ҡабынып торған йондоҙҙарҙың күбеһе, тәбиғәт тарафынан бик һирәктәргә генә бүләк ителгән һәләткә эйә булмау сәбәпле, ҡапыл янып, ҡапыл һүнә. Әлбиттә, техник мөмкинлектәрҙе ҡулланып, фонограммалар яҙҙырып, яҡшы продюсер тапҡанда ижад донъяһында оҙаҡ ҡына өйрәлөргә була. Тик күңеле тулы моң булған, ысын ижадты аһәңһеҙ көйҙән айыра белгән тамашасыны оҙаҡ алдап булмай. Шуға күрә халыҡ тарафынан тере тауыш яңғыраған концерттар, башҡорт халҡының көй-моңона оло иғтибар бирелгән тамашалар көтөп алына һәм ҙур аншлаг менән үтә. Башҡортостандың халыҡ артисы, башҡорт халыҡ һәм заманса эстрада йырҙарын оҫта башҡарыусы, халыҡ, төбәк-ара һәм республика кимәлендәге төрлө фестиваль һәм конкурстар лауреаты Ғәзим ИЛЬЯСОВ тамашаһын бер ваҡытта ла фонограмма менән алдамай, ә тик тере тауыш менән һөйөндөрөүсе йырсыларҙың береһе. Ижадсының бөгөнгө башҡорт сәнғәтен нисек баһалауын белеү маҡсатында үҙенә мөрәжәғәт иттек.**

# ЙЫРСЫ МЕНӘН ТАМАШАСЫНЫ...

## тик тере тауыш ҡына бәйләй

- Аллаға шөкөр, Башҡортостаныбыҙ таланттарға бай төбәк. Күңел түрендәге иң нескә хистәрҙе ҡуҙғатырлыҡ һәләткә эйә сағыу, һәләтле, халыҡсан йырсыларыбыҙ булыуы менән бәхетлебеҙ. Абруйлы сәнғәт әһелдәре менән бер рәттән, үҙҙәрен сәхнәлә һынап ҡараусы йәш ижадсыларҙың күп булыуы ла һөйөнөслө күренеш. Ләкин улар араһынан халҡыбыҙҙың моңон лайыҡлы башҡарыусыларҙы һайлап алыу, уларҙы күтәреү, төрлө яҡлап ярҙам итеү, үҙенсәлекле тауыштарын үҫтереү йәһәтенән эшмәкәрлеккә иғтибар юҡ кимәлендә. Әлбиттә, республикала төрлө йыр-моң бәйгеләре уҙғарыла, тик унда үҙҙәренең юғары һәләткә эйә булыуын күрһәткән таланттарҙың күбеһе өсөн ошо бәйгеләрҙең Гала-концертында сығыш яһау иң юғары баҫҡыс булып ҡала. Шуға күрә, йыр белгестәренә бәйгенән һуң да ошондай һәләтле йырсылар менән тығыҙ бәйләнештә булыу уларҙың оҫталығын тағы ла сағыуыраҡ итергә ҙур этәргес булыр ине. Тағы ла шуныһы - былдай бәйгеләргә йәштәрҙе йәлеп итеп, аҙаҡ ҡул һелтәп ҡуйыуыбыҙ уларҙың яҙмышы менән уйнауға тиң, сөнки бер тапҡыр тамашасы һөйөүен тойоп, көслө алҡыштарға күмелгән кешегә был мөхиттән айырылыу, үҙен башҡа өлкәлә табыу бик ауыр төшә. Ошо хаҡта онотоpға тейеш түгелбеҙ һәм йәштәрҙең күңел бөтөнлөгән боҙмаҫ өсөн бик һаҡ эш итергә бурыслыбыҙ.

Бөгөнгө башҡорт йыр сәнғәтендә һәләтле ижадсылар байтаҡ, ләкин улар араһында тере тауышҡа йырлаусылар һирәк. Йырҙың бар булмышын үҙенең күңеле аша үткәреп, уның монон йөрәге менән тойоп йырламаған йырсы тамашасыны менән тулы бәйләнеш булдырыуҙан мәхрүм. Сәнғәттә элек-электән "Йөрәктән - йөрәккә" тигән матур төшөнсә йәшәй, ә фонограмма ҡулланған йырсы ошо аралашыуҙы, аңлашыуҙы, фекер алышыуҙы юҡҡа сығара.

Хәҙерге концерттарҙа баян, гармун тауыштары һирәгәйә бара, сөнки уларҙы электрон синтезаторҙар алмаштыра. Ә шул уҡ ваҡытта халыҡ нәҡ ошондай, йәғни музыка ҡоралдары моңо менән үрелеп барған тамашаларға һыуһаған. Быны мин үҙемдең шәхси тәжрибәмдән алып әйтәм - ниндәй генә төбәккә барһаҡ та, ҡурай моңон, баян тауышын, гармун зыңын тамашасы йотлоғоп тыңлай. Ошо өлкәгә ҡағылышлы тағы бер мәсьәлә - халыҡсан баянсыларҙың аҙ булыуы, йәғни әлеге ваҡытта сығыш яһаусыларҙың күбеһе нотаға ныҡ "бәйләнгән". Республиканың һәр районында, ауыл-ҡалаһында бер ниндәй нотаһыҙ ҙа, йырҙы күңеле менән тойоп ҡына ла юғары кимәлдә уйнаусы баянсыларыбыҙ барлығына шикләнмәйем. Бәлки, ошондай халыҡ таланттары өсөн дә республика кимәлендә ниндәйҙер бәйге ойоштороп ебәреү һәйбәт булыр ине. Бындай бәйгенең файҙаһы ҙур буласаҡ. Бер яҡтан, үҙҙәренең төбәгендә генә билдәле баянсыларҙы бөтә Башҡортостанға танытырға була, икенсе яҡтан, йырсылар уларҙы үҙ концерттарына йәлеп итеп, тамашаларын тағы ла байытыу мөмкинлеге аласаҡ.



Ижад кешеһе һәр саҡ эҙләнеү, үҙ-үҙен үҫтереү юлында булырға тейеш - шәхсән үҙем ошоно һәр саҡ иҫтә тотам һәм был йәһәттән әүҙем эшләйем. Халыҡты бер төрлөлөк ялҡыта, шуға күрә тамашасы менән осрашыуға һәр ваҡыт яңы йырҙар - күстәнәстәр әҙерләйем. Шулай уҡ гастролдәргә үҙенсәлекле тауышлы, һәләтле йәш йырсыларҙы ла алып сығам. Был, беренсенән, йәш таланттар өсөн сәхнәлә сыныҡыу булһа, икенсенән, концертҡа килгән төрлө йәштәге тамашасының ихтыяжына тап килгән йыр тәҡдим итеү мөмкинлеге. Март дауамында республика ҡала-районлары буйлап уҙасаҡ концерт программаһында ла тамашасы минең ижадым менән бергә йәш йырсылар менән танышасаҡ, оҫта бейеүселәрҙе күрәсәк, баян тауышына моңланасаҡ.

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА**
**яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН

# КЕШЕНЕҢ ЭШЕНӘ... ҡыҫылма

■ Ҡурҡыныс төштәрҙе кеше бала саҡта, бигерәк тә 6-10 йәш тирәһендә йышыраҡ күреүен ғалимдар раҫлаған инде. Өлкәнәйә бара былдай төштәр һирәгәйә, әммә кешеләрҙең 80 проценты уларҙы онотмағанлыҡтан, ул хәтерҙә ныҡ уйылып ҡала. Белгестәр билдәләүенсә, төнөн ҡурҡыныс төш күргән кешенең көндөҙ кәйефе булмай, хәүеф тойғоһо уның күңеленә тыныслыҡ бирмәй, хатта уның нигеҙендә невроз башланып китеүе лә бар. Насар төштәрҙең сюжеты ла башлыса бер үк. Ғалимдар әйтеүенсә, былдай төштәр төндөң икенсе яртыһында инә.

■ Менопаузанан һуң аҡ тәнле ҡатын-ҡыҙҙар ҡуңыр тиреләләргә ҡарағанда тиҙерәк ҡартая башлай, тип белдерә Америка ғалимдары. Уларҙың ныҙҙары күберәк була, ә был иһә тышҡы ҡиәфәткә ҙур йоғонто яһай. Ғалимдар бер нисә тикшеренеү үткәргәндән һуң был теория раҫланған - ҡуңыр тире ҡартайыуға бирешеп бармай. Шуға ла аҡ тәнле ҡатын-ҡыҙҙар тиреһен ҡояштың зарарлы нурҙарынан һаҡларға тейеш, сөнки был ҡартайыуҙың төп сәбәбе булып тора. Ҡуңыр тиреле иһә меланин күп, ул ҡояштан һаҡлаусы тәбиғи сара булып тора, шуға ла былдай төр тире оҙаҡ йылдар йәш булып ҡала.

■ Ньюкасл университеты (Австралия) табиптары бер тәүлек эсендә кеше күпме шәкәр ашарға тейешлеген асыҡлаған. 1990 йылда Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы шәкәрҙең нормаһын түбәндәгесә билдәләгәйне: ир-егеттәр өсөн - 70, ҡатын-ҡыҙҙар өсөн 50 грамм. Белгестәр иҫәпләүенсә, был күләм бик ҙур. Көнөнә 5 балғалаҡ, йәиһә 30 грамм шәкәр етә, ти улар. Шәкәр ҡулланыуҙы кәметеү йөрәк сәләмәтлеген яҡшыртып ҡына ҡалмай, диабеттан, теш ауырыуҙарынан һаҡлай. Норманы иҫәпләгәндә уның төрлө ризыҡтар составында булған күләмен дә иҫәпкә алырға кәрәк.

■ Рухи сәләмәтлек нигеҙендә ябай ғына ҡағиҙәләр ята, тип белдерә белгестәр. Уның беренсеһе булып кеше эшенә ҡыҫылмау тора. Донъяла бер төрлө фекер йөрөткән, бер төрлө булған кешеләр юҡ - Аллаһы Тәғәлә беҙҙе төрлө итеп яратҡан. Шуға ла үҙ дәрәсәләгендә кешегә көсләп тағырға кәрәкмәй. Ғәфү итә һәм онота белеү - күңел тыныслығына өлгәшеү өсөн эффектлы сара. Тормош шул тиклем ҡыҫҡа, ҡасандыр кемдер һеҙҙе рәнйеткән өсөн йөрәктә таш йөрөтөү уны мәғәнәһеҙерәк итәсәк. Өсөнсө кәңәш - йәмғиәттә абруй яуларға ынтылмағыҙ. Донъяла ероистар шул тиклем күп, шәхси мәнфәғәтен алға ҡуйыусы бер ҡасан да башҡаларҙы баһаламаясаҡ. Етмәһә, бөтөн яҡтан камил кешеләр булмай, шулай булғас, ни өсөн һеҙ үҙегеҙ кеүек үк кешенең маҡтауына лайыҡһығыҙ? Көнләшеү, башҡаларҙы үҙгәртергә тырышыу ҙа рухи тыныслыҡҡа әйә булырға ҡамаусалаясаҡ.

■ Немец ғалимдары дәлилләүенсә, муйын ауыртыуы - психологик проблема. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, муйындағы ауыртыуҙар хәүеф тойғоһо һәм депрессия менән туранан-тура бәйле. Шуға ла ғалимдар табиптарға сирлегә диагноз ҡуйғанда иғтибарлыраҡ булырға кәңәш итә. Тикшеренеүҙәрҙә үҙ ғүмерендә бер тапҡыр булһа ла муйын ауыртыуына зарланған 448 ауырыу ҡатнаша һәм табиптар уларҙың 20 процентының депрессия, 28 процентының хәүеф тойғоһо менән бәйле булыуын билдәләй.

ДИНЕБЕҘҘӘ - КӨНӨБӨҘ

# АЛЛАҺТЫҢ БАРЛЫҒЫН ТАНЫУ ҒЫНА...

## иманлылыҡ тигәнде аңлатмай әле

**Башҡорт һаналып та, үҙенең туған телен белмәгәндәрҙе күреп, минең дә йөрәгем әрней. Шулай уҡ үҙен мосолман тип һанап та, динебеҙҙең һәр мосолман белергә һәм мотлаҡ үтәргә тейешле булған иң ябай ғына ҡағиҙәләрен белмәгән һәм белергә теләмәгән кешеләр өсөн дә йөрәгем яна. Телебеҙҙе онотоуыбыҙ ҡасандыр бер заман башҡорттоң Ер йөҙөнән бөтөнләйгә юҡҡа сығыу хәүефе менән янаһа (Аллаһ һаҡлаһын!), динде белмәгәндәргә һәм белергә теләмәгәндәребеҙгә әхирәттә, мәңгелек утта яныу ҡурҡынысы бар. Ә быныһы - тағы ла ҡурҡынысыраҡ.**



Бер көн, мәсеткә барышлай, урамда элекке танышымды осраттым.

- Ҡайҙа юл тоттоң? - тине ул хәл-әхүәл һорашып алғас.

- Мәсеткә.

- Унда ни йомошоң төштө?

- Йомош, тип ни, намаҙға китеп барам. Бөгөн йома бит...

- Һин нимә, мулла булып алдыңмы әллә?

- Намаҙ уҡымаған өсөн Аллаһы Тәғәлә әхирәттә муллаларға ғына түгел, ә барыбыҙға ла оло ғазап вәғәҙә итә бит. Әйҙә, һин дә бар...

- Әй, мәсет ҡайғыһы юҡ әле бында. Машинаның майын алыштырыһы бар...

- Ә минең был донъяла мәңге йәшәргә иҫәп юҡ, дуҫ кеше. Ана, аҙан да әйтә башланылар...

Ашыҡ-бошоҡ хушлашып, һәр кемебеҙ үҙ юлы менән киттек. Танышым шул саҡта ни уйлағандыр, әммә мин ошо осрашыуҙы ғәҙәти күрешеү һымаҡ ҡына ҡабул итмәнем. Уйланырға, хатта бик тәрән уйланырға сәбәп бар ине шул.

Халҡыбыҙ шундай алсаҡ, яғымлы, мөләйем, эскерһеҙ, эшлекле, кешелекле, баҫалҡы, әҙәпле һәм ябай. Әммә улар араһында дин ғилемен бөтөнләйгә тиерлек белмәүселәр күпселек булыуын күреп бошонам. Борсолоусылар тик мин генә түгеллеген дә беләм. Милләттәштәребеҙгә был өлкәлә белем биреүҙе маҡсат итеп ҡуйған бәгзе имамдарҙың, йәиһә башҡа кешеләрҙең гәзиттәрҙә баҫылып торған мәҡәләләрен иғтибар менән уҡып барырға тырышам.

Аллаһ бар һәм ул бер икәненә хәҙер күптәр ышана. Әммә... "Мин Аллаһ барлығына ышанам, шул - еткән", тип, динебеҙ хаҡында бер ни белмәйенсә, хатта белергә лә теләмәйенсә йәшәй күптәр, һәм хаталаналар. Аллаһы Тәғәләнең барлығына ышаныуҙа ғына булһа икән эш...

Беләйек һәм бер ҡасан да онотмайыҡ: башҡа һәммә йән эйәләренән айырмалы, Аллаһы Тәғәлә әҙәм балаһына аҡыл биргән, төрлө һаһыҙ нигмәттәрҙән тыш, кешене фекер йөрөтөү тип аталған иң ҡиммәтле үҙенсәлек менән бүләкләгән. Әммә бүләкләп кенә ҡуймаған, кешеләргә һис һүҙһеҙ үтәлергә тейешле бурыстар ҙа йөкмәткән. Шулай уҡ фәҡәт әҙәм балалары өсөн әхирәт (хаҡыҡса әйткәндә, теге донъя) тормошон да яралтҡан Раббыбыҙ. Әхирәткә барғас, үҙенә йөкмәтелгән бурыстарының үтәлгәнлеге-үтәлмәгәнлеге хаҡында һәр кешенән һораласағын да әйткән. Әхирәт, йәннәт, йәһәннәм кеүек күҙгә күренмәгән донъяны, әлбиттә, беҙ, кешеләр, нисек кенә тырышһаҡ та тулыһынса күҙ алдына килтерә алмайбыҙ һәм алмаясаҡбыҙ. Бөйөк Аллаһты күҙ менән күрмәгән көйә, Уға ышанған кеүек, Раббыбыҙҙың кеше аңы менән үлсәнмәй торған башҡа үлсәмдәрҙә яралтҡан нәмәләренә, улар хаҡында бәйән ителгән Ҡөрьәнгә һәм Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һүҙҙәренә (сәхих хәҙистәр) фәҡәт ышанырға ғына тейешбеҙ. Иң тәүҙә, һис шикһеҙ ышанырға, ә унан - ҡушылғанды һис һүҙһеҙ үтәргә бурыслыбыҙ.

Раббыбыҙ әҙәм балаларына иң беренсе нәүбәттә бына нимәгә ышанырға ҡушҡан: 1. Аллаһы Тәғәләнең барлығына һәм уның берҙән-берлегенә, унан башҡа һис бер илаһ юҡлығына мотлаҡ рәүештә ышаныу (лә иләһә иллаллаһ). 2. Уның фәрештәләре барлығына ышаныу. 3. Китаптарына ышаныу. 4. Бәйғәмбәрҙәренә ышаныу. 5. Әхирәт барлығына ышаныу. 6. Тәҡдиргә һәм уның яҡшыһы ла, яманы ла Аллаһтан икәненә һәм, үлгәс, ҡасандыр барыбыҙ ҙа Аллаһы Тәғәлә тарафынан ҡабаттан тереләсәгебеҙгә ышаныу ("Сәхих әл-Мөслим", 8-се бүлек). Аллаһ бойороғо буйынса, Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ошоларҙың һәммәһен иман шарттары тип атаған. Иман ул - ышаныу тигән һүҙ (хәҙерге көндә күптәребеҙ "иманлы" тигән төшөнсәне "тәртипле", йәиһә, "әҙәпле" тиеп кенә аңлап, шуның менән генә сикләнәбеҙ. Былдай яҡшы сифаттар иманлы кешелә булырға тейеш. Әммә иман төшөнсәһе күпкә кинерәк). Был шарттарҙың береһенә генә ышанмаған, йәиһә икеләнгән кеше тулы иманлы тип һаналмай. Ә уларҙың барыһына күңеле менән ышанған кеше үҙен мосолман тип иғлан итә.

Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Ислам диненең мосолман тарафынан мотлаҡ рәүештә үтәлергә тейешле биш терәген һанап китә: иң тәүгеһе - иман килтереү, икенсеһе - намаҙ уҡыу, өсөнсөһө - Рамаҙан айында ураҙа тотоу, дүртенсеһе - бай кеше булһаң, зәкәт биреү, бишенсеһе - хәленән килһә, хаж ҡылыу. Бына шул биш терәктең иң түгә өсәүһенә айырыуса ҙур мәғәнә бирелә. Тәҡүәлеләр, йәғни үҙенә буйһоноп йәшәгәндәр өсөн Раббыбыҙ әхирәттә ожмах вәғәҙә итһә, үҙе ҡушҡандарын үтәмәгән көйөнсә (йәғни, иманһыҙ һәм бер ниндәй ҙә ғибәҙәтһеҙ) был донъянан киткәндәр өсөн Аллаһы Тәғәләнең язаһы бик ҡаты һәм аяуһыҙ. Ҡәбергә инеп, ергә күмелгәс тә, үҙенә иң тәү бирелгән өс һорауға (Раббың кем? Динең кем? Бәйғәмбәрең кем?) яуап бирә алмаған һәр кеше ҡиәмәт көнөнә ҡәҙәр ҡәбер ғазаптарына дусар ителә. Ә ҡиәмәт көнө (ахырызаман) килеп еткәс, һәр кеме Аллаһы ҡаршыһында иң беренсе нәүбәттә - намаҙы, унан һуң башҡа ғәмәлдәре хаҡында хисап бирә. Унан Аллаһ тарафынан ахырғы урындарыбыҙ билдәләнә. Ахырғы урын тик икәү генә: ожмах һәм тамуҡ. Өсөнсө вариант юҡ!

Бына ошоларҙың барыһын да беҙҙең боронғо ата-бабаларыбыҙ белгән һәм Аллаһы Тәғәләнең язаһынан ҡурҡып, Уны яратып, Уның бойороҡтарын үтәп ғүмер иткән. Ә Октябрь революцияһынан һуңғы осорҙа йәшәгән олатайҙарыбыҙға, атай-әсәйҙәребеҙгә һәм, әлбиттә, беҙҙең үҙебеҙгә лә был хакта бер ни ҙә өйрәтмәгәндәр. Динебеҙҙең дошмандары бик тиҙ арала халҡыбыҙҙы иман юлынан тайпылдырыуға өлгәшкән. Бына ошо ауыр осорҙарҙа һис ҡурҡыу белмәй, йөрәктәрендә имандарын һаҡлап алып ҡалған ҡайһы бер зыялыларыбыҙ булыуына шөкөр итәйек. Зәйнулла ишан, Ризаитдин Фәхретдин, Мифтахетдин Аҡмулла кеүек Ислам дине мәғрифәтселәре, беҙҙән быуат алдынан, сағыштырмаса күптән түгел ғүмер иткән Байым ишандар, Мөхәүир хәҙрәттәр һәм башҡа дин әһелдәребеҙ менән ғорурланабыҙ. Уларҙың Ислам дине тураһындағы нәсихәттәрен үтәп йәшәгән осраҡта ғына беҙ үҙебеҙҙе ана шул хөрмәтле кешеләребеҙҙең дәүамсыларҙы тип һанай алабыҙ. Мөхәүир хәҙрәтте мин әсәйем һөйләгәне буйынса хәтерләйем. Ул кешеләрҙең намаҙ уҡыу һәм ураҙа тотоуҙарына айырыуса иғтибар биргән һәм үҙе был ғибәҙәттәрен (хатта сөннәт намаҙҙарын да) һис бер ваҡытта ла ҡал-

✓ *Ниндәйҙер бер ауылда мәсет төҙөп ултыртһалар, "Ауылға иман ҡайтты!" тигәнерәк мәҡәләләр яҙырға ла яратабыҙ. Әммә иман ул ямғыр, йәиһә томан һымаҡ осоп ҡына килеп, бар ауылды бер юлы ҡаплай торған нәмә түгел.*



дырмаған. "Аллаһ барлығына эстән генә ышанып йөрөһәң, ана шул еткән...", йәиһә "Мин - мулла тоҡомонан. Олатайым заманында көслө мулла, хажи булған..." тип, шуның менән генә тынысланып, Аллаһ Тәғәләгә һис бер ғәмәл ҡылмай, хәҙерге ваҡытта беҙҙең дини яһиллыҡта (наҙанлыҡта), ғәфләттә (вайымһыҙлыҡта) ғүмер итеүебеҙҙе һис тә күрергә теләмәҫтәр ине улар, моғайын.

Революциянан һуң ғәрәп әлифбаһын тыйып, әлбиттә, башҡорт һәм татар халҡын изге Ҡөрьәнде, башҡа дини китаптарҙы уҡый алыу мөмкинлегенән мәхрүм иткәндәр, күп кенә дин әһелдәре золом ҡорбандары булған. Балаларға дин ғилеме биреү ҙә тыйылған. Шунлыҡтан, халҡыбыҙҙың дүрт-биш быуын вәкилдәре динебеҙ хаҡында бөтөнләйгә бер ни ҙә белмәйенсә үҫкән. Әммә хәҙер дини кешеләрҙе эҙәрлекләү заманы түгел. Әлхәмдулиллаһ, илебеҙҙә дин тотоу өсөн барлыҡ шарттар булдырылған. Өйрәнеү өсөн һәр ерҙә башҡортса, татарса, урыҫ телендә яҙылған дини әҙәбиәт етерлек кимәлдә. Хөкүмәтебеҙ ҙә быны хуплай. Һәр ауылда тиерлек мәсеттәр төҙөлә. Кешеләргә ғилем өйрәтерҙәй, белемле имамдарыбыҙ ҙа бар. Имамдар әҙерләү өсөн баш ҡалабыҙҙа мәҙрәсәләр, хатта Ислам университеты ла эшләп килә. Һәр имам беҙҙең һәр һорауыбыҙға яуап бирергә, теләгәндәргә дин гилемен өйрәтергә әҙер. Шуны аңларға тырышайыҡ, ҡәҙерле туғандар, әхирәт көнө, унда үтеләсәк сират күпере тик имамдар һәм муллалар өсөн генә түгел бит. Башҡаларыбыҙ өсөн ситләтеп үтә торған бүтән юл бар икән, тип уйламағыҙ!

Ниндәйҙер бер ауылда мәсет төҙөп ултыртһалар, "Ауылға иман ҡайтты!" тигәнерәк мәҡәләләр яҙырға ла яратабыҙ. Әммә иман ул ямғыр, йәиһә томан һымаҡ осоп ҡына килеп, бар ауылды бер юлы ҡаплай торған нәмә түгел. Һәр кешенең йөрәгенә иман тик айырым, шәхсән инеп урынлаша, йәиһә бөтөнләйгә ситләтеп үтә. Мәсеттәрҙең дә ауылдарҙа тик сабыйға исем ҡушыу, йәиһә йәштәргә никах уҡытыу өсөн генә төҙөлгән бина түгеллеген белеү кәрәк. Мәсет - ул ғәрәпсәнән сәждә ҡыла торған (киңерәк мәғәнәлә, ғибәҙәт ҡыла торған) урын. Тик имам өсөн генә түгел, ә бөтә ауыл кешеләре намаҙға йөрөр өсөн төҙөлә бит ул мәсет. Ә беҙ, мәсеткә барып намаҙ уҡыу тик муллалар, руханиҙар эше, тип кенә уйлайбыҙ. Хатта башҡа берәй ябай, айырыуса йәш кеше намаҙға баҫһа, уға сәйерһенеп ҡарайбыҙ. Намаҙ уҡыуҙы һис юғында спорт, балыҡсылыҡ, йәиһә һунарсылыҡ һымаҡ шөғөл кеүек кенә күреп, шулар менән бер рәткә ҡуябыҙ. Тап шундай уйҙа булып, дин талаптарын үтәмәй йәшәү был донъя өсөн бик тә ҡулайлы һымаҡ. Бик йәл, әммә күптәребеҙ изге Ҡөрьәндәге "... Мин ендәрҙе һәм кешеләрҙе фәҡәт Миңә ғибәҙәт ҡылһындар өсөн барлыҡҡа килтерҙем..." тигән Аллаһ һүҙҙәрен инҡар итеп, йәиһә уны белмәмешкә һалышып, бер генә тапҡыр бирелгән ғүмерҙәребеҙҙе ғәфләттә (вайымһыҙлыкта) үткәрәбеҙ. Донъялыҡта ниндәй генә яҡшы күңелле, эшсән, баҫалҡы, тәртипле кеше булыуыңа ҡарамаҫтан, намаҙың өсөн әхирәттә тик намаҙ менән генә яуап бирә алаһың. Бына ни өсөн, ҡәҙерле туғандар, "Аллаһҡа ышанам, ана шул еткән", тип кенә үҙ-үҙеңде алдаштырыу, шулай тип тынысланыу ярамай. Был донъяла етеш, бай, матур йәшәү бер кемгә лә тыйылмай. Әммә беребеҙ ҙә ҡотолоп китә алмаясаҡ әхирәтебеҙ хаҡында ла онотмаһаҡ ине, тип кенә әйтергә теләгәйнем милләттәштәр һәм диндәштәрҙә.

**Зәбих ҠЫУАНДЫҠОВ.**

ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ

# ДИНҺЕҘ МЕНӘН ДИНДАР БӘХӘСЕ



## Ҡөрьән ижад ителә алмай, сөнки ул тарих хәтерләмәгән үткәндәрҙе һөйләй

Мин дуҫыма былай тинем:

Ҡөрьәндең фәннилеге тураһындағы бөгөнгө аңғамәбеҙ һинең белемле аҡылыңа бынан алдағыларҙан үтемлерәк булыр, бәлки. 1300 йылдан артыҡ ваҡыт элек, Ҡөрьән индерелгән заманда, астрономия, атом төҙөлөшө тураһындағы фән, биология, анатомия кеүек фәндәр булмаған. Ә Ҡөрьән ул заманда уҡ кешеләргә күк, ер, йондоҙҙар, планеталар, ғаләм төҙөлөшө законлары, ерҙә йәшәйеш барлыҡҡа килеүе, кешенең бар булыуы, әсә ҡарынында бала яралыуы һәм тыуыуы тураһында һөйләгән. Быларҙың барыһы ла бөгөнгө көн фәненә тап килә.

Әлбиттә, Ҡөрьән был темаларға оҙаҡ туҡталмаған, ентекләп аңлатмаған, сөнки Ҡөрьән - ул дин, тормош программаһы һәм шәриғәт закондары китабы. Әгәр Ҡөрьән ул темаларҙы башта уҡ асыҡлаһа, мосолмандар билдәһеҙлеккә юлығыр һәм бөтә был мәғлүмәтте аңламаҫ ине. Шуға Ҡөрьән, киләсәктә үҙенең юрау-прогноздары аҡрынлап тормошҡа ашһын өсөн, ишаралар, күрһәтмәләр, сағыштырыуҙар менән сикләнгән. Ҡөрьән быуаттар дауамында асылып килә һәм Ҡөрьәндең Алла тарафынан ебәрелеүе быуындан-быуынға шул рәүешле күрһәтелә: "Беҙ уларға Беҙҙең билдәләрҙе офоҡтарҙа күрһәтербеҙ, улар уның хәҡикәт икәнлегенә ышаныр". Алла үҙ китабында, Ҡөрьәндең ғәжәйеп билдәләре көн һайын асыла барыр, тигән. Мәҫәлән, ерҙең шар формаһында булыуына ишаралап: "Ул көндө - төн менән, төндө көн менән урап ала",- тиелә. Бында шар формаһы "көн менән төн" шыуыуы, алмашыуы аша бирелгән. Донъя бар булғандан бирле, шарҙың ике яртыһындағы шикелле, көн менән төн бер уҡ ваҡытта башлана. Әгәр ер яҫы булһа, көн һәм төн бер-бер артлы килә алыр инеме ни? Ерҙә көн һәм төн бергә килә башлаһас, Ҡиәмәт көнө етәсәк.

Ҡөрьәндә күктәрҙең юлдары, майҙандары барлығы әйтелә: "Йондоҙ юлдары менән һыҙылып бөткән күк менән ант итәм", "Ҡайтарыу эйәһе булған күк менән ант итәм". Йәғни, күк ерҙән айырылған һәр нәмәне кире ҡайтара. Пар булып күтәрелгән һыу кире ямғыр булып яуа. Өҫкә нимә генә ырғытһаҡ та, ерҙең тартыу көсө уны кире ҡайтара. Ерҙән өҫкә ашҡан һәр нәмәне кире ҡайтарған кеүек, күк ергә тыштан килгән әйберҙәрҙе туҡтата, иретә, йота, ҡамасаулай, емерә, ваҡлай, тота һәм беҙҙе ҡотҡара, ерҙе тыштан килеүсе үлтергес ультрафиолет нурҙарҙан һаҡлай, метеориттарҙы туҡтата. Күк беҙҙең таҙартыусы фильтрыбыҙ һәм түбәбеҙ: "Беҙ күкте түбә итеп яраттыҡ".

Фән телендә был "бөтә донъя гравитация законы" тип атала. Ул заманда атомды иң бәләкәй, бүленмәҫ киҫәксә тип уйлағандар, ә Ҡөрьән атомдың тағы ла бәләкәйерәк киҫәксәләргә бүленеүе тураһында хәбәр итә. Былар барыһы ла ерҙең шар формаһында булыуын, күк тәбиғәтен, атом төҙөлөшөн ҡыйыу рәүештә асып һала. Былдай алдынғы фекерҙәр Ҡөрьән индерелгән заманда ни аҡыллы, ни йүләр башына килә алмаҫ ине.

Ҡөрьәндә иң зәғиф өй - үрмәксе өйө тип әйтелә. Алла "үрмәксе ауы" тимәй, ә "үрмәксе өйө" ти. Белеүебеҙсә, ау ябай ептән дүрт тапҡырға нығыраҡ. Бында зәғифлек ауҙа түгел, ә өйҙә. Был өй - унда ҡотолоу эҙләгән берәү өсөн иң ярамһыҙ урын, шулай уҡ унда ингән саҡырылмаған ҡунаҡ өсөн - тоҙаҡ. Был йорт хатта үрмәксе ғаиләһе ағзалары өсөн дә - үлем урыны. Үрмәксе аталанғандан һуң ата үрмәксене ашай, асыҡһа, балаларын да ашай, ас балалар бер-берен ашай. Шуға күрә, үрмәксе йорто - ҡасыу өсөн иң насар урын. Ярҙамды Алланан башҡа берәүҙән эҙләгәндәр ҙә шундай яҙмышҡа дусар буласаҡ.

"Мәрйәм" сүрәһендә Алла Мәрйәм тураһында һөйләй. Тулғаҡ тота башлағас, ул үҙенә үлем теләп, финик ағасы аҫтына барып ята. Шул саҡ саҡырыусы уға ағастың ботағын һелкетергә һәм өҙөлөп төшкән финик емешен ашарға ҡушып өндәшә.

Бында финиктарҙың ни ҡатнашы бар һуң? Уйлап ҡарайыҡ. Фәнни тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, финикта аналыҡтың ҡыҫылыуына килтерә торған матдә бар, был тыуҙырыуҙы еңеләйтә һәм ҡанды тиҙ туҡтата. Әлеге емештә тиренең тиҙерәк терелеүенә ярҙам итеүсе матдә лә бар икән. Медицинала билдәле булыуынса, үҫемлектәрҙән, үләндәрҙән яһалған дарыуҙар бала табыуҙы еңеләйтә, уның хәүефһеҙлеген күтәрә, эренле эсәкте таҙарта. Ысынлап та, тулғаҡ тотҡанда финик емештәрен ҡулланыуҙа ғәҙәттән тыш нимәләр бар. Фәнни практиканан был миҫалдар Алла Ҡөрьәндә күрһәткән дөрөҫлөккә теп-теүәл тап килә: "Уға ялған алдан да, арттан да яҡынлаймаҫ". "Әгәр ул Алланан булмаһа, унда бик күп ҡаршылыҡтар табылыр ине".

Беҙ күрәбеҙ: теориялар бер-берен инҡар итеп тыуа торалар, ғалимдар нисек кенә тырышмаһын, бер ҡарарға килә, һуңғы маҡсатҡа өлгәшә алмайҙар. Ҡөрьәндә иһә былдай ҡаршылыҡтар, етешһеҙлектәр юҡ. Шуға күрә лә ул - мөғжизә, ул тарих хәтерләмәгән үткәндәр тураһында һөйләй, киләсәкте юрай.

Ҡөрьәндең сәйәсәт, әҙәп, хәрби стратегия, тыныслыҡ, йәмғиәт, ғаилә, йәшәү тураһындағы фекерҙәрендә кешенең йәмғиәттә үҙ-үҙен тотошо һәм хоҡуҡтары билдәләнә, ныҡлы нигеҙгә һалына, былар барыһы ла тарихта тиңе булмаған иҫ киткес гүзәл телдә яҙылған.

Ҡөрьән һүҙҙәре үҙенең абсолют дөрөҫлөгө менән хаҡлы, ә бит иң бөйөк ғалим-тикшеренеүсе лә бары сағыштырмаса хәҡикәткә генә ирешә ала, һәр кеше хәҡикәтте үҙ күҙлегенән генә күрә, уның күҙаллауы сикләнгән һәм тоторокло түгел. Беҙҙең һәр ҡайһыбыҙ тормоштоң бер генә яғын өйрәнә ала, башҡа йүнәлештәренә көс тә, ваҡыт та етмәйәсәк. Һайлаған йүнәлештә өлгәшкәндәребеҙ сағыштырмаса буласаҡ. Алла ғына һәр яҡтан камил, теүәл белем эйәһе. Ул ғына абсолют дөрөҫлөккә, абсолют белемгә өлгәшә алырлыҡ Берҙән-бер һәм Ул һәр нәмәлә абсолют хәҡикәткә өлгәшкән. Шуға күрә лә беҙ, Ҡөрьән - Алла китабы, тибеҙ.

**"Динһеҙ менән бәхәс" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Миллиардер кеүек уйларға өйрән

Донъяла матди етешлек шартлы ғына. Мәҫәлән, ҡабаланған сағымда юлымда ятҡан егерме долларҙы алыр өсөн туҡтап та тормаҫ инем, моғайын. Әммә йәйге каникулда машинаһында туристарҙы йөрөтөп, аҡса эшләргә тырышҡан студент өсөн был ярайһы ҙур сумма. Социаль баҫҡыс буйлап юғары менгән һайын был шартлылыҡты яҡшы айыра башлайһың. 5 мең долларға аяҡ кейеме һатып алғанда мин үҙемде бай тоям, әммә Ричард Брэнсон өйөндә һәр ваҡыт тере сәскәләр булһын өсөн генә ай һайын ошо тиклем аҡса тотона икәнен дә беләм.

Яныраҡ Delta Airlines компанияһының самолетында осҡанда салонда "Уоллстрит" фильмын күрһәтәләр ине. Унда шундай сәхнә бар: Чарли Шиндың геройы бер картинаны күреп ҡала һәм уның хужаһы Гордон Гекко картинаны бик оҡшатып һатып алғандыр, тип фаразлай. Дэрил Ханндың геройыня картинаның 400 мең доллар тороуын әйтә. "Иҫ киткес! Был аҡсаға диңгеҙ буйында ҙур йорт һатып алып булыр ине", - тип аптырай Чарли Шин. "Бәлки, берәй төпкөл урындан", - тип яуаплай уға Дэрил. Күрәһегеҙме, бөтөн был һәм уларға оҡшаш ваҡиғалар һеҙҙең әлеге мәлдә тормошҡа нисек ҡарауығыҙҙы, байлыҡҡа нисек аңлауығыҙҙы күрһәтеп тора.

Күптән түгел дуҫым менән киноға барҙыҡ. Кинотеатрҙа бер шешә һыу 2,5 доллар тора (колаһың бәләкәй порцияһының хаҡы менән бер). Дуҫымдың фекеренсә, һыу һатып алыу өсөн кинотеатр күберәк аҡса түгә, әммә уны кола менән бер хаҡҡа һата. Кола эскеһе килһә лә, кинотеатрҙың һыу һатып алыуға сығымы ҙурыраҡ булған өсөн генә һыуға заказ бирел, дуҫым, үҙенсә, яһалма күтәрелгән хаҡтар өсөн кинотеатрҙан үс алды. Нисек уйлайһығыҙ, уның аңы байлыҡҡа көйләнгәнме, әллә ярлылыҡҡамы?

Бер дуҫымдың бәләкәй булһа ла үҙ бизнесы бар. Уның магазинына килеүсе һатып алыусылар иң тәүҙә буяуы ҡубып төшкән стенаны күрә. Ике йыл буйына мин уны стенаны яңынан буярға өндәнем, әммә был етешһеҙлек йорттоң тышҡы яғынан һыу ағып тороуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән, тип, бынан баш тартты. Унынса, ремонтты йортто арендаға биреүсе эшләргә тейеш ине. Ул, үҙ сиратында, киреһен дәлилләне. Өс йылдан һуң арендаға биреүсе йорттоң стенаһын буяны һәм уның өсөн сығымдар 150 долларға ла етмәй ине. Эйе, дуҫым ҡәнәғәт ҡалды, әммә уның һөйләшеүҙәр алып барыу өсөн күпме ваҡыт исраф итеүен, иң мөһиме, буяуы ҡупҡан стенаһы менән һатып алыусыларына ниндәй тәьҫир ҡалдырыуын уйлаһаң, ҡыуанырлыҡ бер нәмә лә юҡ.

Беҙ ҡараған был осраҡтар кешенең тормошҡа булған маҡсаттарын күрһәтә. Тап ошо маҡсаттар буйынса кемдер айына 5 мең долларҙы машинаға тотонор алдынан ҡабат-ҡабат уйланһа, кемдер был суммаға сәскәләр һатып алып, өйөн биҙәй. Ни өсөн кемдер йылына 25 мең доллар аҡса эшләй, ә кемдер ҡала ситендәге клубтың ағзаһы булып тороу өсөн генә лә йылына бынан ун тапҡырға күберәк аҡса тотонғанлығын аңланығыҙмы инде?

**Рэнди ГЕЙДЖ.**



## 16 МАРТА ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (12+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет". Продолжение (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Орлова и Александров". 1-я и 2-я серии. Биографический сериал (16+).
23.25 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
01.15 "Время покажет" (16+).
02.05 "Наедине со всеми" (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Модный приговор".
04.05 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Убить гауляйтера. Приказ для троих". Док фильм (12+).
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Я больше не боюсь". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Последний янычар". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Родина". Драматический сериал. 1-я серии (12+).
22.10 "Путь на Родину" (12+).
00.45 "Убить гауляйтера. Приказ для троих" (12+).
01.50 "Противостояние". Детективный сериал (16+).
03.10 "Горячая десятка" (12+).
04.15 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
22.00 "Кис ултырып". "Байыҡ". 2012 йыл (12+)

### БСТ

**Уважаемые читатели! Телеканал приносит извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00.**
**11.30 "Новости недели" (16+).**
**14.45 "Тәмле. Лучшее" (12+).**
**15.15 "Преград.net" (6+).**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "Байтус" (6+).**
**16.00 "Бауырһаҡ".**
**16.15 "Учу башкирский язык".**
**16.30, 18.30, 21.30, 22.30 Новости.**
**16.45 "КЛИО" (6+).**
**17.30 Новости (6+).**
**17.45 "Замандаштар" (6+).**
**18.00 "Хазина".**
**18.45 "Волшебный курай" (6+).**
**19.15 "Прощальные гастроли" (12+).**
**20.30 "Сәңгелдәк".**
**20.45 "Деловой Башкортостан".**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**22.00 "Следопыт" (6+).**
**23.00 "Телецентр" (12+).**
**23.30 "Специальный репортаж" (16+).**
**23.45 "Салауат йыйыны".**

## 17 МАРТА ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Орлова и Александров" (12+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет". Продолжение (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Орлова и Александров". 3-я и 4-я серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 Ночные новости.
00.20 "Структура момента" (16+).
01.25 "Наедине со всеми" (16+).
02.20 "Время покажет" (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Время покажет" (16+).
03.15 "Модный приговор".
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз" (12+).
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Я больше не боюсь". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Последний янычар". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Родина". Мелодраматический сериал. 2-3-я серии (12+).
22.55 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.35 "Эдвард Радзинский. Боги жаждут" (12+).
02.40 "Противостояние" (16+).
03.55 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
22.00 "Кис ултырып". Рәсимә Ғәйфуллина. Концерт (12+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы.**
**10.30 "Зеркальце".**
**10.45 "Царь горы" (6+).**
**11.00, 17.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Графиня де Монсоро" (12+).**
**12.45 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.30, 14.30, 22.30 Новости.**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Тәмле. Лучшее" (12+).**
**15.15 "Книга сказок".**
**15.30 "гора новостей".**
**15.45 "Борсаҡ".**
**16.00 "Йырлы кәрәҙ".**
**16.15 "Учу башкирский язык".**
**16.45 "Дорога к храму".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**18.00 "Үткән ғүмер" (6+).**
**18.30 Новости (на башк. яз.).**
**18.45 "Волшебный курай" (6+).**
**19.15 "Черчилль" (12+).**
**20.20 "Розыгрыш акции "Счастливый билет" аптечной сети "Фармленд".**
**20.30 "Сәңгелдәк".**
**20.45 "Новоселье с "Радугой" (12+).**
**21.00 "Телецентр".**
**22.00 Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Баик".**

## 18 МАРТА СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Орлова и Александров" (16+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" Продолжение (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Орлова и Александров". 5-я и 6-я серии (16+).
23.30 "Первый шаг в бездну" (12+).
00.30 "Политика" (16+).
01.35 "Наедине со всеми" (16+).
02.30, 03.05 "Время покажет" (16+).
03.00 Новости.
03.25 "Модный приговор".
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Алексей Леонов. Прыжок в космос".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Я больше не боюсь" (12+).
16.00 "Последний янычар". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Родина". 4-я и 5-я серии (16+).
22.50 "Специальный корреспондент" (16+).
00.30 "Эдвард Радзинский. Боги жаждут" (12+).
02.55 "Противостояние" (16+).
04.10 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
19.00 "Башҡорт йыры". Хит-парад (12+)
22.00 "Кис ултырып". Марсель Ҡотоев. Концерт (12+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы.**
**10.10 "Шатлыҡ йыры".**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00 "Замандаштар" (6+).**
**11.15, 17.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Графиня де Монсоро". Сериал (12+).**
**12.45 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**13.45, 23.00 "Башҡорт йыры-2014" (12+).**
**14.15 "Мелодии души".**
**14.45 "Тәмле" (12+).**
**15.15 "Капитономика".**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "Семәр".**
**16.00 "Городок АЮЯ".**
**16.15 "Учу башкирский язык".**
**16.45 "Здоровое решение" (12+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Алтын тирмә".**
**18.45 "Волшебный курай" (6+).**
**19.15 "Черчилль" (12+).**
**20.15 "От Сабантуя до ГТО" (6+).**
**20.30 "Сәңгелдәк".**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Телецентр".**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.30 "Автограф".**

## 19 МАРТА ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.05 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Орлова и Александров". Сериал (16+).
14.25, 15.15, 01.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.05, 04.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 02.05 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Орлова и Александров". 7-я и 8-я серии (12+).
23.30 "Вечерний Ургант".
00.05 Ночные новости.
00.20 "На ночь глядя" (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.05, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30, 17.10 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Я больше не боюсь". Мелодраматический сериал (16+).
16.00 "Последний янычар". Сериал (12+).
17.00, 17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Родина". 6-я серия (12+).
21.55 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
23.35 "Ангара". В космос по-русски".
00.30 "Анатомия любви. Эва, Пола и Беата" (12+).
01.35 "Противостояние". Сериал (16+).
03.00 "Диагноз: гений" (12+).
03.55 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
22.00 "Кис ултырып"."Ҡурай дуҫтарын йыя". Концерт (12+) сеть, конц.Turkvision

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы.**
**10.30 "Дети-герои".**
**10.45 "Цирк в 13 метров".**
**11.00, 17.45 "Замандаш" (6+).**
**11.15, 17.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Графиня де Монсоро". Сериал (12+).**
**12.45, 20.15 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.45 "Башҡорт йыры-2014".**
**14.15 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Тәмле". Лучшее" (12+).**
**15.15 "Ғәләмәт донья".**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "Шәп арба".**
**16.00 "Йырлы кәрәҙ".**
**16.15 "Учу башкирский язык".**
**16.45 "Живое село".**
**17.30 Новости культуры.**
**18.00 "Көндәлек" (6+).**
**18.45 "Волшебный курай" (6+).**
**19.15 "Черчилль". Сериал (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Лото 6 из 40+Джокер". Прямой эфир.**
**21.15 "Наука 102" (6+).**
**22.00 "Аль-Фатиха".**
**23.00 "Телецентр" (12+).**
**23.30 "Автограф" (6+).**

## 20 МАРТА ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00, 15.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Орлова и Александров". Сериал (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
16.05 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес" (16+).
19.15 "Давай поженимся" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос. Дети". Музыкальный конкурс.
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.35 "Загадка Рихтера". К 100-летию Святослава Рихтера (12+).
01.35 "Лев". Приключения (12+).
03.40 "Амелия". Худ. фильм (12+).

### РОССИЯ 1

05.00 "Утро России".
06.10, 06.35, 07.10, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
08.55 "Мусульмане".
09.10 "От всей души" (12+).
10.05 "О самом главном".
11.00, 14.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (12).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Я больше не боюсь". Мелодраматический сериал (16+).
16.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир".
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Главная сцена". Музыкальный конкурс (16+).
23.25 "Спасибо за любовь". Мелодрама (16+).
01.30 "Противостояние". Сериал (16+).
02.50 "Советский архимандрит".
03.45 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Моңло аҙан". Дини йырҙар (0+)
20.00 "Ҡотлауҙар" (6+)
22.00 "Кис ултырып". Азалия һәм Урал Рәшитов (12+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы.**
**10.30 "Городок АЮЯ".**
**10.45 "Ғәләмәт донья".**
**11.00, 17.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15 "Орнамент".**
**11.30, 21.30 Новости (на русск. яз).**
**11.45 "Графиня де Монсоро". Сериал (12+).**
**12.45, 20.15 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.45 "Юлдаш йыры" представляет…**
**14.15 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Тәмле". Лучшее" (12+).**
**15.15 "Зеркальце".**
**15.30 "Каникулы Нестрогого режима".**
**15.45 "Байтус" (6+).**
**16.00 "Сулпылар".**
**16.15 "Учу башкирский язык".**
**16.30 Новости экономики.**
**16.45 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**17.00 "История признания" (12+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (12+).**
**17.30 Новости культуры.**
**18.00 "Йома".**
**18.45 "Волшебный курай" (6+).**
**19.15 "Черчилль". Сериал (12+).**
**20.30 "Сәңгелдәк".**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Телецентр".**
**22.00 Уфимское "Времечко".**
**23.00 "КЭМПО" (12+).**
**23.30 "Попкорм" (16+).**

## 21 МАРТА СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Путь в "Сатурн". Худ. фильм.
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Любовь Орлова. Шипы и розы" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "Веселые ребята". Худ. фильм.
15.000 "Голос. Дети".
17.05 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Угадай мелодию" (12+).
19.40 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
21.00 "Время".
21.20 "Танцуй!"
23.40 "Калейдоскоп любви". Мелодрама (16+).
01.40 "Скудда-у! Скудда-эй!" (16+).
03.25 "Модный приговор".
04.20 "Мужское/Женское" (16+).
05.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

04.55 "Ход конем". Худ. фильм.
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.10 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Военная программа" Александра Сладкова.
08.50 "Субботник".
09.30 "Утро с Максимом Галкиным".
10.05 "Качество жизни".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Моя любовь". Мелодрама (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.40 "Субботний вечер" (12+).
16.45 "Танцы со звездами". Сезон-2015.
20.00 "Вести в субботу".
20.45 "Ненавижу и люблю". Мелодраматический сериал. 4 серии (12+).
00.35 "Букет". Мелодрама (12+).
02.35 "Счастье мое". Худ. фильм (16+).
04.35 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
18.00 "Еңмеш". Фильм (6+)
19.00 "Башҡорт йыры". Хит-парад (12+)
22.00 "Нурияның нурлы донъяһы". Нурия Абдуллина. Концерт (12+) сеть, конц

### БСТ

**07.00, 12.30,22.30 Новости.**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Юлдашым… Ләйсәнем" (6+).**
**09.00 "Сәләм+" (12+).**
**09.15 Мультфильм.**
**09.45 "Здоровое решение" (12+).**
**10.15 "КЛИО" (6+).**
**11.00 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "Аль-Фатиха" (6+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**12.45 "Үткән ғүмер. 1970-е годы" (6+).**
**13.15 "Замандаштар" (6+).**
**13.45 "Весело живем" (12+).**
**14.00 "Дарю песню".**
**16.00 "Серебряный сезон. Ретроспектива лучших матчей ХК "Салават Юлаев" 2013-2014 гг."**
**17.45 "Хазина" (6+).**
**18.15 "Башҡорттар".**
**18.45 Художественный фильм (12+).**
**20.30 "Сәңгелдәк".**
**20.45 "10 лет творцам чудес" (6+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Живое село".**
**23.00 "Башҡорт йыры-2014".**
**23.30 "Дарман".**

## 22 МАРТА ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Конец "Сатурна". Худ. фильм.
08.10 "Армейский магазин" (16+).
08.45 "Смешарики. ПИН-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки с Дм. Крыловым" (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Теория заговора". "Банкиры" (16+).
13.10 "Вся моя жизнь - сплошная ошибка". К 100-летию Георгия Жженова (12+).
14.10 Коллекция "Первого канала".
17.50 Вечерние новости (с субтитрами).
18.00 "Точь-в-точь" (16+).
21.00 "Воскресное Время".
22.30 "Три аккорда".
00.25 "Король бильярда". Спортивная драма (16+).
03.00 "Модный приговор" (16+).
04.00 "Мужское/Женское" (16+).

### РОССИЯ 1

05.20 "Тайна "Черных дроздов". Худ. фильм (12+).
07.20 "Вся Россия".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама Евгения Петросяна".
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному".
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Не жизнь, а праздник" (12+).
12.10 "Смеяться разрешается".
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Смеяться разрешается". Продолжение.
15.00 "Один в один". Музыкальный конкурс.
18.00 "Осколки хрустальной туфельки". Мелодрама (12+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
00.35 "Если бы я тебя любил...". Мелодрама (12+).
02.45 "Человек без маски. Георг Отс" (12+).
03.40 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
20.00 "Ҡотлауҙар" (6+)
22.00 "Кис ултырып". Римма Амангилдина. Концерт (12+)

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Йома".**
**09.00 "Автограф" (6+).**
**09.30 Мультфильм.**
**10.00 "Физ-ра".**
**10.30 "Юные виртуозы Уфы".**
**10.45 "Городок АЮЯ".**
**11.00 "Бауырһаҡ".**
**11.15 "Шәп арба".**
**11.30 "Сулпылар".**
**11.45 "Алтын тирмә".**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.) (12+)..**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар".**
**14.00 "Помни меня" (6+).**
**15.00 "Песни военных лет" (12+).**
**16.00 "Серебряный сезон. Ретроспектива лучших матчей ХК "Салават Юлаев" 2013-2014 гг."**
**17.45 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа" (6+).**
**18.00 "Дорога к храму".**
**18.30 "Специальный репортаж".**
**18.45 "Урал батыр-2013" (6+).**
**19.30 "История признания" (6+).**
**19.45 "Новоселье с "Радугой" (12+).**
**20.00 "Любимое дело" (12+).**
**20.30 "Время спорта" (16+).**
**21.00 "Лото 6 из 40+ Джокер". Прямой эфир.**
**21.15 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**21.30 Новости недели (на русск. яз.).**
**22.15 "Баик" (6+).**
**23.15 "Вечер.com" (12+).**

✓ *Үҫенте нык оҙонайып китһә, уны ҙурыраҡ һауытҡа күсереп ултырта алаһығыҙ. Әгәр ҙә бындай мөмкинлек юҡ икән, уның өҫтөн ҡырҡып алығыҙ һәм һыулы һауытта тамырландырығыҙ. Уларҙың икеһе лә уңыш бирәсәк.*



*БАҠСА*



# МАРТТА ЛА...



## мәшәҡәттәр етерлек

**Яҙҙың тәүге айында йылы көндәр һалҡындар менән аралашып килеүсән. Баҡсасыларға был мәлдә тышта эш әллә ни күп түгел. Ағастарҙың тамырҙары туңмаһын өсөн уларҙың төбөндәге ҡар ҡатламын нығытып торорға кәрәк. Был температура үҙгәреп торған мәлдә ағастарҙы һаҡлаясаҡ. Ҡыуаҡтарға ятҡан еүеш ҡарҙы һелкетеп төшөрөргә кәңәш ителә. Марттың тәүге яртыһында ҙурыраҡ һауыттарға ҡар тултырып ҡалырға була. Был һыуҙы яҙ башында үҫентеләргә һибәләр. Теплицаға ҡар тултырыу ундағы тупраҡты дымға туйындырасаҡ.**

● Был айҙа емеш ағастарын ҡояштан һаҡлау сараһын күрегеҙ. Әгәр ҙә көҙҙән, һис булмаһа, февраль айында уларҙың олонон аҡламаған булһағыҙ, быны мартта эшләргә кәрәк буласаҡ. Аҡлау өсөн эзбиз иретмәһе иң яҡшыһы. Ямғырҙарға бирешмәй торған махсус иҙелмә әҙерләргә лә була. 10 литрлы биҙрә өсөн 2-3 кг аҡбур, 500 г баҡыр купоросы, 100 г казеиндан яһалған елем кәрәк. Баҡыр купоросын ҡайнар һыуҙа һәм казеиндан яһалған елемдә иҙәләр, аҡбур өҫтәйҙәр. Иҙелмә ҡуйы ҡаймаҡ ҡуйылығында булырға тейеш. Ағас олонон мотлаҡ ер йылынғансы ағартырға, шул саҡта ағасты зарарлы бөжәктәрҙән дә һаҡлаясаҡһығыҙ.

● Ағастар яланғас саҡта ботаҡтарҙағы ҡоротҡостарҙың ояларын йыйып алығыҙ. Еҙәй күбәләге, ғәҙәттә, ирга, сирень, энәлек, муйылда ҡышлай, бындай оянан яҙын 70-кә яҡын күбәләк сығасаҡ. Ояларҙы йыйып алғас, яндырырға. 10 л һыуға 1 кг эзбиз һалып иҙергә һәм уны ағастарҙың ботаҡтарына һиптерергә.

● Әгәр ҙә ағастарҙың ботаҡтарында зарарланған урындар булһа, һалҡындар үткәс тә, уны үткер бысаҡ менән таҙартырға. Тимер йәки баҡыр купоросы иҙелмәһе менән зарарһыҙландырырға, баҡса ыуары (ҡайнатылған ыҫмала) менән йәбештерергә.

● Марттың икенсе яртыһында, көндәр минус 5 градустан юғарыраҡ күтәрелгәс тә, ағастарҙың ботаҡтарын ҡырҡырға ярай. Сирле, ҡороған, дөрөҫ үҫмәгән ботаҡтарҙы ҡырҡырға.

● Төрлө ҡоротҡос бөжәктәрҙән ҡоштар яҡшы һаҡлай. Шуға ла ҡар иремәҫ элек баҡсаға ҡош оялары эшләп элергә.

● Тәжрибәле баҡсасылар был мәлдә орлоҡҡа тигән картуфты ла баҙҙан сығара. Орлоҡ йылы һәм яҡты урында 6 аҙна тирәһе ятырға тейеш, шуға самалап, быны ла хәстәрләп ҡуйығыҙ.

● Был ваҡытта сифатлы ашлама һатып ала башларға ла була. Түтәлдәргә янған тиҙәк һалыу ғына етмәй. Тупраҡта калий аҙ булһа, ҡыярҙар төрлө дөрөҫ булмаған формала үҫә. Калий ағас көлөндә күп. Яҙғы һыуҙар менән тиҙ иреүсән калий ерҙең аҫҡы ҡатламдарына китмәһен өсөн уны түтәл әҙерләгәс кенә һибеү яҡшыраҡ. Ябай калий ашламалары иһә ике төрҙә була - хлорлы калий һәм калий сульфаты. Сульфат күпкә ҡиммәтерәк тора, әммә хлорлы калий тупраҡты әселәндерә. Тәбиғи азот менән калий осраһа ла, үҫентеләр өсөн суперфосфатты магазиндан ғына алып була. Ул үҫемлектең уңыш биреү һәләтен көсәйтә. Комплекслы ашламалар һатып алырға ла була, тик уларҙың ниндәй тупраҡҡа ярағанын белергә кәрәк. Әгәр ҙә яҡын тирәгеҙҙә сәнәғәт предприятиелары бар икән, ғәҙәттә, тупраҡтың әселеге ҙур була. Тупраҡтың әселеген күпләп үҫкән ҡаҙ үләне, билсән, һөтлөгән күрһәтә. Бындай урында һарымһаҡ менән һуған ваҡ була, кәбеҫтә, сөгөлдөр ҡышын тиҙ боҙола.

# ПОМИДОР ҮҪТЕРЕРГӘ...

## яратабыҙ инде...



**Томат - баҡсасылар араһында иң билдәле йәшелсә, уны барыһы ла үҙе сәсеп үҫтерәлер, моғайын. Йыл һайын томаттың бер нисә сортын сәсеү дөрөҫөрәк булыр, оҙайлы ваҡыт һынау үткәндәренә өҫтөнлөк биреү ҙә яҡшы. Шунда ғына, йылдың нисек килеүенә ҡарамаҫтан, уңышҡа өмөт итергә була.**

Баҡсасылар белә, үҫентеләр өсөн әҙерләнгән тупраҡ сифатлы булырға тейеш. Ул артыҡ ауыр булмаһын, һыу менән һауаны ла яҡшы үткәрһен. Серетмә һәм ҡара тупраҡ (2:1), шулай уҡ тигеҙ өлөштә ҡара тупраҡ, магазинда һатылған махсус тупраҡ, ҡом алырға була. Мин был тупраҡҡа вермикулит өҫтәйем, шулай ҙа ниндәйҙер бер дөйөм генә талап юҡ. Үҙегеҙ нисек өйрәнгәнһегеҙ, шунан да яҡшыраҡ ысул булмаясаҡ.

Орлоҡто сәсер алдынан мотлаҡ дезинфекцияларға. 100 г һыуға 3 мл водород перекисе өҫтәп, 40 градус температураға тиклем йылытырға һәм 10 минутҡа орлоҡтарҙы һалырға. Орлоҡтарҙы шыттырыу өсөн бер нисә сепрәк туҡыма алып, уларға һандар һуғырға, ниндәй һан аҫтында ниндәй сорт икәнен яҙып ҡуйырға. Туҡыманы еүешләргә, орлоҡтар берберенһенә теймәҫлек итеп һалырға, икенсе осо менән ҡапларға һәм пластик контейнерға һалырға, ҡапҡасын ябырға, әммә һауа инерлек урын ҡалдырырға. Көнөнә бер нисә тапҡыр ҡапҡасты асып, елләтеп торорға. Томаттың орлоҡтары тиҙ шыта, 2-3 көндән уларҙы сәсергә мөмкин.

Ниндәй генә һауытҡа сәсһәң дә, уларҙы зарарһыҙландырырға. Һыу ҡуйы төҫкә ингәнсе марганцовка һалырға, һауыттарҙы 30 минут тоторға, һуңынан таҙа һыу менән йыуырға. Һауытҡа тупраҡты тултырғас, һыу һибеп, 5-6 сәғәткә полиэтилен менән ҡаплап торорға. Шырпы бөртөгө менән төртөп, соҡор яһағас, иплəп кенә орлоҡтарҙы төшөрөргә, өҫтөн тупраҡ менән ҡапларға. Шулай уҡ өҫтөн ҡаплап, йылы урынға ҡуйырға.

Үҫентеләр үҫкән бүлмәлә температура көндөҙ ҙә, төнөн дә 23 градус йылы булырға тейеш. Орлоҡтар сыҡҡас та, полиэтиленды алабыҙ, тупраҡ кипкән һайын һыу һибәбеҙ. Бер аҙнанан һуң бүлмәнең температураһын 17, 19 градусҡа тиклем түбәнәйтергә була.

Томат үҫентеләре күсереп ултыртыуға бирешмәй, шуға ла урын аҙыраҡ булһа, быны мотлаҡ эшләргә кәрәк. Тәүге ике япраҡ яҡшы итеп нығынып, 3-4 япраҡ 5 мм үҫкәс, күсерергә була. Бер юлы үҫентенең тамыры нығынһын өсөн уны ҡыҫҡартырға ла була. Күсерелгән үҫентеләрҙе тура ҡояш нурҙарынан һаҡларға кәрәк. Дөрөҫөн әйткәндә, мин быларҙы артыҡ эш тип иҫәпләйем һәм бер ҡасан ла үҫентеләрҙе күсереп ултыртҡаным юҡ. Шулай уҡ орлоҡтарҙы иртә менән сәсергә лә кәрәкмәй. Бейек булып үҫкән үҫентенән файҙа булмай. Томат үҫентеһе 40-50 көн эсендә яҡшы өлгөрә.

Һыуҙы ла йыш һибергә ярамай, юғиһә, үҫенте сирләй башлай. Профилактика маҡсатында аҙна-ун көнгә бер тапҡыр бер аҙ марганцовка өҫтәлгән һыу һибегеҙ, йоҡа ғына итеп көл һалып сығығыҙ.

Шулай ҙа үҫенте нык оҙонайып китһә, уны ҙурыраҡ һауытҡа күсереп ултырта алаһығыҙ. Әгәр ҙә бындай мөмкинлек юҡ икән, уның өҫтөн ҡырҡып алығыҙ һәм һыулы һауытта тамырландырығыҙ. Уларҙың икеһе лә уңыш бирәсәк.

Асыҡ һауаға ултыртыр алдынан үҫентеләрҙе бер аҙна тирәһенә һауыты менән тышҡа сығарып, сыныҡтырырға кәрәк. Ә үҫентене баҡсаға кисен йәки болотло көндә күсерегеҙ.

**Айбикә ЯҠУПОВА әҙерләне.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

***1436 һижри йыл.***

| Март (Йомадиәл әүүәл - Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 16 (25) дүшәмбе | 6:01 | 7:31 | 13:30 | 17:48 | 19:18 | 20:48 |
| 17 (26) шишәмбе | 5:59 | 7:29 | 13:30 | 17:50 | 19:20 | 20:50 |
| 18 (27) шаршамбы | 5:56 | 7:26 | 13:30 | 17:52 | 19:22 | 20:52 |
| 19 (28) кесе йома | 5:54 | 7:24 | 13:30 | 17:54 | 19:24 | 20:54 |
| 20 (29) йома | 5:51 | 7:21 | 13:30 | 17:56 | 19:26 | 20:56 |
| 21 (1) шәмбе | 5:49 | 7:19 | 13:30 | 17:58 | 19:28 | 20:58 |
| 22 (2) йәкшәмбе | 5:46 | 7:16 | 13:30 | 18:00 | 19:30 | 21:00 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙән алынды.*

*ХОККЕЙ*

САЛАВАТ ЮЛАЕВ хоккейный клуб

# ЕҢЕҮ КӨЙӨ...

## беҙҙең майҙанда ла уйнар әле

**Быйыл 8 март байрамы уңайынан тормош иптәшенән, егетенән ҡотлау һүҙҙәре ишетмәгән гүзәл заттар булдымы икән, тигән һорауға "Булды!" тип яуап биреүселәр әҙ булмаҫ, моғайын. Быны сәбәбе - 6 мартта "Салауат Юлаев" хоккей командаһының Магнитогорскиҙың "Металлург"ы менән уҙғарған бишенсе осрашыуҙағы еңелеүе һәм Гагарин Кубогы өсөн көрәште артабан дауам итеүҙән мәхрүм булыуы күпселек ир-аттың байрам кәйефен бөтөрҙө.**

2014-2015 йылғы уйын миҙгелендә Өфө командаһы үҙенең көйәрмәндәрен аҙ көйәләндермәне. Шулай ҙа "Салауат Юлаев"тың регуляр хоккей чемпионатының плей-офф уйындарына барып етеүенә бер кем дә шикләнмәне - хоккей яратыусылар ҙа, тренерҙар составы ла, КХЛ-дың башҡа командалары ла.

Финал уйынында юлаевсыларға ҡаршы алышҡа Магнитогорскиҙың "Металлург"ы сыҡты һәм тәүге матчта еңеү яуланы. Ләкин уйындың 4 еңеүгә тиклем барыуын күҙ уңында тотоп, өфөләр төшөнкөлөккә бирелмәне һәм икенсе осрашыуҙа еңеүҙе үҙ иҫәбенә яҙҙы. Юлаевсыларҙың 2-се һәм 3-сө уйындарҙағы уңышһыҙлығына ҡарамай, көйәрмәндәрҙең яратҡан командаһының Гагарин Кубогы өсөн алышын дауам итәсәгенә ышанысы кәмемәне. Шулай булмаһа, ике команданың Магнитогорск ҡалаһында барған 5-се алышын ҡарау өсөн кем эшен ташлап, кем балаһын балалар баҡсаһынан алырға онотоп, хатта киске аштан баш тартып, телевизор экранына йомолмаҫтар ине, моғайын. Тик меңәрләгән көйәрмәндең генә ышанысы бындай ҡаты алышта еңеү тәьмин итә алмай шул. Беренсе осорҙо ышаныслы ғына башлап ебәргән һәм матчтағы тәүге шайбаны үҙ иҫәбенә яҙған юлаевсылар хужаларҙың көслө һөжүменә ҡаршы тора алманы. Матч һөҙөмтәһе хужалар файҙаһына 3:1 тамамланды, серия иҫәбе Майк Кинэн тәрбиәләнеүселәре файҙаһына - 4:1. Шулай итеп, "Металлург" Гагарин кубогы өсөн алышты дауам итә, ә "Салауат Юлаев" 2015-2016-сы уйын миҙгеленә көс йыйыу өсөн ялға китте.

Команданың ағымдағы уйын миҙгелен уңышһыҙ тамамлауы етәкселек составында үҙгәрештәргә алып килде лә инде. 7 мартта "Салауат Юлаев" хоккей командаһының генераль директоры итеп Өфө командаһы тәрбиәләнеүсеһе Александр Семак һайланды. Ул был поста Рөстәм Ишалинды алыштырҙы. Әлеге ваҡытта күптәрҙе, команданың баш тренеры Владимир Юрзинов үҙ урынында ҡалырмы-юҡмы, тигән һорау борсой. Нисек кенә булмаһын, ниндәй генә етәкселәр алмашынмаһын, барлыҡ ышаныс барыбер уйынсыларҙа. Шуға күрә, киләһе миҙгелдә бынан алдағы йылдарҙа боҙҙа ҡойон уйнатҡан, көрәштәштәре өсөн аяуһыҙ ярышташ булған, көйәрмәндәренә еңеү шатлығы бүләк итеүсе "Салауат Юлаев" хоккей командаһын күрербеҙ, тип ышанабыҙ. Башҡаса мөмкин дә түгел. Беҙҙең майҙанда ла еңеү көйө уйнаясаҡ әле.

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА.**

✓ *Йәш ҡайынға терәлеп, ҡарт ҡайын ҡырҡ йыл йәшәгән.*
*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# БӘЙГЕСЕЛӘР ҺАЙЛАП АЛЫНДЫ

**Өфөнөң "Театро" клубында "Һылыуҡай-2015" республика телевизион конкурсына кастинг үткәрелде.**



Унда 30-ҙан ашыу ҡыҙ ҡатнашты. Финалсыларҙы Республика халыҡ ижады үҙәге директоры Байрас Ишбирҙин, РФ Дәүләт Думаһы депутаты ярҙамсыһы Гөлнур Ҡолһарина, "Һылыуҡай-2015" бәйгеһе продюсеры Илдар Ишкинин, конкурстың режиссеры Айгөл Сиражетдинова, хореограф Азалия Дилмөхәмәтова, Башҡортостандың Ҡатнаш көрәш сәнғәте федерацияһы президенты Руслан Зарипов, Башҡортостандың халыҡ артисы Риф Ғәбитов составындағы жюри һайлап алды.

Рәсәй ҡалаларынан һәм республика районы дарынан 12 һылыуҡай финалға үтте. Улар - Әлфиә Килдейәрова (Мәскәү), Илнара Рахманғолова (Баймаҡ районы), Илнара Үтәшева (Санкт-Петербург), Светлана Кожаринова (Магнитогорск), Әлиә Әбдрәшитова, Ләйлә Кәримова (Бөрйән районы), Гөлназ Ильясова (Ишембай), Гөлшат Манапова (Салауат районы), Зәлиә Яппарова (Күгәрсен районы), Диана Мөхәмәтйәнова (Өфө), Илмира Моталова (Хәйбулла районы) һәм Нәркәс Насирова (Сибай).

Әҙерлек осоронда ҡыҙҙар "Һылыуҡай көндәлеге"ндә төшәсәк. Тиҙҙән уны "Туған тел" каналында ҡарарға мөмкин буласаҡ. Шулай уҡ улар бейеү, актерлыҡ оҫталығы, йыр һәм дефиле буйынса профессиональ уҡытыусылар менән шөғөлләнәсәк. 12 мартта "Интернет гүзәле" номинацияһында тауыш биреү башлана.

- Бәйгенең финалы апрель баштарында "Башҡортостан" дәүләт концерт залында үтә, - тип хәбәр итте "Һылыуҡай-2015" конкурсының матбуғат секретары Динара Кәримова.

Конкурсты ойоштороусылар - Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, "Туған тел" телеканалы һәм "Һомай" дефиле-театры. Бәйгегә РФ Дәүләт Думаһы депутаты Марсель Йосопов матди ярҙам күрһәтә.

# ОСОШ УҢЫШЛЫ БУЛҺЫН!



**Режиссер Айнур Асҡаровтың яңы "Әсә" нәфис фильмы премьераһы баш ҡаланың "Родина" кинотеатрында ҙур аншлаг менән барҙы.**

"Әсә" фильмы 21 апрелдән 26-на тиклем Һамарҙа үтәсәк "Балаларға - кино" XX Халыҡ-ара фестивалендә ҡатнашасаҡ. Бынан тыш, фильм Канн кинофестиваленең һайлап алыу комиссияһына ебәрелде. Европа тәнҡитселәре Айнур Асҡаровтың яңы фильмының мөмкинлектәрен юғары баһалай, тип хәбәр итте продюсер Фәнил Ғәлимов.

Әлеге көндә "Аркайым-продакшн" студияһы республика райондары хакимиәттәре менән прокат тураһында һөйләшеүҙәр алып бара. Марттың 20-дә ҙур киномарафон башлана - маршрут 50-нән ашыу ауылды үҙ эсенә аласаҡ. Фильмды киномобилдә күрһәтәсәктәр. Урындарҙа режиссер һәм ижади төркөм менән осрашыуҙар уҙғарыу ҡаралған.

Ҡыҫҡа метражлы фильм "Саҡ менән Суҡ" бәйетенә нигеҙләнеп төшөрөлгән. Сценарийҙы драматург Шәүрә Шәкүрова яҙған, операторы - Анна Рожецкая. Игеҙәктәрҙе - Йылайыр районынан Айгиз менән Нургиз Таҡаловтар, Шәүрәне - Башҡорт дәүләт академия драма театры артисы Юлиә Ғәләүетдинова, Ританы -телевидение алып барыусыһы Ғәлиә Вәхитова, олатай ролен популяр актер һәм режиссер Азат Йыһаншин башҡара.

ЯҢЫ КИТАП

# ТЕРЕ САЛАУАТЫБЫҘ!

**З. Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап " нәшриәтендә "Бөйөк Салауат" исемле әҙәби-нәфис китап баҫылып сыҡты. Унда Салауат Юлаевтың үҙенең шиғырҙары һәм уның хаҡында быуаттар һуҙымында башҡорт, татар, рус, инглиз, төрөк, сыуаш, белорус һәм башҡа телдәрҙә ижад ителгән әҙәби әҫәрҙәр өлгөләре тәҡдим ителә .**

Ошо йыйынтыҡҡа минең дә "Енеүсе", "Салауаттың әйткәне", "Булайыҡ Салауаттай!" һәм " Тере Салауатыбыҙ!" тигән дүрт шиғырым ингән. Һуңғыһынан гәзит уҡыусылар өсөн өҙөк килтереп китәйем:

*Бөтөп бара, имеш, тиҙәр,*
*Һеҙҙең башҡорт затығыҙ.*
*Бары ташкын ғына, тиҙәр,*
*Һеҙҙең Салауатығыҙ.*
*Алдай улар, ышанмағыҙ,*
*Тере Салауатыбыҙ!*
*Имән ағасындай ныҡлы*
*Беҙҙең башҡорт затыбыҙ!*
*Беҙҙең күңелдәрҙә йәшәй*
*Уның рухы, булмышы.*
*Ул бит Тыуған илкәйемдең*
*Тынмаҫ һайрар бер ҡошо.*
*Гөрләп сәскә ата бөгөн*
*Башҡортостан-йортобоҙ.*
*Беҙҙең йөрәктәрҙә йәшәй,*
*Йәшәр, Салауатыбыҙ!*
*Теләһәгеҙ, йөрәгемә*
*Мылтыҡ терәп атығыҙ!*
*Үлгәндә лә ҡабатлармын-*
*Тере Салауатыбыҙ!*




Александр Пушкин, Шәйехзада Бабич, Степан Злобин һәм Рәми Ғарипов кеүек даһиҙар менән бер китаптың авторҙашы булыу үҙе бер ҡыуаныс бит. Данлы ир исеме иҫкермәй. Батырҙар мәңгелеккә халыҡ күңелендә ҡала. Беҙҙең күңелдәрҙә Бөйөк Салауат батыр рухын яңыртыуға күп көс һалған, ошо бәрәкәтле китапты төҙөүсе билдәле яҙыусы Ғәлим Хисамовҡа ҙур рәхмәт әйткем килә.

**Рамай ҠАҺИР,**
**РФ һәм РБ Яҙыусылар союзы ағзаһы.**
**Учалы районы.**

# ӨР-ЯҢЫ НӘШРИӘТ

**Өфөләге "Сыңрау торна" нәшриәтендә шағирә Фирүзә Абдуллинаның "Барыһы ла яҡшы буласаҡ!" тип аталған шиғырҙар китабы донъя күрҙе. Йыйынтыҡта авторҙың ҡатын-ҡыҙ күңелен сағылдырған тормош, мөхәббәт, матурлыҡ хаҡында лирик шиғырҙары тупланған.**

СЫҢРАУ ТОРНА

"Сыңрау торна" нәшриәте Әҙәбиәт йылында эшләй башланы. Төп маҡсаты - башҡорт шағирҙарының китаптарын нәшер итеү. Нәшриәттә тәүгеләрҙән булып Ғилман Ишкининдың "Мин, бәлки, урап та килмәҫмен..." шиғри йыйынтығы баҫылып сыҡты.

Фирүзә Абдуллина Баймаҡ районында тыуған, Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлаған. Хәҙер Ҡырмыҫҡалы районында рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләй. Шиғырҙары "Бәйләнештә" сайтындағы "Ғәжәп донъя" төркөмөндә баҫыла.

- Яңы шиғырҙарымдың баҫылыуын көткән уҡыусыларым мине ижадҡа дәртләндерә. Юғары маҡсаттар ҡуймайым, илһам килгәндә, ҡулыма ҡәләм алам. Мин тормошто, кешеләрҙе яратам, һәр нәмәнән ҡыуаныс табып, изгелек ҡылып йәшәргә тырышам, - ти автор.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ШАУЛЫ БАҘАР...

## бурҙы йәшерер

Йәш ҡайынға терәлеп, ҡарт ҡайын ҡырҡ йыл йәшәгән.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Егерме биштә һәр кем талантлы, талантты илле йәшкә тиклем һаҡлауы ҡыйын.

**(Эдгар Дега).**

Шундай кешеләр ҙә була: уларға кешеләрсә мөнәсәбәт күрһәтә башлаһаң, хайуанға әйләнә.

**(В. Ключевский).**

Ҡатын-ҡыҙ мөхәббәттә һәм нәфрәттә ирҙәргә ҡарағанда хайуаныраҡ.

**(Фридрих Ницше).**

Нимәгәлер ышанырға урыны булған һәм юғалтыр нәмәһе булмаған кешеләр - ер йөҙөндәге иң ҡурҡыныс кешеләр.

**(Эдмунд Берк).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл:"Бер кеше Сократҡа килгән дә, шулай тип һораған:**

**- Ә беләһеңме минә нимә тине һинең турала бер дуҫың?**

**- Тукта! - тип һүҙенән бүлдергән уны Сократ. - Тәүҙә әйтә торған һүҙеңде өс ҡат иләк аша үткәр...**

**- Өс ҡат иләк аша?.. - тип аптыраған теге кеше.**

**- Кемгәлер ниҙер әйтер алдынан һүҙеңде өс ҡат иләк аша үткәрергә кәрәк. Иң тәүҙә - Хәҡиҡәт иләге аша үткәр. Һин хәҙер минә әйтәсәк һүҙең ысынлап та Хәҡиҡәт икәнен үҙең ышанаһыңмы? - тигән Сократ.**

**- Юҡ. Мин ишетеп кенә ҡалдым...**

**- Бик яҡшы. Тимәк, һин был һүҙеңдең Хәҡиҡәтме, түгелме икәнен белмәйһең. Улайһа, һүҙеңде икенсе - Изгелек иләге аша үткәрәйек. Һин минең дуҫым тураһында ниндәйҙер яҡшы хәбәр әйтергә теләйһеңме? Юҡ, киреһенсә, тиһеңме? Тимәк, - тип дауам иткән Сократ, - һин минең дуҫым тураһында ниндәйҙер насар һүҙ әйтергә йыйынаһың, әммә ул һүҙҙең дөрөҫмө, түгелме икәнен белмәйһең... Хәҙер һин әйтәсәк хәбәрҙе өсөнсө иләк - Файҙа иләге аша үткәрәйек. Һин әйтергә теләгән һүҙ минең өсөн файҙалымы, кәрәкме ул миңә?**

**- Юҡ, файҙалы ла, кәрәкле лә түгел...- тип мығырҙанған әлеге кеше.**

**- Шулай итеп, һин миңә әйтергә теләгән хәбәрҙең файҙаһы ла, кәрәге лә, изгелеге лә юҡ, шулай булғас, ул хаҡта һөйләп, минең һаулыҡҡа зыян килтереү һиңә нимәгә кәрәк? Кәрәкмәй, әлбиттә. Һин минең һау-сәләмәт булыуымды теләйһең икәненә ышанам, шуға ул хәбәреңде тыңлап тормайым..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 13 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5010
Заказ 1152